ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# КискеӨфө

28-3 ғинуар - февраль (һыуығай - шаҡай)

2017

№4 (734)

kiskeufa.ru • blog.kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

"Көтөлмәгән" президенттан...
нимә көтөргә?



5

Балаларҙы ниндәй ысул менән тәрбиәләргәме?
Ҡушылғанын - үтәргә, тыйылғанынан - тыйылырға!



8-9

Һәр ерҙә лә тарих эҙләйем...



11

Үҙебеҙсә кейенәйек һәм...
кейемдәрҙең атамаһын дөрөҫләп әйтәйек



12

ТВ-программа 14

***Һәр бөйөк эш ябай, етди, һиҙелеп бармаған шарттарҙа башҡарыла. Ялтырауыҡтар, шау-шыуҙар, кәперенеүҙәр аҫтында һөрөп тә, сәсеп тә, төҙөп тә, хатта фекерләп тә булмай.***

**(Лев Толстой).**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Экология һәм айырым һаҡлауға алынған тәбиғәт биләмәләре йылы башланды. Быйыл ошо йәһәттән иң ҙур иғтибар бүленергә тейешле йүнәлештәр хаҡында нимә әйтерһегеҙ?

2017 ГОД ЭКОЛОГИИ В РОССИИ

***Сәфәрғәле ЙӘНТҮРИН, биология фәндәре докторы, профессор, БДУ-ның Сибай институты экология кафедраһы мөдире:*** Быйыл иң ҙур иғтибар бирелергә тейешле йүнәлеш - ул етештереү һәм көнкүреш ҡалдыҡтары өсөн полигондар эшләү мәсьәләһе булырға тейештер. Дөрөҫөн әйткәндә, Урал аръяғында бөгөнгө талаптарға яуап бирерҙәй полигондар юҡ: Сибайҙа ла, Баймаҡта ла, Асҡарҙа йә Аҡъярҙа булһынмы... Үткән быуаттың 50-се йылдарында уҡ һалына башлаған был ҡый түгеү урындары күптән тулған һәм улар ҡот осҡос хәлдәләр. Был хаҡта мин бер заман республика етәкселегенә рәсми хат та яҙып ебәргәйнем. 2018 йылдарға, бәлки, берәй сара күрелер, тигәнерәк яуап та алғайным, тик был йәһәттән бер ни ҙә эшләнмәй әле. Әйткәндәй, бындай полигондар өсөн урын табыуы - үҙе бер бәлә. Сибайҙа, мәҫәлән, юҡ ундай биләмә. Ошондай ҙур төбәк өсөн ҡалдыҡтарҙы эшкәртеү буйынса, исмаһам, бер предприятие кәрәктер бит инде, юғиһә, ер менән тигеҙләп, тапатып та, яндырып та ҡарайҙар, ә яндырырға ярамай: унан бит тын алып та булмаясаҡ! Баймаҡта шул арҡала һулар һауа бигерәк йыш боҙола. Етмәһә, ундағы асфальт заводы йылдам төҙөлөш арҡаһында ҡала уртаһында тороп ҡалды һәм төтөнөн борҡотоп, һулар һауаны бысратып ултыра. Уны ҡаланан ситкә күсереү өсөн, үҙегеҙ беләһегеҙ, бик күп аҡса кәрәк.

Быйылғы йыл атамаһының икенсе өлөшө - айырым һаҡлауға алынған биләмәләргә ҡағыла. Икенсе мөһим мәсьәлә тап ана шундай объекттар ҙа инде, тип уйлайым. Быуаттар буйына халҡыбыҙ ижадында, йыр-көйҙәрендә данланып килгән һәм үҙен һирәк осрай торған үҫемлектәр, йәнлектәр төйәк иткән күк Ирәндек тауҙары ла һаҡсыл мөнәсәбәткә бик мохтаж. Ошо биләмәләрҙе тәбиғәт ҡомартҡыһы тип иғлан итеп, ҡурсаулыҡмы, тәбиғәт паркымы итеп төҙөү тураһында һүҙ башлап, уның проектын эшләп ебәреүебеҙгә лә тиҫтә йыллап ваҡыт уҙып китте. Бер ниндәй үҙгәреш тә юҡ...

**(Дауамы 2-се биттә).**

ХӘТЕРКИТАП

# ШӘЙЕХЗАДА БАБИЧ НИСЕК ҺӘЛӘК БУЛҒАН?

***...Башҡортостан иҫән ҡала, тиһәң,***
***Бер йәнемә миллион үлем бир!***
***(Ш. Бабич).***





**Шәйехзада Бабич кемдәр тарафынан һәм нисек һәләк булған? Ни өсөн берәүҙәр уны Темәстән Йылайыр аша Мораҡҡа, типографияны күсереп алып китеп барғанда аҡтар ҡулынан һәләк булды, ти. Ә икенселәре, киреһенсә, Ырымбурҙан Йылайыр аша Темәскә китеп барғанда ҡыҙылдар тарафынан үлтерелгән, тип бара. Был һорауға бөгөн, шағир вафатына бер быуатҡа яҡын ғүмер уҙғас, яуап эҙләүҙең кәрәге бармы? Минеңсә, бар, хатта ошо һорауҙарға теүәл яуап таба алмаған хәлдә лә, уйланырға һәм эҙләнергә тейешбеҙ, сөнки тарихҡа битараф булмау - халыҡты йәшәткән һәм йәшәтәсәк көс ул!**

**(Дауамы 6-сы биттә).**

12+

***✓ Йыл һайын беҙҙең республикала ғына ла сүплеккә 2 миллион тоннанан ашыу сүп-сар, көнкүреш һәм етештереү ҡалдыҡтары ташлана. Был һәр кем өлөшөнә 300-ләп килограмдан ашыу сүп-сар тура килә.***

"КИСКЕ ӨФӨ"НӨ УҠЫЙБЫҘ!

# РУХИ ҠОҘОҠ УЛ




**Беҙ, уҡытыусылар, милли матбуғатһыҙ йәшәй алмайбыҙ. "Киске Өфө" гәзитен рухи ҡоҙоҡ тип йөрөтәм үҙемсә яратып. Уның шифалы һыуы ҡоромаһын өсөн уны уҡырға, файҙаланырға, уға яҙылырға тырышам.**

Эй, бынау оптималләштереү тигән нәмәләре! Мәктәптә эшләп йөрөүсе уҡытыусыларҙың да сәғәттәр һаны кәмене, һөҙөмтәлә, беҙ күп кенә яраткан баҫмаларыбыҙға ла яҙыла алмайбыҙ. Ләкин сараһын таптыҡ, башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусылары үҙ-ара бүлешеп алып, 5 төрлө гәзиткә яҙылдыҡ. Уларҙы кабинетыбыҙҙа йыйып, төпләп барабыҙ. "Киске Өфө"нө айырыуса яратабыҙ, ул дәрестә лә, класс сәғәттәрендә лә, төрлө саралар үткәргәндә лә ҙур ярҙамсы. Уҡыусыларыбыҙ инша яҙғанда ла ҡуллана уны, сөнки унда милләтебеҙгә ҡағылышлы мәсьәләләр, йәшәү мәғәнәһе, рух, аҡыл, ғилем тураһында бик йөкмәткеле, фәлсәфәүи, аналитик мәҡәләләр, цитаталар, мәҡәл-әйтемдәр табалар. Әхмәтзәки Вәлиди тураһында ғилми хеҙмәт яҙҙыҡ, был юлы ла "Киске Өфө"нө ҡулландыҡ. Бер ҡайҙа ла, хатта күптәр ауыҙ һыуын ҡоротоп маҡтаған, бөтөн нәмә лә бар тигән дан алған интернетта ла булмаған фото теүәл ун йыл элек "Киске Өфө"лә баҫылған! Ул уҡыусылар өсөн ҙур табыш, ҡыҙыҡлы тикшеренеү объекты булыуы менән ҡиммәт.

"Киске Өфө"нө үҙенсәлекле милли баҫма булғаны, башҡаларға оҡшамағаны өсөн үҙ итәбеҙ. Ул сенсация, шаҡ ҡатырғыс яңылыҡ, иҫте китәрерлек мәғлүмәт артынан ҡыумай. Ә киреһенсә, милләтебеҙҙе тәрбиәләй, уның күңеленә рух, йөрәктәргә осҡон һала.

**Зилә ПСӘНЧИНА.**
**Күгәрсен районы Мораҡ башҡорт гимназияһы уҡытыусыһы.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## *Экология һәм айырым һаҡлауға алынған тәбиғәт биләмәләре йылы башланды. Быйыл ошо йәһәттән иң ҙур иғтибар бүленергә тейешле йүнәлештәр хаҡында нимә әйтерһегеҙ?*

**(Башы 1-се биттә).**

***Вәсилә ЯНЫБАЕВА, биология фәндәре кандидаты, Башҡортостан дәүләт ҡурсаулығы директоры:*** Мин дә хөрмәтле һәм абруйлы профессорыбыҙҙың фекеренә ҡушылам. Ысынлап та, бөгөн ил, республикабыҙ күләмендә генә түгел, ә тотош Ер шары кимәлендәге мөһим мәсьәлә был. Кешелек тиҙҙән үҙе "етештергән" ҡалдыҡтар һәм сүп-сарға күмеләсәк, былай барһа... Уйлауы ла ҡурҡыныс булып китә. Экология һәм тәбиғәттән файҙаланыу министрлығы материалдарынан күренеүенсә, йыл һайын беҙҙең республикала ғына ла сүплеккә 2 миллион тоннанан ашыу сүп-сар, көнкүреш һәм етештереү ҡалдыҡтары ташлана. Йән башына иҫәпләгәндә, был, тимәк, һәр кем өлөшөнә 300-ләп килограмдан ашыу сүп-сар тура килә тигәнде аңлата. Мине бигерәк тә ауыл биләмәләрендәге теләһә ҡайһы урындарҙа рөхсәтһеҙ-ниһеҙ барлыҡҡа килеүсе сүп-сар өйөмдәренең күп булыуы борсой.

Шулай, күптән түгел Рус география йәмғиәте материалдары килеп эләккәйне ҡул аҫтына. Шунда ҡот осҡос мәғлүмәттәр килтерелә: Башҡортостан буйынса барлығы 2 мең гектарҙан ашыу майҙанды биләүсе 2,5-3 меңләп ана шундай рөхсәтһеҙ сүп-сар өйөмө иҫәпләнә. Республикалағы 54 муниципаль райондың дүртәүһендә генә лә 900 урынға даими рәүештә сүп-сар түгелә, тиелә. Әйткәндәй, сүп ташлау өсөн уйлап та тормайынса балалар шифаханалары, йылға-күл буйҙары, зыярат йәки оло юлдарға яҡын урындар "һайлана". Был йәһәттән урындарҙағы идара итеү органдары иңенә ни тиклем яуаплылыҡ төшөүен күҙ алдына килтереү ҡыйын түгел, тик уларға был өлкәлә үҙ вәкәләттәрен бойомға ашырыу өсөн аҡса юҡ. Ә инде һәр төрлө күҙәтеү органдары район һәм ауыл биләмәләре етәкселәренә штраф һалып, күрһәтмәләр яҙыуҙан бушай алмай. Сүп-сар һәм ҡалдыҡтарҙы эшкәртеү мәсьәләһен артабан да кисектерә килеү енәйәткә тиң буласаҡ. Хәтерләһәгеҙ, бынан бер нисә йыл элек "Башҡортостан Республикаһында 2011-2020 йылдарға ҡаты көнкүреш ҡалдыҡтарына идара итеү системаһын камиллаштырыу" тигән маҡсатлы программа ҡабул ителгәйне. Шуға ярашлы, төбәктә ҡаты көнкүреш ҡалдыҡтарын икенсе сеймал булараҡ эшкәртеү тармаҡтарын үҫтереүгә ҙур иғтибар биреләсәк, тип әйтелгәйне. Ул заманға ла биш йыл үтеп киткән, һаман да шуға өмөт итәбеҙме?..

***Фәрғәт ИШКИЛДИН, пенсионер:*** Бөгөнгө көндә иң мөһиме тип мин эскән һыуыбыҙ, һулаған һауабыҙ һәм туҡланған ризыҡыбыҙҙың экологик йәһәттән сифатын әйтер инем. Был осраҡта мин тәү сиратта ҡалаларыбыҙ мөхитен күҙҙә тотам. Кеше һаулығына иң беренсе йоғонто яһағаны - ул эсәр һыуыбыҙ. Өфөлә бына инде ҡырҡ йылдан ашыу йәшәү осоронда мин фатирҙарыбыҙҙы эсәр һыу менән тәьмин итеүсе торбаларҙың яңыларына алмаштырылғанын күргәнем юҡ. Әлбиттә, был эш бик күп аҡса талап итә, ләкин хәҙер беҙҙең ундай аҡсабыҙ бар: капремонт өсөн күпме бол йыйыла! Һәр бер йорт үҙенә туплап, ана шул аҡсаны әллә була, әллә булмай торған ремонтты көтөп ғүмер үткәргәнсе, бөтәбеҙ өсөн дә бөгөн кәрәк булған таҙа һыу өсөн тотона алабыҙ бит. Һулаған һауабыҙ ҡот осҡос. Үткән быуаттың 80-90-сы йылдарындағы 30 процент урынына, ҙур ҡалаларҙа бөгөнгө көндә һулар һауа 50-нән алып 90 процентҡаса зарарлы бүлендектәр менән бысратыла. Тимәк, беҙ көн дә диоксид, көкөрт, углерод, азот диоксиды һәм окисы, хатта ҡурғаш, көкөртлө ангидридтар һәм башҡа химик бүлендектәр менән "һыйланабыҙ". Етмәһә, һуңғы йылдарҙа ҡалабыҙ өҫтөн "смог", йәғни һөрөм, төтөн ҡаплап, тын алыуҙы ауырлаштыра башланы. Эколог һәм медиктар ана шул һөрөмдөң үпкә яман шешенә сәбәп булыуы ихтимал, тип саң ҡаға. Шулай уҡ көн дә ашаған ризығыбыҙ хаҡында ла хәҙер, бөгөн магазин кәштәләрендә таҙа һәм саф сеймалдан етештерелгән аҙыҡ-түлек юҡ, тип йәшермәй әйтә башланылар. Бер көн "Бизнес -FM" радиоһы көнө буйы шул хаҡта ғына һөйләп торҙо. Телевидениенан да был хаҡта тапшырыуҙар йыш була. Ҡыҫҡаһы, бөгөн хатта икмәк, шәкәр, май кеүек төп аҙыҡтарға ла ҡушмаған нәмә ҡалдырмайҙар икән! Контроль булмауы бына нимәгә килтерә. Шунан нисек сәләмәт булырға? Экология йылының төп хәстәрлеге бына ошо мәсьәләләрҙе тәртип һәм контролгә һалыу булһын ине. Кеше һаулығы һәм сәләмәтлеге өсөн аҡса йәлләргә, натураль сеймалды экономияларға ярамай!

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**

КЕМ АЛЫҠ!

# МӨХТӘРӘМ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!




**Белеүегеҙсә, гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакциябыҙға ебәргән уҡыусыларыбыҙ даими рәүештә беҙҙең бүләктәргә лайыҡ була килә. Декабрҙә 2017 йылдың тәүге яртыһы өсөн "Киске Өфө"гә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргәндәрҙән:**

Хәйбулла районы Яңы Ергән ауылынан Фәрзәнә Юланова - **"Антология поэзии Башкортостана;**

Учалы ҡалаһынан Нуретдиновтар, Баймаҡ районы Ниғәмәт ауылынан Г. Мансурова - **Рәшит Назаровтың "Ер һәм Йыһан йыры";**

Баймаҡ районы Үрге Йайыҡбай ауылынан Мансур Шарапов - **Ноғман Мусиндың "Алдар батыр";**

Әбйәлил районы Хәлил ауылынан Ирмәк Ташбулатов - **Әхмәр Үтәбайҙың "Сәхрә";**

Бөрйән районы Иҫке Собханғол ауылынан Гөлшат Нәҙершина, Белорет районы Зөйәк ауылынан Г. Мырҙагилдина - **Рәйес Түләктең "Мең дә икенсе кис...";**

Баймаҡ районы Һаҡмар ауылынан Ишбикә Маннапова, Миәкә районы Боғҙан ауылынан А. Солтанова, Салауат районы Янғантау ауылынан А. Ишбулдина - **"Бураҡаевтар ижады";**

Архангел районы Аҙау ауылынан Хәмдиә Ғәлина, Архангел ауылынан М. Лоҡманова, Баймаҡ районы Иҫке Сибай ауылынан М. Усманова, Йылым ауылынан Рөстәм Ишбаев, Ниғәмәт ауылынан Әсмә Мырҙағәлина, Шишмә районы Түбәнге Хәжәт ауылынан Ғ. Төхвәтуллин, Белорет районы Уҫманғәле ауылынан Рәйсә Салауатова, Мәләүез ҡалаһынан Лена Хәйруллина, Ғафури районы Сәйетбаба ауылынан Мәрүәрә Сабитова, Өфө ҡалаһынан Әбүбәкировтар - **Гүзәл Ситдиҡованың "Йәннәт баҡсаһы";**

Бишбүләк районы Бикҡол ауылынан Клара Халфина, Баймаҡ районы Үрге Таулыҡай ауылынан Х. Фәхретдинова, Ҡолсора ауылынан М. Сынғыҙова, 2-се Этҡол ауылынан Ғәлиә Мәжитова, Белорет районы Ҡаһарман ауылынан Нажиә Байымова, Бирҙеғол ауылынан Рәшиҙә Хажина, Әбйәлил районы Тәпән ауылынан Булат Шакирйәнов, Мәләүез районы Сарлаҡ ауылынан Мәҙинә Фазләхмәтова, Йылайыр районы Үрге Ғәли ауылынан С. Асаинова, Ейәнсура районы Үрге Муйнаҡ ауылынан Наилә Райымғужина - **2017 йылға "Башҡортса дини календарь";**

Ишембай районы Ураҙбай ауылынан Фәниә Йәмилева, Баймаҡ районы Һәмән ауылынан Гөлгөнә Асҡарова, Ишей ауылынан Ҡарасуриндар, 1-се Этҡол ауылынан И.

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов Башҡорт дәүләт университеты студенттары менән осрашты. Студенттарҙың һорауҙарына яуап биреп, төбәк Башлығы Башҡорт дәүләт университетының терәк университет исемен алыуы буйынса әүҙем эш алып барылыуын билдәләне. Ошо исемгә республикала "Газпром"дың терәк юғары уҡыу йорто булған Өфө дәүләт нефть техник университеты ғына эйә. Мифтахетдин Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университетына терәк гуманитар юғары уҡыу йорто статусы бирелгән.

✓Башҡортостан Республикаһы "Роснефть" нефть компанияһы асыҡ акционерҙар йәмғиәте менән Хеҙмәттәшлек тураһында килешеү төҙөнө. Документҡа Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов һәм "Роснефть" компанияһының Баш башҡарма директоры Игорь Сечин ҡул ҡуйҙы. Килешеү төбәкте комплекслы үҫтереүгә булышлыҡ иткән сәнәғәт, социаль программаларҙы тормошҡа ашырыуға, шулай уҡ хужалыҡ эшмәкәрлеген бойомға ашырыу өсөн уңайлы шарттар тыуҙырыуға йүнәлтелгән.

✓2019 йылда Өфөләге тимер юл вокзалын реконструкциялауҙы тамамлау күҙаллана. Был хаҡта "Рәсәй тимер юлдары" асыҡ акционерҙар йәмғиәте филиалы - Куйбышев тимер юлының яңы начальнигы Рәшит Сайбаталов Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов менән осрашыуҙа белдерҙе. Осрашыуҙа улар тимер юл аша йәйәүлеләр күперен төҙөү, Өфөнө көньяҡтан урап үткән тимер юлын һалыу, ҡала яны тимер юл составын яңыртыу һәм йөк ташыу өсөн Шаҡша тимер юл станцияһын асыу мәсьәләләрен тикшерҙе.

✓Радий Хәбиров Мәскәү өлкәһе Красногорск ҡалаһы башлығы вазифаһын башҡарыусы итеп һайланды, тип хәбәр итә федераль киң мәғлүмәт саралары. Красногорск - Мәскәү өлкәһендәге ҙур муниципалитеттарҙың береһе. Дәүләт власы органдарының бер өлөшө шунда урынлашҡан. 2016 йылдың 26 февралендә 2018 йылдан Красногорск Мәскәү өлкәһененң административ үҙәге буласаҡ тип иғлан ителде.

✓Рәсәй Хөкүмәте ауыл биләмәләренә һәм етештереү объекттарына юл төҙөү өсөн төбәктәргә 8,3 миллиард һум аҡса бүлде. Федераль субсидия 54 төбәккә бүленә, шул иҫәптән Башҡортостанға ла. Республика 634,1 миллион һум аласаҡ.

*✓ Ситтә лә үҙ миллилегеңде һаҡлап алып ҡалыуы бер ҙә ҡатмарлы түгел. Бер милләт вәкиленән торған ғаилә - үҙе бер дәүләт. Бына шул бәләкәй генә дәүләт эсендә үҙ телеңде, динеңде онотмау һәм быуындан-быуынға күсереү кәрәк.*

*МИЛЛӘТТӘШКӘ ӨНДӘШЕҮ*

**Берәй милләттәшеңә үҙ телеңдә өндәшеп, яуапты башҡа телдә алыу айырыуса ҡала ерендә йәшәгән кешеләр өсөн бик тә тәбиғи хәл. Быға әллә ни иғтибар итеп тормайбыҙ, һин дә мин урыҫса һөйләшеп алабыҙ ҙа китәбеҙ. Аллаға шөкөр, ул телде лә беләбеҙ... Әммә бына республикабыҙҙан алыҫта, башҡа өлкәләрҙә шундай хәлдәргә юлыҡһаң, теге йәки был яҡташың өсөн, хатта бөтөн милләтең өсөн ниндәйҙер ҡыйынһыныу тойғолары кисереп, ныҡ ҡына уйланырға мәжбүр булаһың.**

# ЮҒАЛМАҒЫҘ, БАШҠОРТТАРЫМ!



Йылдар буйы ят яҡтарҙа йөрөп, бөтөнләйгә тиерлек урыҫлашып бөткән яҡташтарыбыҙға ҡарап әрнеүҙәр төрлө уйҙарға һала. Бәғзе ваҡыт үҙебеҙҙе республикабыҙҙы төйәк иткән башҡа халыҡтар менән сағыштырып ҡарайым. Беҙ торған ҡала кварталында бер нисә әрмән ғаиләһе йәшәй. Улар һәр саҡ бер-берәһенә яҡыныраҡ тирәнән фатирҙар алырға тырыша икән! Һәр кис шуларҙың ҡатындары - бер ерҙә, ирҙәре йәнәшәләге икенсе урында йыйылышып, үҙ телдәрендә гәп һаталар. Башҡалар һымаҡ урыҫ мәктәбенә йөрөгән эреле-ваҡлы балалары иһә фәҡәт туған телдәрендә генә ҡысҡырыша-ҡысҡырыша футбол уйнайҙар...

Ситкә күсеп барған туғандарыбыҙ һәм таныштарыбыҙҙың бик күптәренең үҙҙәрен нисек тотоуын һис бер арттырыуһыҙ ғына һөйләп бирергә ниәтем. Быға үпкәләүселәр ҙә табылыуына икеләнмәйем. Һүҙ сит милләт кешеһе менән тормош ҡорған яҡташтарыбыҙ хаҡында ла бармаясаҡ. Улар тураһында, әлбиттә, һөйләүселәр күп һәм ул үҙе айырым бер тема. Икеһе лә тап-таҙа башҡорт милләтенән булған ғаиләләр хаҡында барасаҡ һүҙ. Алдан уҡ әйтеп ҡуям: беҙҙең халыҡ һәр саҡ сит ерҙә үҙен ифрат та әҙәпле һәм тыйнаҡ тотоуы менән айырыла. Бына шундай яҡшы күңелле, алсаҡ ирле-ҡатынлы саф башҡорт кешеләре башҡа өлкәгә килеп әләгеү менән, иң беренсе нәүбәттә, тап-таҙа башҡортса һөйләшеп кенә йөрөгән балаларын көсләп-көсләп урыҫ теленә өйрәтә башлай. Рус телен белеү, әлбиттә, яҙыҡ түгел, хатта бик мөһим. Әммә сит телдең үҙеңдең телеңде онотторорға тейеш түгеллеген күп яҡташтарыбыҙ аңлап етмәй. Ә инде сит яҡта тыуған балалар хаҡында әйтеп тораһы ла юҡ! Телдәре "мама" һәм "папа" тип асылған ул балалар үҙ милләтен бөтөнләй белмәй тиерлек. Хатта мин үҙемдең яҡындарымдың шундай балаларының береһенә (уның исеме лә, фамилияһы ла башҡортса): "Һин башҡорт бит, башҡорт телен өйрәнергә кәрәк", - тип өндәшкәс, "Я не хочу быть башкиром!" тип аптыратты. Бына нисек итеп беҙ юғалабыҙ, яҡташтарым. Юғарыла миҫал итеп килтергән әрмән ғаиләләре һымаҡ, бер-беребеҙ менән ныҡ аралашып йәшәү урынына, беҙ, киреһенсә, башҡа милләт халҡы эсенә инеп, тиҙ генә йотолабыҙ.

Бер ҡалала йәшәгән бер нисә башҡорт ғаиләһе һирәкләп бер-береһенә ҡунаҡ-мунаҡҡа йөрөгән хәлдә лә, уларҙың үҙ балалары менән фәҡәт урыҫ телендә генә аралашыуын башҡортлоҡтоң тамырына балта сабыу һымаҡ күрәм мин. Иң үкенеслеһе - бына шул хаҡта хатта күптәр уйлап та бирмәй. "Башҡорт булғым килмәй", тигән балаларыбыҙҙың киләсәге һәм унан артабанғы тыуасаҡ быуындар хаҡында уйларға ла ҡурҡыта бит, йәмәғәт! Бала бит дөрөҫтө әйтә. Сөнки ата-әсәһе уға тап шундай рухта тәрбиә биргән. Унан һуңғы быуын вәкилдәре ҡасандыр ата-бабалары башҡорт булған, әммә хәҙерге ваҡытта аныҡ милләте булмаған рәсәйлеләрҙе тәшкил итәсәк. Хатта паспортында ла "башҡорт" тигән яҙыу булмаясаҡ (мәҫәлән, минең һәм улдарымдың сит өлкәләрҙә алған паспорттарыбыҙҙа милләт күрһәтелмәгән). Быяның, әлбиттә, бер кемгә лә зыяны юҡ. Әммә... үкенесле. Хөкүмәттебеҙ сәйәсәте башҡорт телен тыймай бит. Шулай уҡ үҙ телебеҙҙә һөйләшкән өсөн берәү ҙә беҙҙе кәмһетергә һәм ҡыйырһытырға йыйынмай. Тик үҙебеҙ генә, нишләптер, телебеҙҙе һаҡлап алып ҡалырға тырышмайбыҙ...

Тарихсылар, тел белгестәребеҙ "милләттең, телдең, мәҙәниәттең һәм ғөрөф-ғәҙәттәрҙең ошоғаса һаҡланып килеүе быуаттар буйы башҡорттоң үҙ ерененң хужаһы булып, фәҡәт шунда ғына ғүмер итеүе менән бәйле", тигәнерәк фекер әйткәне бар. Икенсе төрлө итеп әйткәндә, үҙ ерен төйәк итмәгән башҡорт юғалыуға дусар... Был, ысынлап та, дөрөҫ фекерҙер, тип уйлайым. Тик үҙебеҙҙең еребеҙҙә йәшәп, телебеҙҙе һәм динебеҙҙе һаҡлап ҡалған осраҡта ғына беҙ артабан да милләт булараҡ быуаттар буйына йәшәй аласаҡбыҙ, иншаллаһ. Әммә тормош үҙенекен итә бит. Кемгәләр (хатта күптәргә) аҡса эшләп, ғаиләһен аҫрау ниәте менән, ә кемдәргәләр хәрби хеҙмәт буйынса ситкә китергә тура килә... Ҡәҙерлеләрҙән ҡәҙерле милләттәштәрем, сит тарафтарға китеп, юғалып ҡалмаһаҡ ине. Сит ерҙә үҙебеҙсә һөйләшергә тартынмай, балаларыбыҙҙы башҡорт рухында тәрбиәләп үҫтереп, ҡырҙа хәжәтең бөтөү менән үҙ иленә ҡайтып, ҡабаттан оя ҡороп йәшәргә кем ҡамасаулай? Ситтә йөрөгән саҡта ла бер-береңде белергә, танырға тырышыу, ниндәйҙер кимәлдә юғарыраҡ урын биләүеңә лә ҡарамаҫтан, яҡташтарыңа ҡарата айырыуса ихтирамлы булыу бер ваҡытта ла кешене кәмһетмәй, киреһенсә, тик уға ҡарата хөрмәт тойғоһо ғына уята, тигән хәҡиҡәтте белһәк ине. Балаларыбыҙға "Һин - башҡорт", тип туған телдә һөйләшергә өйрәтеү уларҙы башҡа милләт вәкилдәренән түбән ҡуйыу, тигәнде аңлатмай бит. Үҙҙәре яҙа-йоҙа урыҫса белгән бәғзе милләттәштәребеҙҙең балаларының башҡортса һөйләшмәүе генә түгел, хатта бер һүҙ ҙә аңламауы, ата-әсәләренә "пап", "мам", тип өндәшеүе йәнде әрнетә. Мин хеҙмәт иткән яҡта тап ана шулай күпселек яҡташтарыбыҙ (хатта барыһы ла тигәндәй) үҙ балаларын аңлы рәүештә урыҫҡа әйләндергәйнеләр инде. Себер яҡтарында йәшәгән башҡорттарыбыҙ менән дә шул уҡ хәл.

Улдарым менән башҡортса һөйләшкәндә ишеткән бәғзе рус, йәиһә украин милләтенән булған хеҙмәттәштәрҙең: "Рус телен белгәс, етмәгәнме? Ни өсөн баланың башын бутайһығыҙ?"- тип һорағаны булды. Мин ундайҙарға һәр саҡ: "Күҙ алдына килтерегеҙ: һеҙ, урыҫ кешеләре, әйтәйек, ғаиләгеҙ менән Үзбәкстанға күсеп килдегеҙ икән. Балаларығыҙ урыҫ телен бөтөнләйгә онотоп, тик үзбәксә генә һөйләшә башланы, ти... Шуға риза булыр инегеҙме?" "Әлбиттә, юҡ" тигән һүҙҙәре менән үҙҙәре минең хаҡлыҡты раҫлап ҡуялар ине.

Ситтә лә үҙ миллилегеңде һаҡлап алып ҡалыуы бер ҙә ҡатмарлы түгел. Бер милләт вәкиленән торған татыу ғаилә - үҙе бер дәүләт, тиергә лә тартынмайым. Бына шул бәләкәй генә дәүләт эсендә үҙ телеңде, динеңде онотмау һәм быуындан-быуынға күсереү кәрәк. Сирек быуат ситтә йөрөгән дәүерҙә тыуып үҫкән улдарымды ифрат та матур итеп башҡорт телендә һөйләшергә өйрәтә алыуыбыҙға (тик урыҫ мәктәбендә уҡыу арҡаһында яҙыуҙарында ғына хаталар ебәрәләр), уларға Ислам дине рухында тәрбиә бирергә ирешеүебеҙгә, үҙебеҙҙең дә, ахырҙа, тыуған яғыбыҙға ҡайтып йәшәүебеҙгә Аллаһы Тәғәләгә шөкөр итәбеҙ. Ә инде ейән һәм ейәнсәрҙәребеҙҙең хәҙер башҡорт мәктәптәренә йөрөүҙәрен, тап-таҙа туған телендә һөйләшеүҙәрен Раббыбыҙҙың үҙебеҙгә биргән оло ниғмәте итеп ҡабул итәбеҙ һәм ана шуның менән бәхетлебеҙ. Минең һүҙҙәремде һис тә маҡтаныу тип ҡабул итергә кәрәкмәй. Быны тик тап ана шулай булырға тейешле тәбиғи хәл, тип кенә уйларға кәрәктер. Яҡташтарымдың кемеһененң генә булһа ла ситкә китеп, башҡорт булараҡ юғалып ҡалыуын һис тә теләмәйем.

Әйткәндәй, сит кешеләр араһында үҙ телендә һөйләшергә оялыу ғәҙәте тик башҡорттарға ғына түгел, ә татар, сыуаш һәм күп кенә башҡа халыҡ вәкилдәренә лә хас күренеш. Әммә мин, башҡорт кешеһе булараҡ, башлыса үҙебеҙ өсөн борсолам.

**Хәлил ҺӨЙӨНДӨКОВ.**
**(Аҙағы. Башы 3-сө һанда).**

Аралбаева, Күгәрсен районы Теләүембәт ауылынан Хәлил Иҙелбаев, Өфө ҡалаһынан Р. Ғилфанова, Әбйәлил районы Ишбулды ауылынан Лилә Ғилманова, Ҡырмыҫҡалы районы Ҡабаҡ ауылынан Хамбалова, Дәүләкән районы Сапай ауылынан Фәнүр Лотфрахманов, Бөрйән районы Байназар ауылынан Әлфирә Муллағолова - **"Шайтан хәйләләре"** китаптарына лайыҡ булды. **Исемлектәге уҡыусыларыбыҙ китаптарҙы Өфөләге таныштары, балалары, туғандары аша алдырта ала.**

**Һәм тағы.** Гәзит-журналдарҙың таралыуы почтальондарҙың егәрлелеге, ныҡышмалығы, йүгереп йөрөүҙәре аша атҡарылғанын беләбеҙ һәм баһалайбыҙ. Уларҙың хеҙмәтен дә һүҙ менән генә түгел, бүләктәребеҙ менән дә билдәләй киләбеҙ. Әлегә райондарҙан иң күп "Киске Өфө"гә яҙҙырыусы почта хеҙмәткәрҙәре исемлеге килеп етмәгән, ә бына **Баймаҡ районы Ниғәмәт ауылы почтаһы хеҙмәткәре Г. Рәсүлева** 15 кешегә "Киске Өфө"яҙҙырып, уларҙың квитанцияларын һалып ебәргән. Был почта хеҙмәткәренә лә иҫтәлекле бүләгебеҙ барып етәсәк.

**Хөрмәтле уҡыусыларыбыҙ! Йәнәшәгеҙҙә, таныштарығыҙ араһында 2017 йылдың тәүге яртыһы өсөн "Киске Өфө"гә яҙылмай ҡалғандар булһа, сәләмебеҙҙе тапшырығыҙ, зинһар: хәҙер иһә гәзитебеҙҙе марттан алдыра башлау өсөн 18 февралгә тиклем яҙылырға кәрәк. 50665 индекслы гәзитебеҙ дүрт айға 326 һум 26 тин генә торасаҡ. Гәзиткә яҙылып та, әле уның бер һанын да ҡулығыҙға алмаһағыҙ, почтағыҙға мөрәжәғәт итегеҙ, редакцияға ла шылтыратып ебәрегеҙ (246-03-23).**

**МӨХӘРРИРИӘТ.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Башҡортостандың дүрт юғары уҡыу йорто студент берләшмәләре эшмәкәрлеген үҫтереү программаларын һайлап алыу конкурсында еңеүсе булды. Улар иҫәбендә - Башҡорт дәүләт университеты, Өфө дәүләт авиация техник университеты, Өфө дәүләт нефть техник университеты һәм Мифтахетдин Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университеты. Конкурсҡа илдең 350 юғары уҡыу йорто ғариза бирһә, еңеүселәр исемлегендә улар - 193.

✓Сибайҙа цемент етештереү буйынса завод асыу проекты Башҡортостандың Өҫтөнлөклө инвестиция проекттары исемлегенә индерелгән. "Цзюньхэ тирәяҡ мөхитте һаҡлау буйынса Сычуань компанияһы" ябыҡ акционерҙар йәмғиәте берлектәге Рәсәй-Ҡытай производствоһын ғәмәлгә ашырыуҙа инвестор булып тора. Дөйөм инвестициялар күләме 13,5 миллиард һумдан артасаҡ. Заводта 200 яңы эш урыны булдырыу күҙаллана.

✓Республика Башлығы Рөстәм Хәмитовтың Указы менән Фәрхәд Самедов Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫары итеп тәғәйенләнде. Самедов Фәрхәд Астан улы 1959 йылдың 23 апрелендә Грузин ССР-ының Гардабани ҡалаһында тыуған. В.В. Куйбышев исемендәге Мәскәү инженер-төҙөлөш институтын тамамлай. Техник фәндәр кандидаты.

✓Ләлә Дәүләтбаева Башҡортостандың ауыл хужалығы министры урынбаҫары итеп тәғәйенләнде. Ул агросәнәғәт комплексын хоҡуҡи яҡтан тәьмин итеү, кадрҙар сәйәсәте, фәнни һәм белем биреү учреждениелары менән үҙ-ара эш итеү, тышҡы бәйләнештәр һәм киң мәғлүмәт саралары менән бәйләнеш, шулай уҡ ғәҙәттән тыш хәлдәрҙе бөтөрөү һәм мобилизациялау эше менән бәйле мәсьәләләр өсөн яуап бирәсәк.

✓Силәбелә "Осҡон" башҡорт видео һәм сценарий фестивале уҙасаҡ. Тәүге көндә белгестәр сценарий, актерлыҡ, операторлыҡ, режиссерлыҡ сәнғәте буйынса оҫталыҡ дәрестәре уҙғара. Фестивалдең икенсе көнө конкурсҡа йомғаҡ яһауға арнала. 5 февралдә башҡорт телендә сценарийҙар питчингы уҙа, премьералар күрһәтелә, еңеүселәрҙе бүләкләү тантанаһы үтә. Фестивалде ойоштороусылар - Силәбе өлкәһе Башҡорт йәштәре союзы һәм Мәскәү һәм Санкт-Петербург ҡалаларындағы Башҡортостан студенттары һәм аспиранттары ассоциацияһы.

**"Башинформ"дан.**

✓ *Урындағы власть органдары ер участкаларына дәғүә итеүселәр өсөн өҫтәмә талаптар, шул иҫәптән торлаҡҡа ихтыяжы булыу тураһында иҫәптә тороуҙы ла, ҡуйырға хоҡуҡлы.*



...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ

# ЙОНДОҘҘАР ҠАЛАҺЫ

**Теге аҙнала иҫ киткес тәьҫораттар кисерҙем! Ҡышҡы Өфө шул тиклем йәмле. Ҡала матур итеп биҙәлде, баш ҡалала уҙған Хоккей йондоҙҙары аҙналығына күп ҡунаҡтар килде. Көйәрмән булараҡ, "Өфө-Арена"ның ҡупшыланғанына шатмын. Боҙ һарайының алдында - боҙ һындар, эсендә - яңы экран-куб, яңы тауыш мөмкинлектәре...**

Элек ике көн генә барған Хоккей йондоҙҙары матчы быйыл шулай аҙналыҡҡа әйләнде. Уның барышында Йәштәр хоккей лигаһының, Ҡатын-ҡыҙҙар хоккей лигаһының, Континенталь хоккей лигаһының сағыу уйындары, оҫталыҡ тамашалары уҙҙы. Шулай уҡ следж-хоккей буйынса Континент кубогына халыҡ-ара турнир ойошторолдо. Унда Рәсәй, Италия, Чехия, Ҡытайҙан дүрт команда үҙ-ара иң көслөнө асыҡланы. Беҙҙең спортсыларҙың бөтә осрашыуҙарҙа ла еңеп, кубокты яулауы һөйөнөслө.

Шуныһы мөһим - был һаулығы буйынса мөмкинлектәре сикләнгән хоккейсылар араһында Башҡортостан егеттәре лә булды. Уларҙың береһе - 2015 йылда Омск ҡалаһында десантсылар казармаһы емерелеү арҡаһында фажиғәгә тарыған яҡташыбыҙ Рөстәм Нәбиев. Яҙмышына яҙған ауыр һынауҙы лайыҡлы үткәргән Саҡмағош егете менән шәхсән күрешеп, алтын миҙалы менән ҡотлап ҡулын ҡыҫыуым әлегәсә күңелемде йылытып тора. Ҡояш кеүек балҡып торған йөҙлө өмөтлө йәш хоккейсыға артабанғы тормошонда ла тик яҡты көндәр теләйбеҙ.

Тағы был сарала нимә күңелгә уйылып ҡалды? Ҡатын-ҡыҙҙар хоккей лигаһы уйындарын асыу тантанаһындағы тамашала боҙ өҫтөндә "Ете ҡыҙ" бейеүенең башҡарылыуы, әлбиттә. Һуңғы ваҡытта был бейеү халҡыбыҙҙың сираттағы брендына әйләнеп бара, һәм шулай булһын да!

**Гөлдәр БУЛӘКБАЕВА.**

**ӘЙТКӘНДӘЙ...**

**Хоккей йондоҙҙары аҙналығына арнап, 25 декабрҙән алып баш ҡалала бик күп саралар үтте. Шулар араһында А. В. Тарасов исемендәге "Алтын шайба" Бөтә Рәсәй ярыштары, ҡышҡы 9 спорт төрө буйынса уҡыусылар спартакиадаһы, ҡышҡы йөҙөү буйынса ҡала асыҡ кубогы, ҡарҙа ҡышҡы футбол, быймаларҙа хоккей, Ҡышҡы корпоратив уйындар, һ.б. "Хоккей йондоҙҙары аҙналығын үткәреүҙе беҙ яңы, бик юғары кимәлгә күтәрҙек", - тип һыҙыҡ өҫтөнә алды Өфө ҡала хакимиәте башлығы Ирек Ялалов һәм урам спорт ҡоролмаларының, шул иҫәптән хоккей ҡумталарының сифатын яҡшыртыу зарурлығын билдәләне. Өлгө итеп "Өфө-Арена" алдындағы хоккей ҡумтаһын билдәләне.**

КӨН ҠАҘАҒЫНА

# ЕРЛЕ БУЛЫУ ҘА...

## балалар тыуыуға сәбәп



**Ер мәсьәләһе Башҡортостанда ғына түгел, тотош Рәсәйҙә әленән-әле күтәрелеп тора. Был шулай булырға тейештер ҙә, сөнки беҙ барыбыҙ ҙа ер кешеләре һәм унан башҡа йәшәй алмайбыҙ. Башҡорттарға, борон-борондан аҫабалыҡ хоҡуғы менән йәшәгән милләткә, ер темаһы бигерәк тә яҡын. "Киске Өфө" гәзите лә ваҡыты-ваҡыты ошо һорауға урап ҡайта. Бөгөн гәзит уҡыусылар иғтибарын Башҡортостан Республикаһы Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайҙың йыл һуңында ҡабул иткән закон проектына йүнәлтмәксебеҙ.**

2011 йылдың июнендә РФ Хөкүмәте Рәйесе Дмитрий Медведев 138-се Федераль законға ҡул ҡуйғайны. Уға ярашлы, күп балалы ғаиләләр төрлө маҡсаттан, шул иҫәптән шәхси тәҙәләш өсөн бушлай ер участкалары алыу хоҡуғына эйә булғайны. Бынан тыш, был хоҡуҡ законлы никахта тороусыларға ғына түгел, өс йәки унан да күберәк балиғ булмаған бала тәрбиәләгән (тәрбиәгә алынған, үгәй балаларҙы ла индереп) яңғыҙ әсәләргә һәм атайҙарға ла ҡағылды. Әммә 2015 йылдың 1 мартынан Ер Кодексына индерелгән был төҙәтеү үҙ көсөн юғалтты һәм вәкәләттәр төбәк кимәленә тапшырылды. Йәғни урындағы власть органдары ер участкаларына дәғүә итеүселәр өсөн өҫтәмә талаптар, шул иҫәптән торлаҡҡа ихтыяжы булыу тураһында иҫәптә тороуҙы ла, ҡуйырға хоҡуҡлы. Шулай уҡ, бирелергә тейешле ер участкаларының күләме, урыны һәм башҡа шарттарҙы ла урындағы власть үҙе билдәләй. Субъекттар буйынса бирелергә тейешле уртаса ер күләме 6-10 сутый тип алынһа, иң ҙур күләм - 15 сутый.

Яңы йыл алдынан Башҡортостан Республикаһы парламенты депутаттарының ошо мәсьәләне регламентлаусы "Башҡортостан Республикаһының "Башҡортостан Республикаһында ер мөнәсәбәттәрен көйләү тураһында" законына үҙгәрештәр индереү тураһында" № 5-539/з закон проектын ҡабул итеүе йәмғиәттә ҡапма-ҡаршы фекерҙәр тыуыуға сәбәп булды. Был ҡанун әле ҡабул ителмәҫ элек уҡ тәнҡиткә дусар ителгәйне. Сөнки документка ярашлы, күп балалы ғаиләләрҙең мохтаж булыу-булмауын билдәләүсе критерийҙар менән күптәр килешмәне (2017 йылға тиклем сиратҡа тороусыларға мохтажлыҡ критерийын иҫәпкә алмайынса ла ер участкаһы алыу хоҡуғы һаҡлана). Мәҫәлән, әгәр ғаиләнең шәхси йорт төҙөү өсөн 8 сутыйҙан кәм булмаған ер участкаһы бар икән, уға бушлай ер биреүҙән баш тарта алалар. Әммә был уларҙы сиратка ҡуймаясаҡтар тигәнде аңлатмай. Закон бары тик ере булмаған ғаиләләргә өҫтөнлөк биреүҙе генә күҙаллай.

Бирелгән ер участкаһы ғаиләне ҡәнәғәтләндермәй икән, ул унан өс тапҡыр баш тарта ала. Өсөнсө тапҡыр баш тартҡандан һуң был ғаилә исемлектән төшөрөп ҡалдырыла. Хәҙер шундай ситуацияны күҙ алдына килтерегеҙ: урынға сығып, биреләсәк участкаһының ниндәй торошта, гөмүмән, кеше өй һалып йәшәрлеке, түгелме икәнен тикшермәйенсә, кабинетта ғына ултырып, ҡағыҙҙағы ерҙе генә бүлеп ултырыусылар ҙа булмаҫ тимәгеҙ. Ә кеше был осраҡта нимә эшләргә тейеш була? Дөрөҫ, урынға барып, ҡарап, участканан баш тартасаҡ. Һаҙлыҡ, соҡор, йырын һ.б. шундай территория ла ер категорияһына инә, һәм, бәхетеңә шундай ер тура килгән икән, ҡалайтаһың: йә исемлектән төшөп ҡалғансы баш тартаһың, йә шым ғына ризалашаһың. Әлбиттә, өсөнсө юл да бар - ни өсөн баш тартыуыңды хоҡуҡи нигеҙҙә раҫлау, әммә был юлды һайлаһаң, сәсең дә ағарасаҡ, нервыларың да бөтәсәк.

Депутат Заһир Хәкимовтың, бөгөн ауылдарҙа һәр кемдең өйө ултырған участкаһы бар һәм улар хәҙер ер алыуға хоҡуҡһыҙ ҡала, тип белдереүенә парламент рәйесе Константин Толкачев, ҡанун нигеҙенә бары тик ихтыяж һалынған, әгәр ауыл еренән бер генә ялыу булһа ла, беҙ уны тикшереп, мотлаҡ ер бирҙерәсәкбеҙ, тигәйне. Әммә үрҙә атап үтелгән проблеманы ауыл еренә күсергәндә лә шул уҡ ҡына түгел, хатта унан да ҡатмарлыраҡ хәл-торош килеп тыумаймы икән? Йәшеренбатырыны юҡ, бөгөн ҡаҙаныштар тураһында күп һөйләнәк тә, ауыл райондарында хәл маҡтанырлыҡ түгел: белгестәр 2030 йылға Башҡортостанда ауыл халҡының ҡырҡа кәмеүен фаразлай. 2016 йылда уҙған "Башҡортостан Республикаһында һаулыҡ һаҡлау аҙ-

ТӨРЛӨҺӨНӘН

## БАШ ҠАЛА ЙӨҘӨ

**Юҡҡа ғына "Баш ҡала йөҙө - һинең йөҙөң" тимәйҙәр. Ул матурыраҡ һәм күркәмерәк булған һайын, ҡала халҡының да йөҙө асыла барғандай.**

Әммә күпселек граждандар билдәләүенсә, бөгөн иҫкергән конструкциялар, сифатһыҙ материалдар, биналарҙың архитектура, тарихи, стилистик үҙенсәлектәрен иҫәпкә алмай ҡуйылған рекламалар күплеге ҡаланың матурлығын боҙоп ҡына тора. Ҡала округы хакимиәте был етешһеҙлекте бөтөрөү өҫтөндә маҡсатлы эш алып бара. Урамдарҙа юлдарҙа арҡыры тарттырылған рекламалар бөтөнләй күренмәй, айырыу һыҙаттарында булған, рөхсәтһеҙ урынлаштырылған конструкциялар алына, йөйөүләләр йөрөгән ерҙәрҙәге ҡуймалар ҡағыҙ рекламаларҙан таҙартыла. Быйыл ҡаланың төп магистралдәрендәге 300 реклама конструкцияһын алыу планлаштырыла. Артабанғы йылдарҙа ҡала территорияһында бары тик видеоэкрандар һәм тәҙәкләндереү объекттары менән тап килгән реклама конструкциялары урынлаштырыуға ғына рөхсәт биреләсәк. Башҡарылған эштәр ҡаланың йөҙөн күркәмләндерергә ярҙам итеренә өмөт ҙур.

## МӘҒАРИФ ЙОМҒАҠ ЯҺАЙ

**ВДНХ-Экспола уҙған баш ҡала мәғарифы системаһы хеҙмәткәрҙәренең кәңәшмәһендә үткән йылға йомғаҡ һәм 2017 йылға бурыстар билдәләнде.**

- Былтыр баш ҡаланың мәғариф системаһында һәр кемгә уңайлы мөхит тыуҙырыу, белем биреүҙең сифатын күтәреү, белем биреү ойошмалары эшмәкәрлегенең һөҙөмтәлелеген күтәреү, матди-техник базаны нығытыу буйынса эш дауам итте, - тине кәңәшмәлә сығыш яһап ҡала округы хакимиәте башлығы Ирек Ялалов. - Мәғариф системаһы менән дәүләтйәмәғәт идараһын күтәреү һәм мәғлүмәти асыҡлыҡ булдырыу буйынса эш алып барылды. Уҡыусыларҙың интеллектуаль һәм ижади мөмкинлеген тормошҡа ашырыуҙы тәьмин итеү буйынса саралар күрелде. Ҡала тарихын-

## Б А Ш  Ҡ А Л А  Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓29 ғинуарҙан 8 февралгә тиклем Ҡаҙағстанда 28-се Бөтә донъя ҡышҡы Универсиада үтә. Рәсәйҙең йыйылма командаһы составында Башҡортостандан да биш спортсы бар: шорт-тректа миҙалдар өсөн Анастасия Мигунова, сноубордта Антон Копривица һәм фристайлда Радмир Гәрәев, Алексей Соловий, Елена Зайцева көс һынаша. Универсиадала 55-тән ашыу илдән ике меңгә яҡын спортсы - 17-28 йәштәге студенттар, аспиранттар ҡатнаша.

✓Башҡортостанстат республикала торлаҡҡа 2016 йыл өсөн уртаса хаҡтарҙы иглан итте. Статистика мәғлүмәттәре буйынса, былтыр беренсел баҙарҙа торлаҡтың хаҡы үҙгәрмәгән тиерлек - квадрат метры өсөн 51,5 мең һум. 2015 йылдың IV кварталында бер квадрат метрҙың хаҡы 51,6 мең һум тәшкил иткән.

✓"Медиалогия" мәғлүмәт-аналитика системаһы йыл һайын әҙерләгән Башҡортостан медиаресурстары рейтингында 2016 йылда "Башинформ" мәғлүмәт агентлығы йәнә исемлекте етәкләй. Икенсе урынды Proufu.ru интернет ресурсы биләй, өсөнсөлә - Башҡортостан юлдаш телевидениеһы.

✓Мәктәптәрҙә һәм балалар баҡсаларында инвалид һәм сәләмәтлек мөмкинлектәре сикләнгән балаларҙы оҙатып йөрөү өсөн укытыусыларҙың ярҙамсылары эшләйәсәк. 2016 йылдың 1 сентябренән алып башланғыс мәктәптә белем биреү буйынса яңы стандарттар үҙ көсөнә инде. Улар инвалид һәм сәләмәтлек мөмкинлектәре сикләнгән балаларҙың дөйөм белем биреү процесына инеүен күҙаллай. Рәсәй мәктәптәрендә шундай балаларҙың артыуы теркәлгән.

✓"Урмандарҙы тергеҙеү йылы" тип иғлан ителгән 2016 йыл йомғаҡтары буйынса Башҡортостан планлаштырылған эштәрҙе тулыһынса үтәүсе ун төбәк исемлегенә ингән. БР Урман хужалығы министрлығында хәбәр итеүҙәренсә, урмандарҙы тергеҙеү эштәре 12,4 мең гектарҙа башҡарылған, ул пландан 104 процент, шул иҫәптән 7 мең гектар майҙанда урман ултыртылған.

✓Башҡортостанда Ер һөрөү буйынса асыҡ Рәсәй чемпионаты уҙасаҡ. Ул 2017 йылдың июнь-июль айҙарында Өфө районында уҙасаҡ. Илебеҙҙең төрлө төбәктәренән йыйылған механизаторҙар ер эшкәртеү оҫталығында ярышасаҡ. Республика Хөкүмәтенең Премьер-министры урынбаҫары Ирек Мөхәмәтдинов етәкселегендәге ойоштороу комитеты мөһим сараға әҙерләнеү менән шөғөлләнә, тип хәбәр иттеләр БР Хөкүмәтенең матбуғат хеҙмәтенән.

✔ *Дональд Трамп, үҙенең оппонентынан айырмалы рәүештә, һайлау алды кампанияһы барышында беҙҙең илгә ҡарата дуҫтарса мөнәсәбәттәге һүҙҙәре менән айырылып торҙо.*



налығы"нда сығыш яһап, Республика Башлығы Рөстәм Хәмитов та 2030 йылға тыуымдың 1/3 өлөшкә кәмейәсәген белдерҙе: әгәр әле йылына 60 мең бала тыуһа, 2030 йылға был һан 40-45 меңгә ҡалыуы ихтимал. Демография проблемаһының икенсе төп сәбәбе: ауылдарҙағы репродуктив йәштәге йәштәр, эш булмау сәбәпле, ҡалала төпләнергә тырыша, күптәре күсенергә мәжбүр. Башстат мәғлүмәттәре буйынса, 2011-2016 йылдарҙа ауыл халҡы 50 мең кешегә кәмегән. Уларҙың хатта бер меңе генә репродуктив йәштә булыуы ла демография өсөн күпме юғалтыуға килтереүен һанап сығарыуы ауыр түгел. Ә ҡала уларҙы ҡолас йәйеп ҡаршы алып тормай: йәшәү өсөн ниндәй һүкмәк менән барырға икенен үҙенә хәл итергә тура килә, торлаҡ мәсьәләһе бөтөнләй хыял ғына, үҙеңдең шәхси йортоңдо төҙөү өсөн ер кәрәк, уны бушлай алыу өсөн күп балалы һәм льготаға хоҡуҡлы башҡа категорияға ҡарарға тейешһең. Хатта күп балалы булғанда ла ҡалаға килеп ер алыуың бик икеле, сөнки теркәлеүең ауылда (ә ҡалала бушлай ер алыу шарттарының береһе - кәмендә 5 йыл ҡалала йәшәгән, йәғни ҡала теркәлеүең булырға тейеш) һ.б. уйлай китһәң, осона ла сығып булмаҫтай ҡулса барлыҡҡа килә.

Матбуғат баҫмаларындағы мәғлүмәттәргә ярашлы, ут күршеләребеҙ - Пермь өлкәһендә лә, Татарстан Республикаһында күп балалы ғаиләләргә (бушлай ер алырға хоҡуҡлы башҡа категорияға) бушлай ер биреү мохтажлыҡ буйынса түгел, ә ошо категорияға ҡарағанлыҡ буйынса, әҙер инфраструктура менән бирелә. Пермдә иһә хатта ер биреү мөмкинлеге булмағанда фатир менән тәьмин итеүҙе ҡараған закон проекты беренсе уҡыуҙа ҡабул ителгән. Һөҙөмтәлә тыуым буйынса Пермь менән Татарстан беренселекте бирмәй. Башҡортостанда халыҡ һаны күберәк булыуға ҡарамаҫтан, Татарстанда хатта тәбиғи артым Башҡортостан менән сағыштырғанда ике тапҡырға күберәк. Йәғни бушлай ер биреү халыҡҡа торлаҡ проблемаһын үҙаллы хәл итеү мөмкинлеген бирә, әммә бының өсөн шарттар ғына тыуҙырырға кәрәк. Юҡһа, Росстаттың 2030 йылға фаразы буйынса, Башҡортостан халҡы 160 мең кешегә кәмеп, 3,9 миллионға ҡаласаҡ. 2050 йылда иһә төбәк халҡы 20-30 процентҡа кәмейәсәк.

...Башҡортостанда ер юҡ, тип әйтеп, уйлай белгән кешене ышандырыуы ҡыйын. Әлбиттә, тотош Рәсәйҙә йылдан-йыл һөрөнтө ерҙәр (ауыл хужалығы тәғәйенләнешендәге ерҙәрҙең бер өлөшө) кәмей бара. Ауыл хужалығы тәғәйенләнешендәге ерҙәргә урман һаҙаттары, юлдар, яһалма ултыртылған ағаслыҡтар, төҙөлгән биналар, сабынлыҡтар, көтөүлектәр, һөрөнтө ерҙәр инә, тип, бөгөнгө хәл-тороштан сығып ҡарағанда, мал һаны кәмегәнлектән буш ятҡан көтөүлектәр арта ла, сәселмәгән баҫыуҙарҙы ағас баҫа - шул ғына. Шул уҡ ваҡытта бөгөн Башҡортостанда 14 294 700 гектар ер фонды иҫәпләнһә, шуның ни бары 2 346 148 гектары ғына граждандарға бирелгән. Росстат фаразын артабан фаразлағанда, тиҙҙән ауылдарҙа ҡарт-ҡоро ғына ҡалыуы ихтимал. Ләкин ерҙәр буш ятмаясаҡ, уларҙы Ҡытай эшҡыуарҙары, ҡуртымға алып эшкәртәсәк, йәғни заманса итеп әйткәндә, инвестиция һаласаҡ та, үҙенә һалған инвестицияһынан да күберәк файҙа сығарасаҡ, ерҙең ете ҡат майын һурып алғандан һуң, химияға тонсоҡҡан үле тупраҡты ҡалдырып, икенсе территорияға юллынасаҡ... Ошо хәлдәр үткән быуаттарҙа ла, хәҙер ҙә күҙәтелә түгелме?..

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**

да беренсе тапҡыр бер үк ваҡытта дүрт мәктәп төҙөлә.

Ғөмүмән, уҙған уҡыу йылы ҡала мәғариф системаһы өсөн юғары баһалар менән билдәләнә. Мәскәүҙә үткән халыҡ-ара салонға төрлө йүнәлештәр буйынса 19 инновацион проект сығарыла. Уның йомғаҡтары буйынса РФ-ның биш төбәге, шул иҫәптән Өфө ҡалаһы хакимиәтенең Мәғариф идаралығы ла миҙалдарға лайыҡ була. Баш ҡала мәктәптәренең тәжрибәһе былтыр Рәсәй ҡалалары союзының 4-се форумында ла юғары баһалана. Өфө шулай уҡ белем алыусы ҡала статусына эйә була - ЮНЕСКО уны үҙенең глобаль селтәренә тоташтыра. Бер нисә белем биреү учреждениеһы Рәсәйҙең һәм Башҡортостандың иң яҡшы мәктәбе исемлегенә инә.

# ИҪКӘРТЕҮҘӘР ҺӨҘӨМТӘҺЕНДӘ...



**Рәсәй Эске эштәр министрлығының Өфө ҡалаһы буйынса идаралығының оператив-хеҙмәт эшмәкәрлегенә начальник урынбаҫары Валерий Янситов йомғаҡ яһаны.**

Былтыр ҡала территорияһында иҫәпкә алынған енәйәтселектең дөйөм һаны 0,9 процентҡа кәмегән, енәйәтселек кимәле 10 мең кешегә 203,6 булған. Енәйәтселектә төп өлөш уғрылыҡ менән бәйле (40 процент), икенсе урында - наркотик матдәләрҙең законһыҙ әйләнеше (12,7 процент), шәхес үмеренә ҡул һуҙыу (10,8 процент), иҡтисади енәйәттәр (4,4 процент). Енәйәтселекте иҫкәртеү саралары элек хөкөм ителгән граждандар тарафынан ҡылынған енәйәттәр һанын кәметеүгә, террористик акттар, күп кеше ҡатнашлығындағы сыуалыштар, төркөмдәр енәйәтселеген булдырмауға ярҙам иткән. Ләкин наркоенәйәттәр һаны 30 процентҡа артҡан. Өс мең кешене берләштергән 7 отрядтан торған дружинниктар һәм полиция хеҙмәткәрҙәре ҡатнашлығында 6 мең административ хоҡуҡ боҙоуға, шул иҫәптән 1,2 мең ваҡ хулиганлыҡҡа юл ҡуйылмаған, 2 мең кеше йәмәғәт урындарында эскән килеш күренгәне өсөн ҡулға алынған. Былтыр юл-транспорт ваҡиғаһында һәләк булыусылар һаны 27,3 процентҡа, йәрәхәт алыусылар 3,4 процентҡа, дөйөм алғанда авариялар һаны кәмегән.

*СӘЙӘСИ КҮҘӘТЕҮ*

# "КӨТӨЛМӘГӘН" ПРЕЗИДЕНТТАН...

## нимә көтөргә?



**Америка халҡы үҙенең 45-се президентын һайланы. Власҡа илдең иң бай эшҡыуарҙарының береһе, ләкин сәйәсәттә әлегә тиклем бер ниндәй ҙә тәжрибәһе булмаған, республика фирҡәһе ағзаһы Дональд Трамп килде. Был еңеү Американың ғына түгел, ә тотош донъя сәйәсәтендә яңы дәүер башланыуға килтерәсәк, тип әйтергә була, сөнки яңы президенттың алдына ҡуйған маҡсаттары илдең әлегә тиклем барған юлын дауам итеүҙе күҙалламай.**

Шулай ҙа хәлдәр ҡапыл ғына үҙгәреп китер, тип көтөү урынһыҙ, сөнки Аҡ йорттоң яңыртылған составы халыҡ-ара сәйәсәттә ниндәй йүнәлеш алырын бер кем дә аныҡ ҡына әйтә алмай. Енелгән кандидаттың фекерҙәрен һәм ҡараштарын әҙме-күпме күҙалларға мөмкин булһа, Дональд Трамп менән бындай "күрәҙәселек" килеп сыҡмай. Уның теге йәки был хәлгә, кешегә ҡарата фекерен йыш үҙгәртеүен һайлау алды сығыштарында йыш ишетергә тура килде. Шуға күрә Трамптың "еңә ҡалһа, илдең эске һәм тышҡы сәйәсәтен кардиналь үҙгәрештәр көтә", тиеүенә әллә ниндәй ҙур өмөттәр бағлау кәрәкмәй. Өмөттәрҙең аҡланмауы ла бар.

АҠШ тарихындағы иң "көтөлмәгән" президенттан беҙгә нимә көтөргә? Әлегә тиклем ҡырҡыу, бар мөһим һорауҙар буйынса ла ҡапма-ҡаршылыҡлы позицияла тороусы ике ил араһында бынан һуң ниндәй мөнәсәбәт булыр? Дональд Трамп, үҙенең оппонентынан айырмалы рәүештә, һайлау алды кампанияһы барышында беҙҙең илгә ҡарата дуҫтарса мөнәсәбәттәге һүҙҙәре менән айырылып торҙо. Ләкин АҠШ-та Рәсәй хакерҙары һәм һайлауҙарҙа Мәскәү "ҡулы"ның барлығы тураһындағы ығы-зығы ҡуйырған һайын, Трамп иптәштең дә фекерҙәре үҙгәреш кисерҙе. Унын: "Бәлки, беҙҙең (Рәсәй менән) мөнәсәбәттәр яҡшы булыр. Бәлки, бик насар булыр. Ә, бәлки, улар (мөнәсәбәттәр) ҡап уртала торор", - тигән һүҙҙәрен онотоорға ярамай. Шулай уҡ уның командаһы ағзаларының ҡайһы берәүҙәре Мәскәүгә һәм башлыса Владимир Путинға ҡарата ҡиҫкен тәнҡит менән сығыш яһай. Тамсы тамата тама ташты тишә, шуға күрә Америка президентының Рәсәйгә ҡарата артабанғы ҡарашы ниндәй булыры яныңдағыларҙың фекеренә һәм һүҙҙәренә лә бәйле. Сәйәси элитаның баҫымы һәм хәрби ведомстволарҙа Рәсәйгә кире ҡараште булыусыларҙың күп булыуын да онотоорға ярамай. Һис юғында, ҡараштар ҡырҡа үҙгәреп, мөнәсәбәттәр ҡапыл йылынып китер, санкциялар алыныр, тип көтөү урынһыҙ. Шулай ҙа, яҡшыға юрайыҡ.

Барак Обама ваҡытында АҠШ менән тығыҙ бәйләнештә булған Көнсығыш Европа илдәрендә был һайлау һөҙөмтәһе көслө тулҡынланыу тыуҙырҙы. Уларҙың йәшәйеше Америка менән тығыҙ бәйләнгән, шуға күрә яңы етәксе менән мөнәсәбәттәрҙең ни тиклем тиҙ һәм, иң мөһиме, ниндәй юҫыҡта урынлашыуынан сығып, уларҙың да хәле теге йәки был яҡҡа үҙгәреүе мөмкин. Дональд Трамптың НАТО альянсында реформа эшләргә йәки уны икенсе ойошма менән алыштырырға кәрәклеге тураһындағы һүҙҙәре Евросоюз составындағы илдәр араһында оло хәүеф тыуҙырҙы, сөнки әлегә тиклем улар Америка бюджетынан "туҡланды". Ә төшөмлө урындан бер кемдең дә енел генә ҡолаҡ ҡаҡҡыһы килмәй, тимәк ЕС илдәре, үҙҙәренең мин-миңлелеген аша үтеп, АҠШ-тың яңы хөкүмәте менән яҡшы мөнәсәбәттәр ҡорорға тырышасаҡ. Украина ла ошондай уҡ хәлдә тороп ҡалды. Хиллари Клинтон йөҙөндә үҙенең яҡлаусыһын һәм туйындырыусыһын юғалтҡан Украина етәкселеге лә Дональд Трамптың яйын табырға ынтыласаҡ. Ә бының өсөн уға Минск килешеүҙәрен тулы кимәлдә үтәргә һәм Донбаста тыныслыҡ урынлаштырыу өсөн бар көсөн һалырға кәрәк буласаҡ. Тимәк, граждандар һуғышы мәхшәренә батҡан был илдә, ниһайәт, тыныс көндәр тыуыр, тигән өмөт бар.

Дональд Трамптың: "АҠШ башҡа илдәргә үҙенең йәшәү рәүешен көсләп тағыу сәйәсәтенән баш тартасаҡ", - тип белдереүе, һис шикһеҙ, уның иң мөһим фекерҙәренең береһе. Шуға күрә, артабан хәл-ваҡиғалар нисек кенә ҡуйырмаһын, Дональд Трамп дәүере донъялағы бөтә илдәр менән дә ихтирамға һәм тиң хоҡуҡлыҡ принциптарына ҡоролған булыуы менән тарихта ҡалыр, тип ышанға килә.

**Гөлназ САФУАНОВА.**

# ХАЛЫҠ ДАУАҺЫ



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

## Күҙ төбө ҡарайыуы

❖ 1 балғалаҡ ҡара сәйгә 1/4 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, 40 минут төнәтергә, һөҙөргә һәм мамыҡты сылатып, 10 минутҡа күҙ ҡабаҡтарына һалырға ла, 3-4 тапҡыр алыштырырға. Иң һуңынан һалҡын һыуға манылған мамыҡ ҡуйбыҙ һәм күҙ ҡабаҡтарына крем һөртәбеҙ.

❖ Ҡабығында бешкән картуф киҫеген 10 минутҡа күҙ ҡабаҡтарына һалырға була.

## Бөйөр өҫтө биҙе

❖ 500 мл ҡайнар һыуға 2 ҡалаҡ ҡара ҡарағат япраҡтары һалырға, ярты сәғәт төнәтергә, һөҙөргә һәм көнөнә 3 тапҡыр 150-шәр грамм эсергә. Көн һайын яңы төнәтмә әҙерләргә.

## Тромбофлебит

❖ 50 грамм кипкән, ваҡланған каштан сәскәһе йәки каштан емешенә ярты литр араҡы ҡойорға, 10 көн төнәтергә, һөҙөргә һәм көнөнә 3-4 тапҡыр ашарҙан ярты сәғәт алда 10-ар тамсы ҡабул итергә.

❖ Ошо уҡ төнәтмә менән веналарға компресс эшләргә.

## Йөрәк сирҙәренән

❖ Йөрәк ауыртыуынан, атеросклероз, стенокардия, йөрәктең ишемик сиренән, ҡан баҫымын нормаға килтерергә бал менән үләндән ярҙам итер. 500 грамм йүкә йәки ҡарабойҙай балын эмалле һауытҡа һалырға, 0,5 литр араҡы ҡойорға, талғын утта болғата-болғата өҫтөндә күбектәр барлыҡҡа килгәнсе йылытырға һәм уттан алып, һыуытырға. Аҡ сәскә, бесәй үләне тамыры, арыҫлан ҡойороғо үләне, кипкәр (сушеница болотная) һәм күгүләнде ваҡлап, берәр семтем алып, уға 1 литр ҡайнар һыу ҡойорға. Ярты сәғәт төнәткәндән һуң, бер нисә ҡат марля аша һөҙөргә, алдан әҙерләгән балды ҡушырға һәм бүлмә температураһында 3 тәүлек төнәтергә. Иртән һәм кисен ашарҙан 20 минут алда ҡабул итергә. Тәүге 7 көндә - 1-әр балғалаҡ, һуңынан төнәтмә бөткәнсе 1-әр ҡалаҡ эсергә. 7-10 көн ял иткәндән һуң, дауаланыу курсын ҡабатларға. Ошондай курстар менән 1 йыл дауаланалар.

**Айбикә ЯҠУПОВА.**

✓ Бабич янында Иркәбаев тигән иптәше була. Уларҙы заводтағы революционный комитетҡа бирәләр. Һәм уларҙы шпиондар тип танымталар. Ревком быларҙы атырға ҡарар бирһә лә, Бабичтың шағир икәнлеген белеү ҡотҡара.



ЙОЛАЛАРЫБЫҘ



# БАШҠОРТ КЕЙЕМЕ

**Көньяҡ-көнсығыш башҡорттары борондан малсылыҡ менән шөғөлләнгән һәм яҙлы-көҙлө йәйләүҙә көн күргән. Был территорияға юрматылар, ҡыпсаҡтар, тамъян, табын, үҫәргән, бөрйән ырыуҙары инә. Шуға ла был төбәктең матди мәҙәниәте күсмә донъя традицияларына нигеҙләнгән. Даими күсенеп йөрөгәс, көнкүреш кәрәк-яраҡтары, шул иҫәптән, кейем дә унайлылығы менән айырылып торған.**

Көньяҡ-көнсығыш башҡорттары елән кейгән, сөнки йәшәгән ерендә тәбиғәт ҡырыҫ ҡына булған. Башлыса түбәнәк тауҙарҙан, Көньяҡ Уралдың тау платоһынан (Йылайыр платоһы) торған рельеф кейемдең нисек итеп кейелеүенә лә үҙ йоғонтоһон һалған. Был территорияла көн дауамында ла температура ҡапыл үҙгәреп тора. Шуға ла был яҡ башҡорттарының кейемдәре ҡатлы, сөнки һыуытып ебәрһә, улар йоҡаҡ кейемдә ҡалынына алыштырып тормаған, ә өҫтөнән ҡатлап кейгән дә ҡуйған.

Көньяҡ-көнсығыш костюмы формаһының геометрик төрө оҙонса түңәрәккә яҡын. Был форма кейемдең мул тегелеше, костюмдың ҡатлы-ҡатлы булыуы, ҡушъяулыҡ иҫәбенә барлыҡҡа килә. Ҡушъяулыҡтың остары иркен төшөп тора, кәүҙәне арттан да тотош ҡаплай.

Малсылыҡ менән шөғөлләнгәнгә күрә, һыбай йөрөү был төбәк өсөн ғәҙәти күренеш булған. Ир-егеттәр генә түгел, ҡатын-ҡыҙҙар ҙа, өлкән йәштәгеләр ҙә, балалар ҙа һыбай йөрөгән. Төймәһеҙ елән һыбай йөрөү өсөн уңайлы булған. Еләндең еңе тарайып бөткән, ул ҡулдың беләҙеген тығыҙ итеп ҡаплап торған. Быйың да үҙенең сере бар. Күҙ алдына һалҡын көндә һыбай сабып китеп барған кешене килтерегеҙ. Уның ҡулы гел горизонталь торошта, сөнки ул ат менән идара итеп барырға тейеш. Шуға ла еләндең еңе ябыҡ һәм кешене елдән һаҡларға тейеш була.

10-12 сантиметрға тиклемге ултырма яға ла ошо уҡ функцияны үтәгән. Ул битте һәм муйынды елдән һаҡлай. Төймәһеҙ еләндең итәктәрен ҡаплап, бәйләп ҡуйыу ҙа тәндө йылытҡан.

Был төбәктең костюмы ғәҙәттәгесә, күлдәктән, ирҙәр күлдәгенән, елән һәм кәзәкей, сақмандар торған, ҡайһы урындарҙа камзул кейгәндәр. Ҡышҡы кейем төлкө йәки буре ягалы тундан тора. Күлдән өсөн туҡыма мул тотонолмаған, күлдәктең итәге буйлап үткән аппликацион биҙәкте йәки тағы бер әүеркә һалыуҙы иҫәпләмәгәндә, биҙәлмәгән дә. Ә бына өҫ кейеме биҙәктәре менән айырылып торған. Тәү ҡарашҡа, тотош костюм бай итеп орнаменттар менән биҙәлгән кеүек тойола, әммә ысынында биҙәктәр кешегә күренеп торған урындарға ғына һалынған.

Көньяҡ-көнсығыш башҡорттарының өҫкө кейеме башҡа төбәктә йәшәүсе башҡорттарҙыҡынан сағыулығы, биҙәкле булыуы менән айырылып тора. Тап ошо костюм хаҡлы рәүештә башҡорт милли кейеме тип иҫәпләнә, сөнки беҙҙең көндәргә тиклем бер үҙгәрешһеҙ килеп еткән. Бында Урал тауҙарының да өлөшө бар, сөнки кеше үткеһеҙ урмандар, юлдар булмауы, бейек тауҙар башҡа халыҡтарҙың үтеп инеүенән һаҡлаған. Шуға ла был ырыуҙар үҙ аллы, башҡаларҙың тәьҫиренән тыш үҫешкән, был костюмдарҙа ла яҡшы күренә.

**Айгөл КАМАЛИЕВА.**
**"Башҡорт костюмы" китабынан.**
**(Дауамы бар).**

ХӘТЕРКИТАП

# ШӘЙЕХЗАДА БАБИЧ НИСЕК ҺӘЛӘК БУЛҒАН?

**(Башы 1-се биттә).**

1919 йылдың мартында булған фажиғәнең шаһиттары күптән фанилыҡтан баҡыйлыҡҡа күсте, был ваҡиға тураһында үҙ мәлендә яҙылған иҫтәлектәр, мәҡәләләр совет осороноң ҡаты цензураһы аша үтә алманы. Шуға ла бөгөн берҙән-бер әмәл - шул осорҙа донъя күргән ваҡытлы матбуғатты өйрәнеү һәм бәхетле осраҡ менән архивтарҙа һаҡланып ҡалған мәғлүмәттәргә юлығыу.

1958 йылда Әхнәф Харисов төҙөгән "Шәйехзада Бабич. Һайланма әҫәрҙәр" китабы донъя күрә. Был - шағир вафатынан һуң Башҡортостанда баҫылған тәүге йыйынтыҡ. Ғалим китаптың инеш өлөшөндә шағирҙың нисек һәм кемдәр ҡулынан үлтерелеүе хаҡында һүҙ ҡуҙғатып, түбәндәгеләрҙе яҙа: "1919 йылдың 28 мартында, Темәстән Моракка (Ҡыҙыл Мәсеткә) Башревкомдың типографияһын күсереп алып барған ваҡытта, бер нисә иптәше менән бергә революцияның яуыз енәйәтселәре ҡулынан фажиғәле рәүештә һәләк була".

Тик был мәғлүмәт бик бәхәсле булып сыға. Тәүгеләрҙән булып Баймаҡ районының Икенсе Эткол ауылында йәшәгән, Бабичтың Этколда ҡунып китеүенә шаһит булған ул осорҙағы йәш уҡытыусы Шәһәргәзи Ғәбдиев был мәғлүмәткә ҡаршы сыға. Ул Әхнәф Харисов исеменә хат яҙа. Хат хәҙерге көндә Рәсәй Фәндәр академияһының Өфө фәнни үҙәге архивында һаҡлана. Унда былай тиелгән: "Хөрмәтле Әхнәф Харис! Бабичты Башревком типографияһын Темәстән Моракка (Ҡыҙыл Мәсеткә) алып барғанда үлтергәндәр, тиһең. Был мотлаҡ хата. Темәс ваҡытлыса баш ҡала, тип иғлан ителгәс, Ырымбурҙа, Каруанһарайҙа, Кир. край (Ҡырғыҙ крайы - **Г.С.**) заманында "Енбекши казах" тигән газет өсөн ваҡытлыса файҙаланып торған типографияны Ырымбурҙан Йылайыр аша Темәскә алып килә яткаҡда, Злобин тигән кешенең отрядына осрап, шул Злобиндар Бабичты һәләк итә лә инде".

Шәһәргәзи Шаһибал улының хатына Әхнәф Харисов былай тип яуап бирә: "Хөрмәтле иптәш Ғәбдиев! Бабичтың ҡайҙа һәм нисек үлтерелеүе хаҡындағы деталдәрегеҙ өсөн рәхмәт. Мин үҙем дә өйрәнә һәм төпсөнә торғас, шул уйға (һеҙ яҙғандарға) килгәйнем. Һеҙ быны бик ваҡытлы дөрөҫләнегеҙ" (Хат 2005 йылда сыҡҡан "Шәһәргәзи сәсән" китабында баҫылған. Төҙөүсеһе - Азамат Тажетдинов).

Бабич ижадын өйрәнгән Зәбихулла Исҡужин да: "Иркәбаев менән Бабичты Әлимсат ауылынан сығып (Йылайыр районындағы бөткән ауыл) Кананикольскийға табан барғанда "шикле кешеләр" тип тотоп алалар", - тип яҙа. Ул да уларҙың Темәскә табан китеп барыуҙарын билдәләй.

Ошо факттарҙы тағы ла бер мәҡәлә менән раҫларға була. "Бабич ҡәбере" тип атала ул. 1924 йылдың 3 февралендә "Башҡортостан" гәзитендә баҫылып сыға. Мәҡәләне тулыһынса тәҡдим итәм: "Татарстан" газетаһында иптәш Чөнәкәй Бабич ҡәбере хаҡында ошо һүҙҙәрҙе яҙа: "Бабичты 1919 йылдың башындараҡ Оренбургтан сығып, Йылайыр кантоны мәркәзе булған Преображенский ауылына табан ҡарап барғанда Аҡъяр ягынан ике арала тотоп алалар. Бабич янында Иркәбаев тигән иптәше лә була. Уларҙы заводтағы революционный комитетҡа бирәләр. Һәм тотоп килтереүселәр уларҙы шпиондар тип танымталар. Ревком быларҙы атырға ҡарар бирһә лә, Бабичтың шағир икәнлеген белеү ҡотҡара. Бабич ҡулында бик яҡшы револьвер була. Уны бер командир алып, Бабичтың эшен ревкомға тапшыра, үҙе разведкаға китә.

Шул ваҡытта Бабичҡа заводтан китергә ҡушалар. Ул тыңламай. Бер көндө уның револьверын алып киткән командир үҙенең ғәскәрҙәре менән ҡайта. Бабич үҙенең әйберен һорар өсөн яны ғына һуғыштан ҡыҙып ҡайтҡан ғәскәрҙәргә ҡаршы урамға сыға ла, револьверын һорай. Ғәскәрҙәр уны төрмәнән ҡасып сыҡҡан тип уйлап, шундуҡ үлтерәләр. Шулай итеп, ул аңлашылмау арҡаһында гонаһһыҙға һәләк булды.

Уны башҡа үлектәр менән бергә завод янындағы бер урынға күмәләр. Уның кәүҙәһе хәҙерге көндә Преображенский ауылы янында туғандар ҡәберенең ике йөҙ сажин самаһы ергә күмелгән. Йылайырҙа Бабич исеменә хәтирә эшләү комиссияһы бар. Уның рәйесе Бикбов (бәлки Бикбабов - **Г.С.**) был хәбәрҙе дөрөҫләй. Шул комиссия Бабичтың ҡәберенә һәйкәл эшләтергә теләй".

*"Башҡортостан" гәзите, № 17 (178) 3 февраль, 1924 йыл.*

Теүәл ун йылдан, 1934 йылда, ВКП (б)-ның Башҡорт обкомы тезистары баҫыла. Унда Башҡорт милли хәрәкәтендә ҡатнашҡан Бабичтың үлеме хаҡында "шағир революция дошмандары ҡорбаны" булды тиәсәктәр. Шулай итеп, тарихи ваҡиғаларға "төҙәтеүҙәр" индерелә башлай...

"Башҡортостан иҫән ҡала, тиһән, бер йәнемә миллион үлем бир!" тигән һүҙҙәрҙе яҙған шағирҙың булмышы ла, яҙмышы ла, хыялдары һәм хатта юғалтыуҙары ла тарих тарафынан төҙәтелергә тейеш түгел. Ярамай. Тәү сиратта үҙебеҙ өсөн.

## Тағы бер хәтирә

### ШАҒИРЫБЫҘҘЫ ИҪКӘ ТӨШӨРӨҮ КИСӘҺЕ

Һөйөклө шағирыбыҙ Шәйехзаданың Башҡортостан азатлығы, башҡорт ярлыһының бәхете юлында ҡорбан булыуына бер йыл тулды. Иркебеҙ, яҡты бәхетебеҙ юлында йәнен фиҙа иткән ҙур шағирыбыҙҙы үлгән көнөндә иҫкә төшөрөп, Башҡортостан сәнәиғ нәфисәһе суғбәһе (Башҡортостан художество сәнғәте - **Г.С.**) һәм башҡорт йәштәре тарафынан һағыныу кисәһе яһалды. Кисәлә тамашаға өс бүлектән ғибәрәт булған "башҡорт әҙәбиәте кисәһе" ҡуйылды.

Сәхнә асылғас та, сәхнәгә айырым бер йәм биреп торған Бабичтың ҙур рәсеме янында тороп, Зәки иптәш Вәлидов шағирҙың әҙәбиәтебеҙҙәге урыны, Башҡортостанға хеҙмәте тураһында һөйләнә. Вәлидов иптәштән һуң башҡорт йәштәре хор менән "Мәтәм маршы"н йырланылар. Халыҡ шағирҙы хөрмәтләп, аяҡ үрә баҫып тыңланы. Унан һуң художество сәнғәт мөдире Мортазин -Иманский Бабичтың сәнғәткә ҡарашын, Ишмаков, Таһиров, Аллабирҙе Йәғәфәров иптәштәр шағирҙың Башҡортостанға хеҙмәтен, нисек ҡорбан булыуын һөйләп үттеләр. Нуриәғзәм Таһиров скрипкаға ҡушылып, "Эскадрон"ды башҡарҙы. Сәлихов иптәш "Ялан Йәркәй"ҙе башҡарҙы. Бынан тыш, башҡортса бейеүҙәр, ҡурайҙа уйналған көйҙәр... Кисәнән килгән файҙаға Бабичтың рәсеме яһатылып, Башҡортостандағы сәнғәт учреждениеларына бушҡа таратыласаҡ.

*"Башҡортостан хәбәрҙәре" гәзите, Стәрлетамаҡ, 1920 йыл, 8 апрель.*

**Гөлсәсәк САЛАМАТОВА,**
**филология фәндәре кандидаты, Өфө дәүләт сәнғәт институты доценты.**



## ТЕМАНЫ ДАУАМ ИТЕП...

Өфөлә башҡорт шиғриәте классигы, йәмәғәт һәм сәйәси эшмәкәр, тәүге башҡорт Хөкүмәте ағзаларының береһе Шәйехзада Бабичтың тормош һәм ижад юлына арналған "Бабич" исемле тулы метражлы тарихи фильм төшөрөү тамамланды. Картинала 1914-1919 йылдарҙа Башҡортостан, Ырымбур, Троицк, Силәбе биләмәләрендә барған тарихи ваҡиғалар сағылдырыла. Фильмды республика Башлығының туғыҙ миллион һумлыҡ грантына "Йәнле таҫма" кинокомпанияһы төшөрҙө. Кинорежиссер Булат Йосопов хәбәр итеүенсә, кино 2016 йылдың 27 июнендә төшөрөлә башлап, 67 көн дауам иткән. 80 ролдә һәм күмәк сәхнәләрҙә бик күп халыҡ ҡатнашҡан. "Мин төп ролде башҡарған актер Илгиз Таһиров менән айырыуса ҡәнәғәтмен. Ул үҙен ил кимәлендәге проекттарҙа ла эшләй алырлыҡ юғары профессионал итеп күрһәтте", - ти Булат Йосопов. Әлеге ваҡытта материалды монтажлау бара. Премьера ошо көндәрҙә күрһәтеләсәк.

✓ ***Билге итеп башлыса таш һайланған, шуға ла Башҡорт илендә Ташлы исеме менән атамалар ифрат күп булған һәм һуңыраҡ был атамалар ауыл исемдәренә лә күскән.***



*ТАРИХ ЯРСЫҠТАРЫ*

# АТАМАЛАРҘА - ХАҠ ТАМЫРҘАРЫБЫҘ

**Тарихты архивтарҙағы документтарҙа, боронғо китаптарҙа, археологик ҡаҙылма материалдарында ғына түгел, ә ер-һыу, тау-ҡая, ауыл-ҡала атамаларында ла эҙләү фарыз. Оҙаҡ йылдар үҙебеҙҙең мең ырыуы башҡорттары йәшәгән Әлшәй, Дәүләкән, Миәкә һәм башҡа төбәктәрҙең топонимик атамаларын өйрәнеү миңә халҡыбыҙҙың тарихына бәйле күп биттәрҙе асырға, асыҡларға ярҙам итте. Гәзит уҡыусыларға үҙемдең эҙләнеүҙәремдән ҡайһы бер мәғлүмәттәрҙе еткереүҙе дауам итәм.**



Ҡот - өс кенә хәрефтән торған был һүҙ телебеҙҙә ифрат оло мәғәнә йөгөн йөрөтә. "Ҡот" һүҙе бер ваҡытта ла таушалмай. Бәләбәй районында үҙ замансында тамыры ошо "ҡот" һүҙенән алынған Ҡотоҙо ауылы булған, урыҫтар килеп урынлашҡас, был урында Знаменка исеме менән урыҫ ауылы барлыҡҡа килә һәм тиҙ генә үҫеп китә. Баҙары, тирмәне, башҡа кәсеп урындары барлыҡҡа килә. Башҡорттарҙың нисбәте кәмей барып, Ҡотоҙо ауылы тамам бөтә. Әммә ләкин Мәкәш, Ҡорайтмаҫ, Боранғол, Ҡыҙрас ауылдарының оло кешеләре был ауылдың атамаһын һаман да телдәренән төшөрмәй һәм Знаменка ауылын улар Ҡотоҙо тип йөрөтә. Минең ҡәйнәм Гөлйыһан ҡытлыҡ йылдарҙа был ауылға һатыу менән йөрөгән. Бик ярата ине ул Ҡотоҙо ауылын. Ауылдың атамаһын ул былай тип аңлата торғайны. Ҡасандыр, ҡайҙандыр килгән башҡорттар үҙҙәре менән бик ҙур таш тоҙ алып килгән булған. Ауыл булаһы урынға был тоҙ ташын ҡот итеп юрап, өшкөрөп күмгәндәр, ләкин урынын бер кемгә лә әйтмәгәндәр, сөнки бында тоҙ бик ҡәҙерле тауар булған. Беҙҙең ауылдарҙа тоҙ өшкөрөү ғәмәле бөгөн дә бар. Мәкәштән Ғәйзуллина Минеүәрә һөйләүенсә, уның оло ҡәйнәһе Хәкимә әбей тоҙ өшкөрөргә бик маһир булған. Ул тоҙ доғаһын белгән. Мин был доғаны Фәниә апай Миңнеәхмәтованан яҙып алдым.

Төйәк - ырыуҙың туҡтаған һәм кире әйләнеп ҡайта торған урынын аңлатҡан һүҙ. Төйәккә урын һайланғас, иң әүәл билге ҡуйылған булған. "Иҙеүкәй" эпосында Мораҙымдың ошондай телмәре бар: "Биләнсек башы биш тирәккә билге төйҙөм йорт өсөн". Билге итеп башлыса таш һайланған, шуға ла Башҡорт илендә Ташлы исеме менән атамалар ифрат күп булған һәм һуңыраҡ был атамалар ауыл исемдәренә лә күскән. Билге итеп ағас та файҙаланылған, күп осраҡта ике билге бергә йөрөгән. Билгегә мотлаҡ ырыуҙың тамғаһы, ораны, ҡошо яҙылған. Билге итеп ниндәй ағас ҡулланыуға ҡарап, был ағас ырыу ағасы итеп тә билдәләнгән, йә булмаһа, тәғәйенләнгән ырыу ағасы билге итеп ҡуйылған. Билге ҡуйылған урынға (тамғалы ташы булған төйәккә) башҡа ҡәүемдәр урынлашмаған, был урын эйәле булып иҫәпләнгән. Билге төшөнсәһе минлекләнгән урынергә ишара яһап, "төйәк" тигән һүҙ менән дә йөрөтөлгән.

Төйәк - туҡталыш урыны ғына түгел, йәшәү, ҡышлау урыны ла булып, бында тыуым, үлем хәлдәре лә булған, ошонан сығып, тыуған төйәк, гүр-төйәк, гүр-тупраҡ төшөнсәләре ҡулланылышҡа инеп киткән. Бала тыуғанда, Ислам ҡанундары талап иткәнсә, мотлаҡ ҡорбан салынған һәм йәнә төйәк һүҙе, был осраҡта "тейәк" шәкеле менән дә ҡулланылып, салынған малды тейәккә күтәреп тунау өсөн арҡан тағып яһалған арҡыры ағасты билдәләгән. Салынған малды өҫкә күтәреп тунау ғәмәле башҡорт халҡында бөгөн дә теүәл үтәлә. Был "Урал батыр" эпосындағы талапты - ҡанды ризыҡ итеп ҡулланыуҙы тыйған талаптың ҡәтғи үтәлеүен күрһәткән ғәмәл, сөнки арт һандан күтәрелгән мал ҡаны тамсыһына тиклем һарығып бөтә. Һәр бер төйәктә махсус әҙерләнгән тейәктәр, мал салыу урындары булған.

Бәләбәй атамаһының барлыҡҡа килеүе фәҡәт Иҙеүкәй исеме менән бәйләнгән кеүек күренә. Беренсенән, был һүҙгә аңлатма эҙләгәндә беҙ боронғо Иҙеүкәй иленең бөгөнгө көндәргә тиклем һаҡланып килгән атамаларына мөрәжәғәт итергә тейешбеҙ. Эпостан юлдар:" Һайыҫҡан уйлап тормаған, Иҙеүкәйгә юл башлап, Иҙел ағышын түбәнләп, Бәлә тауға ҡаратып, осоп алдан киткән, ти. Уңға-һулға Бәләнән аҡҡан йылға башынан һайлап ҡунып имәнгә, Иҙеүкәйҙе көткән, ти". Был өҙөктә Бәлә атамаһы ике урында килтерелеп, туранан-тура Иҙеүкәй шәхесенә төбәп тора. Хәҙер был Бәлә исеменә аңлатма: "Бәләтау - Башҡортостандың Мәләүез районындағы Аптыраҡ ауылы янында Ағиҙелгә яҡын тау". Был фараз Иҙеүкәй эпосындағы боронғо географик атамаларға аңлатманан алынды. Өҫтә килтерелгән өҙөктә Бәләтауҙан башланып, уңға-һулға аҡҡан йылға тураһында ла хәбәр бар. Был йылғаның исеме Бәлән. Эпоста килтерелгән сюжет Иҙеүкәйҙең юл мажараларының береһе. Йәғни Туҡтамыш менән асыуланышҡан Иҙеүкәй Аҡ Урҙанан сығып китә һәм байтаҡ юл мәшәҡәттәре менән Сытмыр ханға юл ала. Иҙеүкәй үҙенең сәфәрендә был аталған урындарҙан үтә булып сыға һәм был тарафтарҙа йылға исеме менән бәйләп, Иҙеүкәйҙең Бәлән бейе булыуы, йә булмаһа, тау исеме менән бәйләп, уның Бәлә бей булыуы киң билдәле әхүәл булған, әлбиттә. Бөгөнгө Бәләбәй ҡалаһы Мәләүез тарафтары менән йәнәш урынлашҡанын беләбеҙ. Ә был урындар Иҙеүкәй батырҙың һәм уның ата-бабаларының боронғо икһеҙ-сикһеҙ иле булған. Һуңыраҡ башҡорттар бында ултыраҡ торлаҡ-йәшәү урыны барлыҡҡа килтереп, бында халыҡ төпләнеп йәшәй башлағас, был исем-атама географик атамаға әйләнеп, Бәләбәй булып киткән, тип фаразларға була.

Боғаҙы атамаһын тасуирлаусы һүҙ ҙә "Иҙеүкәй менән Мораҙым" эпосынан алынды. Унда шундай һүҙҙәр бар: "Туҡтамыштай ҙур ханнар, туҡ боғаҙай тарханнар, заты Сыңғыҙ солтаннар, атаның булған баласы Идегәйҙәй бер ирнең килешенә ҡарады". Ауыл атамаһының нигеҙендәге буға һүҙе борон үгеҙ, һыйыр малын атаған ҡәҙимге һүҙ булған. Был һүҙ бөгөнгө телмәрҙән төшөп ҡалып бөткән. Үҙ заманында ҡаңлыларҙы (үҫәргәндәрҙе) минлекләп тә әйтелгән был буға һүҙе эпоста сағыштырыу ҡалыбы итеп килтерелә. Башҡорттарҙың тархандары туҡ буға менән сағыштырыла һәм "туҡ боғаҙай" тигән ҡанатлы метафора телмәрҙә булғаны күренеп тора. Боғаҙы ауылының исеме лә буға һүҙенән алынған, әлбиттә. Үҙҙәренә төбәк итеп һайлаған урындарын ҡаңлылар, был Буғаҙай урыны, тип минлекләргә мөмкин. Бына шулай, башҡорттарҙың үҙ биләмәләрен исем-атамалар менән минлекләй торған фиғел-ғәҙәте был осраҡта ошо шәкелдә - буғаҙай (тархандар) шәкелендә төбәк атамаһы булып даими ҡулланылып, ауыл булып төпләнеп киткәс, рәсми атамаға - Боғаҙы атамаһына әйләнгәне көн кеүек асыҡ.

**Клара ХӘМИҘУЛЛИНА.**
**(Аҙағы. Башы 2-3-сө һандарҙа).**

*БАШҠОРТ ҠАМУСЫ*



*Йәдкәр БӘШИРОВ*

# БӨЙӨК БАШҠОРТ ИЛЕ

## ХАНЛЫҠТАР

### 1.Табын ханлығы

Ошо тарихи сығанаҡтарға ярашлы, Табын ханлығы Башҡортостандың Урал аръяғы территорияһын, ҡара-табындар, барын-табындар, Ыҡ, Сәрмәсән, Туҡ, Кесе Уран, Ырғыҙ, Кәмәлек буйҙарын үҙ эсенә алған ҡеүәтле дәүләт булып торған. Хатта XVIII-XIX быуаттарҙа ла был ерҙәрҙә үҙҙәрен Табын дәүләтендә йәшәгән итеп тойған кешеләр булған. XI быуатта йәшәгән ғәрәп географы Иҙрисиҙең картаһында Табын (tabuni) иле Болғар иленән көнсығыштараҡ урынлаштырылған. Был дәүләт үҙенең атамаһын, күрәһең, хәҙерге Башҡортостандың Ғафури районында урынлашҡан Табын ҡалаһынан алғандыр, был тәңгәлдә күп нәмә асылмаған, сер булып ҡала.

Әхмәтшаһ бей (70-90 йй. XIII б.) заманында Майҡы бей вариҫтары төньяҡ Башҡортостанда, Уса һәм Көңгөр крайында, Минзәлә өйәҙенә тиклем үҙҙәренең сәйәси йоғонтоһон киңәйтә. Тиҙҙән табындар дала һәм урман (ирәкле) табындарына бүленә. Уларҙан һуң Абдал бей (XIV б.), Сулман бей (XIV), Ҡолман бей (XIV), Дөрмән бей (XV), Хоҙайғол бей (XV), Ҡоҙаяр бей (10-20 йй. XVI ), Дәүләтйәр бей (20-30 йй. XVI), Дәүләтбай бей (30-40 йй. XVI), Иҫән (Әсән) бей (40-50 йй. XVI) ил менән идара иткән. Әсән хан заманында Ҡаҙан яуланған, Иван Грозный ханды ҡабул иткән. Уның ҡәбере хәҙерге Башҡортостандың Тәтешле районындағы Түбәнге Соҡор ауылы янында. Артабанғы хакимдар - Иҫән хандың улы Бураҡ хан (60-70 йй. XVI), Көсөгән (Көсөм) хан (XVI б. аҙағы), Кейекбай (50-60 йй. XVIII). Табындарҙың ирекле (төньяҡ) төркөмө хандары - Уйшын Майҡы бей (10-30 йй. XIII), Сыңғыҙхандың һәм Юлсы хандың замандашы һәм көрәштәше, Иртышта күмелгән, Майҡы бейҙең улы Алсаҡ бей (20-30 йй. XIII), Майҡы бейҙең ейәне Болғайыр бей (30-40 йй. XIII). Ҡараса Ҡарағәзиз бей (Ҡаратабын) (50-70 йй. XIII) көнсығыш Урал аръяғын, Миәскә, Миндәккә тиклем яулай һәм Табын ханлығының урындағы хакимы булып китә.

### 2. Чердын (Шырҙан) ханлығы

Чердын (Шырҙан) ханлығы башҡорттарҙан, комиҙарҙан, фин-уғырҙарҙан, йограларҙан (Обь уғырҙары дәүләте тарҡалғандан һуң уғырҙар шулай аталған) торған. Хантылар менән мансиҙарҙың телендә (400-гә тиклем) ситтән ингән лексик берәмектәр байтаҡ. Бер нисә ғилми мәғлүмәттәре XV-XVI быуаттарға тиклем Печора йылғаһы буйында, Вычегда йылғаһы башында, Каманың аҫҡы ағымында уғыр ҡәбиләләре йәшәгәне хаҡында һөйләй. Был фекер төбәктә уғыр һәм төрки-уғыр археологик ҡомартҡылар табылыуы менән дә нығытыла. Ҡыҫҡаһы, уғырҙарҙың хәҙерге Пермь мәҙәниәтенә лә йоғонтоһо ныҡ һиҙелә. Йомғаҡлап әйткәндә, дөйөм Пермь мәҙәниәте, ғалимдар фекеренсә, Көнбайыш Себер уғыр ҡәбиләләре йоғонтоһонда формалашҡан. Телселәр фекеренсә, Пермь телдәре дөйөм алғанда "Обь-уғыр телдәренә хас, әммә мари, мордва һәм Балтика буйы фин телдәренә оҡшамаған үҙенсәлекле билдәләр бар". Шул уҡ ваҡытта хәҙерге Пермь һәм уғыр телдәренең үтә яҡынлығы ла бының күрһәткесе.

**(Дауамы бар).**

*✓ Унан алыр һабаҡтарҙы, тәрбиәне тулы кимәлдә күңелгә һеңдереп тә өлгөрә алмағанмын инде. Ә малай кеше өсөн ғаиләлә атай кәрәк. Атайҙы бик уңған, тырыш кеше булды, тип кенә әйтһәм, әҙ булыр.*



**Ғаилә бәхете йә була, йә юҡ, ул һинең үҙеңдән тормай, тип иҫәпләүселәр ҙә бар бөгөнгө заманда. Бының менән бөтөнләй килешмәүселәр дөрөҫ эшләйҙер, тим, сөнки бәхетле йәки бәхетһеҙ булырға һәр кеше үҙе хәл итә. Йәмғиәтебеҙҙең дөйөм рухи именлеген дә ғаилә генә булдыра ала, был турала хәҙер ил башлыҡтары ла йыш телгә ала. Шулай булмаһа, татыу ғаилә - ил күрке, тимәҫ ине халҡыбыҙ. Милләтебеҙҙең киләсәге лә - тап уларҙың бишегендә тирбәлә бөгөн. Һуңғы мәлдәрҙә барыбыҙҙы ла һоҡландырып йәшәүсе йәш ғаиләләрҙең күҙгә күренеп артыуы ла шатлыҡлы күренеш. Араларында бер-ике бала менән генә сикләнмәгәндәре булыуы, уларҙың балаларының күңеленә һөйөү, ireклек, ышаныс, намыҫ, яуаплылыҡ кеүек төшөнсәләрҙе һала белеүе иһә тағы бер ҡыуаныс. Ҡунаҡтарыбыҙ - дүрт бала тәрбиәләүсе матур пар, М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театрының әҙәбиәт бүлеге етәксеһе Мәҙинә һәм ошо уҡ театрҙың режиссеры Илнур МУЛЛАБАЕВтар менән әңгәмәбеҙ ҙә ғаилә ҡиммәттәре, бөгөнгө заман һәм тәрбиә үҙенсәлектәре тураһында булыр.**

**▸ Илнур, һеҙ ижади ғаиләлә тыуып-үҫкәнһегеҙ, атайығыҙ, Башҡортостандың атҡаҙанған артисы Биктимер Муллабаевты театр әһелдәре бөгөн дә бик һәләтле, үҙенсәлекле актер ине, тип хәтерләй. Әсәйегеҙ - Ләлә Зөфәр ҡыҙы билдәле педагог, башҡорт актерҙарының барыһы ла тиерлек унда белем алған. Улар ниндәй атай һәм әсәй булды?**

беҙҙә ҡәҙерләп һаҡлана. Яңғыҙ ҡалғанда әнейгә 35 кенә йәш булған. Иркә генә ҡатын, бер үҙе донъя көтә алмаҫ, тип шикләнеүселәр ҙә булған. Әммә ул бынамын тигән итеп йәшәне, улында ла яҡшы сифаттар тәрбиәләгән. Матур сифаттарға бай, талантлы, йомарт, ғаилә тип өҙөлөп торған ирем өсөн әнейгә рәхмәтем сикһеҙ. Ҡайнымды иҫләмәгән, уны һөйләмәгән көнө әҙерләргә өйрәнеп ҡалдым мин унан. Әсәйем ҡамыр аштарына оҫта, ә әней ит ризыҡтарын матур итеп бешерә торғайны. Духовкала бешкән ҡаҙ булһынмы, тултырылған тауыҡмы, фарш менән дөгө тултырылған йәшелсәләр - теләнде йоторлоҡ була ине. Хәҙер үҙемдең ғаиләмә ашарға бешергәндә был оҫталыҡтың кәрәге тейә.

# БАЛАЛАРҘЫ НИНДӘЙ ЫСУЛ МЕНӘН

## Ҡушылғанын - үтәргә,

яманлаған, уларҙы үҙһенмәй ситләткән, ҡәйнәләр тураһында йәмһеҙ анекдоттар һөйләгән кешеләрҙе, милләттәрҙе аңламайым. Былар халыҡтың менталитетынан киләләр инде, нишләйһең. Яратҡан кешеңдең атаһы менән әсәһен һин мотлаҡ ихтирам итергә тейешһең, тип иҫәпләйем. Әсәй беҙгә ҡунаҡҡа килһә, күңелгә май ағылған кеүек.

**Мәҙинә:** Әсәйемдең хәрәкәттәре талғын ғына, ә мин, атайым яғына оҡшап, тиҙмен, яндырайммын. 4 бала менән яйлап ултырырға ваҡыт та юҡ, етмәһә, үҙемә лә, ғаиләмә ҡарата ла талапсанмын. Әсәйем килә лә, балаларҙы ла майлап ҡына, һалпы яҡтарына һалам түшәп, арбап ала, әкиәтте лә шундай итеп һөйләй, теләләр ауыҙҙарын асып тыңлайҙар. Ул Өфөгә килһә, ашыҡмай ғына, яйлап йәшәп ҡалабыҙ.

Ғаилә ҡороуыбыҙға 12 йыл, ошо ваҡыт эсендә әсәйем бер тапҡыр ҙа кейәүенә һүҙ тейҙермәне. Күптәр бит ғаилә эсендәге хәлдәрҙе әсәләренә һөйләй һәм улар ҡыҙына ҡушылып кейәүен әрләй. Ә мин былай ҙа өйҙәге сүпте тышҡа сығарып бармайым, шулай ҙа ҡайһы саҡта аңлашмай киткәнде һиҙеп-тойһа

**Мәҙинә:** З. Исмәғилев исемендәге Өфө дәүләт сәнғәт институтын тамамлағас, мине Йәштәр театрына эшкә саҡырҙылар. Унда беҙ 2 тәнҡитсе һәм 4 актер эшкә барҙыҡ. Беҙҙе театр коллективы менән таныштырғанда "Быйыл ГИТИСты тамамлап, йәш режиссер Илнур Муллабаев ҡайтты", тинеләр. "Ҡалай танауы осло", тип уйланым нишләптер. Эшкә килеүен килгәс, эш күрһәтке килә, миңә унан интервью алырға ҡуштылар. Театр белгесе булғас, ябай ғына мәҡәлә яҙғым килмәй, ә уның эш алымдарын, режиссер булараҡ шәхесен өйрәнергә теләп, бөгөн түгел, тип, индермәй йонсотто. Интервьюнан һуң ул үҙе лә мин ултырған бүлмәгә йыш инә торғайны. Бына шул аралашыуҙа, һөйләшеүҙә ныҡ оҡшаттым мин уны, үҙен иркен тотһа ла, артығын һөйләмәй, фекерле, аҡыллы, етмәһә: "Миңә 29 йәш, миңә кейәүгә сығаһыңмы?"- ти. Миңә ул мәлдә 22 йәш ине. Бына шулай, эш күрһәтәм, тип, ҙур пландар менән янып йөрөгән ерҙән ғашиҡ булдым да ҡуйҙым...

**Илнур:** Арҡаһына рюкзак аҫып, төҫлө свитер кейеп, атлап түгел, нисектер һикереп-осоп

**Илнур:** Минең бала сағым бик ғәжәйеп булды. Өйөбөҙҙә әсәйемдең йырлауы, атайымдың ҡысҡырып көлөүе хәтеремә уйылып ҡалған. Шундай гармония, һиллек хөкөм һөрә торғайны өйҙә. Йәй етһә, улар гастролгә сығып китәләр ине. "Атайың менән әсәйең ҡайҙа?" - тип һораусыларға, мин: "Кәстрүлдә", - тип яуаплағанмын. Ярты йәйҙе атайымдың тыуған яғында - Дәүләкән районы Дүртөйлө ауылында, ярты йәйҙе ошо уҡ райондағы әсәйемдең ауылы Сулпанда үткәрә инем. Бик матур мәл булған - дуҫтар менән төнгә тиклем урамда уйнайбыҙ. Мине эт ояһында йоҡлап ятҡан килеш тә табып алғылағандар, сөнки эт ярата торғайным. Колхоздар мәле, эш гөрләп тора ауылда, беҙ малайҙар ырҙын табағына уйнарға йөрөргә ярата инек. Унда тау-тау булып һуғылған борсаҡ ята. Шунда ятып, малайҙар менән борсаҡ атышып уйнай инек...

Атайым бик иртә, 37 йәшендә генә мәрхүм булды. Миңә ул ваҡытта 9 йәш ине. Унан алыр һабаҡтарҙы, тәрбиәне тулы кимәлдә күңелгә һеңдереп тә өлгөрә алмағанмын инде, бер уйлаһаң. Ә малай кеше өсөн ғаиләлә атай кәрәк, быны мин үҙемдең улдарыма ҡарап та әйтә алам. Атайҙы бик уңған, тырыш кеше булды, тип кенә әйтһәм, әҙ булыр, әммә ундай кешеләр күп булмай икәнен мин хәҙер беләм. Һөнәрҙәре лә күп булған уның. Әсәйем һөйләй торғайны, ул 6-сы разрядлы ашнаҡсы ла булған, хатта ресторанда ла эшләгән. Өйҙә лә ябай ғына ризыҡтарҙан тәмле итеп ашарға бешерә ине.

**Мәҙинә:** Ҡайным әнейҙе (ҡәйнәмде шулай тип йөрөттөм) шул тиклем ҡәҙер иткән, ҡулында ғына йөрөткән. Костюмдар, сәхнә күлдәктәре теккән, улар бөгөн дә булмай торғайны уның. Мин ауыл ҡыҙы, Йылайыр районында тыуғанмын, килен булып төшкәс, туғандарым борсолдо ла шикелле башта, Илнурҙы әсәһенең берҙән-бер генә улы, тип тә уйлағандарҙыр инде. Хәҙер кейәүҙәрен миңә ҡарағанда ла нығыраҡ ихтирам итәләр һәм яраталар.

Әней мине ныҡ иркәләтте, шул уҡ ваҡытта талапсан да булды. Бер ҡайҙан да буш ҡул менән ҡайтманы, миңә бүләктәр, төрлө биҙәүестәр алып ҡайта ине. Үҙе лә зауыҡ менән кейенде, махсус тегенселәре булды, миңә лә был йәһәттән өлгө күрһәтте. Шул тиклем ейәнсәр көттө, тик ҡыҙыбыҙ тыуғанын күрә алманы инде, бик үкенесле булды. Бөгөн әней иҫән булһа, ейәнсәрен ҡурсаҡ кеүек кейендереп ҡуйыр ине, тип уйлап алам. Улын ихтирам итеүемде теләне, әҙерәк турһайыбыраҡ йөрөһәм, минең менән айырым ултырып һөйләшеп алырға, сәбәбен асыҡларға тырышыр ине. Йәш саҡта үҙеңдең холҡоңдоң кире яҡтарына иғтибар итмәйһең бит ул, йәшәй торғас, тәжрибә тупланғас ҡына уларҙы шымарта башлайһың. Мәҫәлән, иртәнсәк йоҡонан торам, ә кәйефем юҡ. Ә әней, һәр көн яҡшы кәйефтән, тәмле итеп сәй эсеүҙән башланырға тейеш, тип иҫәпләй ине. Хәҙер үҙем әсәй булғас, бының ни тиклем дөрөҫ икәненә төшөнәм. Эштән ҡайтып киләм, балконға сыға ла: "Киленем ҡайтып килә, әйҙә, ин, аш бешерҙем", - тип ҡаршы ала. Тәүге улыбыҙ тыуғансы бергә йәшәнек. Баштан уҡ айырымланырға мөмкинлегебеҙ ҙә бар ине, тик ул ебәрмәне. Илнур Мәскәүҙә биш йыл уҡып, саҡ ҡайтҡайны, бер үҙенә ҡыйын да булғандыр инде. "Ҡайтып килгәндә тәҙрәлә ут янып тороуы - ҙур бәхет", - тиер ине. Күпме аш-һыу



**▸ Башҡорт халҡында кейәүгә айырым мөнәсәбәт инде ул, йәғни уны ҡайны-ҡәйнәләр нығыраҡ та ярата шикелле?**

**Илнур:** Атайым әсәйемдең ата-әсәһенә "атай", "әсәй" тип өндәшә торғайны. Туйҙа уҡ мин дә рөхсәт һораным да, ҡайным менән ҡәйнәмде "атай", "әсәй" тип йөрөтәм. Үҙемдең атай менән әсәй яҡты донъяларҙа юҡ, хәҙер улар миңә терәк. Ҡәйнәһен ла, һүҙ күтәреп бер нәмә лә әйтмәй. "Кейәүгә биргәнмен, үҙегеҙ белгәнсә йәшәгеҙ", - ти. Шуға ла баштан уҡ өйҙәге аңлашылмаусанлыҡтарҙы сығарырға тырышмаҫҡа, әхирәттәреңә генә түгел, әсәйеңә лә һөйләмәҫкә кәрәк.

**▸ Профессиональ театр режиссеры менән театр тәнҡитсеһенең осрашып ҡауышыуына театр сәбәпсе булғандыр, моғайын, әллә яңылышаммы?**

барған ҡыҙҙы театрҙа күргәс, миндә лә уға ҡарата ҡыҙыҡһыныу уянды. Мөхәббәттең килеүен аңғармай ҙа ҡалаһың бит ул. Ысынлап та, 2003 йылда ГИТИСты тамамлап ҡайтҡанда 29 йәш ине миңә. Әсәйемдең тәртипле, өлгөлө улы булдым, тип әйтә алмайым. Утты, һыуҙы, еҙ торбаларҙы үткәйнем. Үҙ һүҙле булдым, нимәлер уйлаһам, хатта әсәйем дә мине кире күндерә алмай ине, үҙең беләһең, тип кенә ҡуйыр ине.

Ике тапҡыр студент тормошон үтеп өлгөрөлгәйне. Тәүге вуз - Өфө дәүләт сәнғәт институты булды, унда мин актер һөнәрен үҙләштерҙем. Актер булырға уйымда ла юҡ ине. Бәләкәй саҡта бөтәһе лә: "Үҫкәс, кем булаһың?" - тип һорағанда, мин: "Актер", - тип яуаплаһам, атайым: "Аллам һаҡлаһын!" - тип ҡысҡырыр ине. Ошо хәтергә ныҡ уйылып ҡалған. Телен яҡшы белһен, рухлы булһын, үҙ милли мөхитендә үҫһен, тип, атайым мине Р. Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернатына уҡырға бирергә теләне. 1-се класҡа алмағастар, мин башта 35-се гимназияла уҡыным, аҙаҡтан гимназияға күстем. Унда математика йүнәлешендә ныҡлы белем алғас, вертолет институтына уҡырға инеп бөткәйнем, физмат менән география бүлегенә лә алырға әҙерҙәр ине. Шул көндәрҙә урамда атайымдың уҡытыусыһы Фәрдүнә Ҡасим ҡыҙы Ҡасимова килеп сыҡты бит ҡаршыма. "Атайыңдың эшен дауам итергә тейешһең", - тип, уҡырға инергә ҡоҙаланы. Азамат Ғафаров менән күрше йәшәнек, уның менән эйәртенешеп, актерлыҡҡа уҡырға киттек...

*✓ Әсәй булыу ҙур бәхет. Ләкин әсәйҙәр иң тәүҙә ҡатын-ҡыҙ икәнен онотмаһындар ине. Үҙен тик йорт эштәренә һәм балалар тәрбиәләүгә бағышлаған ҡатын-ҡыҙҙар рухи йәһәттән бушанып ҡала.*



# ТӘРБИӘЛӘРГӘМЕ?

## тыйылғанынан - тыйылырға!

Ә өйләнеү мәсьәләһенә килгәндә, көҙ танышҡайныҡ, яҙға туй эшләп тә ҡуйҙыҡ. Хәҙер бына өс улға, бер ҡыҙға атай-әсәй булдыҡ.

**▸ Бөгөнгө заманда күп балалы булырға йөрьәт итеүгә лә ҡыйыулыҡ кәрәктер?**

**Мәҙинә:** Студент саҡта мин үҙ фекерен белдерергә ҡурҡмаған ҡыйыу ғына ҡыҙ инем. Мине карьера эшләр, тип уйланы күптәр. Ә мин бөгөн ғаилә мәшәҡәттәренә башкөлләй сумып йәшәйем һәм тормошом менән ҡәнәғәтмен. Йәш саҡта бер ҡыҙым, бер улым булһын, тип уйлайһың. Ә бына кем өс ул һәм бер ҡыҙ тураһында хыяллана? Бәхет ошо инде ул. Өйләнешкәс, Илнур, ғаиләлә яңғыҙ бала булыуы шул тиклем ҡыйын, балалар өсәү булыр, тине. Әле күп ҡатын-ҡыҙҙар менән аралашам, ирем башҡа бала теләмәй, тиҙәр. Минә күҙҙәре ҡыҙып бер була инде ундайҙарҙың. Шуға ла Илнурҙың ҡыйыу, ышаныслы ир, яуаплы, хәстәрлекле атай булғанына ҡыуанып бөтә алмайым. Әлбиттә, бөгөнгө заманда дүрт бала ҡарауы еңел түгел, төрлө саҡтар була, гел генә былайтып йылмайышып та ултыртта ғаилә башлығының, атай кешенең матди килем таба белеүе лә кәрәк. Бәхет аҡсала түгел, тик аҡсаң булмауы ла бәхет килтермәй, тиҙәрме әле? Үкенескә күрә, бөгөн ижад менән генә шөғөлләнеп, ғаиләне ҡарау ауырғараҡҡа төшә. Күберәк йүгерергә тура килә, шуға ла мин иртән сығып китәм, кис кенә ҡайтам. Хатта, ҡатының ҡыҙғанмаймы ул, тип һораусылар ҙа бар.

**Мәҙинә:** Минең насар уйҙар уйлап, ҡыҙғанып ултырырға ла ваҡытым юҡ. Бер генә бала булғанда, ирем ҡайтҡанда йә ашым бешмәгән, йә бала менән тышҡа ла сығып өлгөрмәгән мәлдәр була ине. Баланы икәүләп поликлиникаға алып барабыҙ. Етмәһә, телефондан бер туҡтауһыҙ: "Ҡасан ҡайтаһың?" - тип шылтыратам, йәки "Сүп һурҙырайым тигәйнем, саң һурҙырғыстың сүп йыйыла торған урыны ҡайһы ерҙән асыла ул?" тигәнерәк сәйер һорауҙар менән борсойом, сөнки үҙаллы бер нәмә хәл итә алмай инем. Хәҙер дүрт баламды эйәртеп, поликлиникаға барам, беренсеһе - сират ала, икенсеһе - кейем систерә, ирем ҡайтыуына өй таҙа, балалар ҡаралған, беренсе булһа ине", - ти уртансы улыбыҙ Илһам. "Мин дә тап атай һымаҡ эшләр инем", - тип минә һабаҡ бирә өлкән улыбыҙ Ильяс. Мәҫәлән, бер көн иртәнсәк һөт һатып алырға тип киткән еренән сәскә күтәреп ҡайтҡан да, артистарса ҡыланып, шуны минә һуҙып тора Илнур. Нығ бушамай, ҡаңғырып йөрөгән мәлем, етмәһә, нимәгәлер асыуланғанмын да. "Таң менән сәскә ташып йөрөмәһәң", - тип ысҡындырам. Бер һүҙ ҙә әйтмәй, подъезд тәҙрәһенән сәскәләрҙе урамға ташлап, эшкә китте лә барҙы был. "Бына бит, нишләп улайтырға инде, шуны индереп ҡуйып китергә булмаймы", - тип һөйләнәм һаман да. "Әсәй, беҙ ҙә шулай эшләр инек", ти малайҙар. Ике бәләкәс менән тышҡа сығып йөрөп инһәм, улдарым сәскәләрҙе индереп, һыуға ултыртып ҡуйғандар. Рәхмәт әйттем. "Иң шәбе - һеҙҙең атайығыҙ, һеҙ унан ундығыҙ", - тип тә өҫтәнем. Аҙнаның биш көнөндә беҙ атайҙы борсомайбыҙ, ул иртән эшкә китә, кис ҡайта. Шәмбе менән йәкшәмбе иһә, ғаилә менән саф һауаға сығабыҙ, ҡышын конькиҙа, тюбингта шыуабыҙ, йәйгеһен йылғаға һыу инергә йөрөйбөҙ. Бассейн, аквапарк быҙ Илһам ҡыйыу һәм үҙһүҙле. Эшҡыуар ҙа сығыр бынан, тип уйлап алам. Шәп психолог, үҙенә кәрәкте башҡаларҙан үҙе һорамай ҙа эшләтә торған бала. Өсөнсө улыбыҙ Ибраһим йәшенә күрә күпте белә, әллә ағаларына ҡарап, эйәреп шулай. Башҡортса ғына түгел, русса ла яҡшы һөйләшә, аҡыллы. "Әсәйем", "атайым", "яратҡандарым" тип кенә өндәшә. Һеңлеһен иркәләтә, өлкән ағайы менән китаптар уҡырға, уртансыһы менән уйнарға ярата. Дискотека ойоштороп ебәрә, үҙе уртала бейеп йөрөй. Ашарға ултырһаҡ, "бисмилла" әйттерә, ашап бөткәс, үҙенсә нимәлер уҡып ҡуя. Өсөһө лә үҙҙәренә иғтибарҙы йәлеп итеп торған сағыу малайҙар.

Ҡыҙыбыҙҙың исеме Мәрйәм, бәләкәс кенә, ҡара ғына сәсле, атаһына ғына ҡарап торған ҡыҙыҡай. Атаһы эштән ҡайтыуын көтөп тора. Ҡәйнәмә оҡшаған, ҙур күҙле. Сағыу ҡиәфәтле, тиҙәр ундайҙарҙы. Ағалары нығ ярата инде үҙен, күтәреп кенә йөрөйҙәр.

Талашып, үҙ-ара аңлашмай киткән саҡтарында, бөтәһен бергә ултыртып, һәр береһенең көслө сифаттары тураһында һөйлә-

тырмайбыҙ беҙ. Тик ниндәй генә хәл булһа ла, мин иремде көн һайын эштән тулы өҫтәл эргәһендә йылмайып ҡаршы алам. Балалар ҙа: "Атай ҡайтты", - тип шатлана.

Быйыл балалар тағы ла бер йәшкә ҙурайҙылар, хәҙер күпкә еңелерәк. Улар менән бергә мин дә үҙгәрәм. Элек атайҙы эшкә ебәрәбеҙ ҙә, үҙебеҙ 10-ға тиклем ятып йоҡлай инек, сөнки эштәрҙе төнөн эшләргә күнегелгәйне. Хәҙер улайтмайым. Әлбиттә, әсәй булыу ҙур бәхет. Ләкин әсәйҙәр иң тәүҙә ҡатын-ҡыҙ икәнен онотмаһындар ине. Үҙен тик йорт эштәренә һәм балалар тәрбиәләүгә бағышлаған ҡатын-ҡыҙҙар рухи йәһәттән бушанып ҡала. Шунан депрессия, үҙеңә ышанмау, ярһыусанлыҡ барлыҡҡа килә. Ҡатын-ҡыҙ үҙенә мотлаҡ ваҡыт табып, рухи яҡтан үҫешергә, үҙенең тышҡы ҡиәфәте һәм эске күңеле өҫтөндә эшләргә тейеш. Шул саҡта ул яңырып, энергетика туплап, рухланып, илһамланып ҡала. Минең кәйефем булһа, башҡаларҙыҡы ла була. Шуға ла таңғы 5-тән йоҡонан торам. Унан һуң, көнөбөҙ матур булһын, барыһы ла өсөн дә рәхмәт, Хоҙайым, тип, иремә, балаларыма, атай-әсәйемә изге теләктәр теләйем. Ошондай матур һүҙҙәр яҙып ҡуя торған махсус дәфтәрем дә бар, ул "Әл-Фатиха" сүрәһе менән башлана. Урамға сығып йүгереп, күнегеүҙәр эшләп инәм. Элек сәй ҙә эсә, душ та инә алмай ултырһам, хәҙер үҙемә ваҡыт бүлә башлағас, яҡшы фильм ҡарарға, китап уҡырға ла мөмкинлегем бар.

**Илнур:** Бала үҫтереү өсөн иң тәүҙә уларҙы яратырға кәрәк. Улар менән гел генә аралашырға ваҡыт табыу ҙа мөһим. Шул уҡ икенсе блюдо әҙерләнгән, компот та бар, балалар тышҡа ике тапҡыр сығып ингән, күлдәктәр үтекләнгән.

**▸ Өс ир баланы атайҙың абруйы менән генә тәрбиәләп булмайҙыр, атай үҙе был мөһим эштә нисек ҡатнаша?**

**Илнур:** Баланы нисек тәрбиәләргә, тип уйлаһаң, ҡурҡыныс һымаҡ ул. Бер нәмә лә белмәйһең, нимә дөрөҫ, нимә юҡ икәнен дә алдан аңлап булмай. Маҡсат шул - кеше булып үҫһендәр. Минең атайым беҙҙе күҙ ҡарашы менән генә тәрбиәләй ине. Унан, ир кеше үҙенең бөтөн ҡылыҡтары өсөн яуап бирергә тейеш, тигән һабаҡты ла яҡшы үҙләштергәнмен. Беҙ Пушкин урамында, актерҙар йәшәгән йортта торҙоҡ. Беҙ - беренсе, Олег Ханов-тар дүртенсе подъезда йәшәнеләр, уның улы Владик менән уйнап үҫтек. Берсаҡ уның пушкаһын уйнарға алып торҙом да, яңылыш ваттым. Атайым, алып барып бир, ти. Киттем, үҙем оялам, ҡыңғырауҙарына баҫтым да, пушканы иҙәнгә ҡуйып, йүгереп төшөп киттем. Атайым ҡаршы инеп килә, бергәләп кире megдек. Анфиса апай ишекте асты ла, ҡурҡыныс бер нәмә лә юҡ, тине. Шундай һабаҡтар бирә ине атай.

**Мәҙинә:** Уландар һәр аҙымда аталарын ҡабатлай. Улар аталары менән һоҡланалар, ғорурланалар. Әсәй кеше малайҙарын әрләргә тейеш түгел, тип иҫәпләй аталары. Әрләһәм дә, барыбер улар мине ишетмәҫ ине. Атайға әйтәм, тиһәң, шунда уҡ үҙгәрәләр. Улар менән ултырып, тыныс ҡына һөйләшә аталары. "Минең исемем атайҙыҡы һымаҡ Илнур ярааталар. Өйҙә бергәләп ултырып берәй кино ҡарайбыҙ. Дүртәүләп ролдәргә бүлеп, әҫәрҙәр уҡыйбыҙ, ике бәләкәй эргәбеҙҙә уйнап ултыра. Ошолар барыһы ла ике көн эсендә эшләнә.

**Илнур:** Бала үҙ ризығы менән тыуа. Ашатыуҙы, кейендереүҙе тырыштырабыҙ ҙа ул. Элек йәйҙәрен ауылда булһам, ҡалған ваҡыт ҡалала үтә ине. Иртән сығып китә инек, кис ҡайта инек, сөнки урамда йөрөү ҡурҡыныс түгел ине. Ә хәҙер малайҙарҙы тренировкаға алып бараһың, алып ҡайтаһың, үҙҙәрен генә йөрөтөп булмай, ҡанһыҙ, аяуһыҙ мәл бит. Тышҡа сығып китһәләр ҙә, саҡ ҡына телефонды алмай торһалар, борсола башлайһың. Ошо йәһәттән тыныс түгелбеҙ. Ҡалғанына, Аллаға шөкөр, борсолмайбыҙ.

**▸ Балаларҙың үҙ-ара мөнәсәбәттәрен нисек яйлайһығыҙ?**

**Мәҙинә:** Ҡайһы кешеләр, дүртенсегә ҡыҙҙары тыуғас, былар ҡыҙ тип мөкиббән китәләрҙер инде, тиҙәр. Юҡ, мин малайҙарыбыҙҙы ла һаман иркәләп уятам, улар менән серләшәм. Икенсегә бәпес көткәндә өлкән улыбыҙ нығ көйһөҙләнә, илай башланы. Шул саҡта беҙ балалар психологына барҙыҡ. Бәләкәйен иркәләйһегеҙ, һөйәһегеҙ икән, өлкәне ситтән ҡарап тормаһын, уға ла өлөш сығарығыҙ, өлкәненә көйһәгеҙ, бәләкәйен дә әрләгән булығыҙ, тине ул беҙгә. Бөтәһенә лә тигеҙ ҡарайбыҙ. Өлкән улыбыҙ Ильясҡа яуаплылыҡ ҙурыраҡ. Атайығыҙ өйҙә булмағанда, өйҙә ағай хужа, ул нимә әйтә, шуны эшләгеҙ, тием бәләкәстәренә. Уны, ҙурайҙы, тип, күңел йылыһынан да мәхрүм итмәйбеҙ. Уға әле 12 йәш, бик үҙаллы, кешелекле, кеселекле, талантлы бала, класында - лидер. Икенсе улышәбеҙ. Бергәләп китап уҡыуҙар ойоштороу ҙа бала менән ата-әсә араһын яҡынайта. Өйҙәге көнкүреш мәшәҡәттәрен дә, элекке кеүек, бер үҙем башҡармайым хәҙер. Үҙемсә тайм-менеджмент ойоштора м, көй ҡуям, эштәрҙе бүлеп бирәм дә, әйҙәгеҙ, балалар, биш-ете йыр эсендә эшләп ҡуябыҙ, тием. Бөтәбеҙ ҙә ошо ваҡыт эсендә өлгөрөргә тырышабыҙ. Эште күмәкләп эшләү тиҙ ҙә, берләштерә лә, ҡалған мәлдә бергәләп ял итәбеҙ. Улдарымдан иҙән йыуҙырмаһам да, бүлмәләрендә саңды һөртә, күлдәктәрен үтекләй алалар.

**▸ Илнур, башҡорт телен яҡшы белһен, үҙ мөхитендә булһын, тип, гимназия-интернатҡа уҡырға бирҙеләр, тигәйнең. Туған телгә һөйөүҙе шулай ҙа кем тәрбиәләй - ғаиләме, әллә һине уратып алған мөхитме?**

**Илнур:** Әлбиттә, ғаилә тәрбиәләй. Бөгөн үҙемдең ғаиләм менән сағыштырғанда, мин яңғыҙ бала булдым, атай менән әсәй күберәк эштә, улар өйҙә һирәк була ине. Ошоно ла уйлағандыр атайым. Балалар, тиҫтерҙәренә эйәреп, "мама", "папа" тип әйтеп ҡаңғырҙылар бер мәл. Бында "мама" ла, "папа" ла юҡ, "әсәй", "атай" ғына бар, тинек. Туған телегеҙҙән оялмағыҙ, тип ҡабатлап торабыҙ. Иң мөһиме, туған телде белһендәр, рус теленә телевизор ҡарағанда ла өйрәнәләр улар.

**▸ Тормош - ул театр, тигән Шекспир. Һеҙ бының менән килешәһегеҙме?**

**Илнур:** Һис һүҙһеҙ, театр, хатта театрҙың үҙенә ҡарағанда ла камилыраҡ театр. Телевизор ҡабыҙып ҡына ҡарағыҙ, донъяла барған ваҡиғаларға ҡарап, көлөп тик кенә ултырырлыҡ. Кешеләр әллә нәмәләр уйлап сығарып, әллә нимә эшләп маташа бөгөнгө көндә. Һуғыш ҡына булып ҡуймаһын, тип хәүефләнәм, Алла һаҡлаһын. Битлектәр аҫтында кешенең ысын йөҙөн күреүе ауыр. Ошондай заманда балаларҙы нисек тәрбиәләргә, тигән һорауҙы ла үҙеңә йышыраҡ бирәһең, уларҙы башҡалар кеүек ялағайланырға, алдашырға өйрәтеп булмай бит. Ошондай саҡта беҙгә быуаттар буйына камиллашҡан халыҡ аҡылы, халыҡ педагогикаһы һәм, әлбиттә, Ҡөрьән ярҙамға килә. Алдашма, ғәйбәт һөйләмә, кешегә насарлыҡ теләмә, үпкәләмә, һ.б. тип өйрәтә дин. Шуға ла, ниндәй тәрбиә ысулы һайларға тип артыҡ баш ватырға ла кәрәкмәй беҙгә, тип уйлайым, ҡушылғанын - үтәп, тыйылғанынан тыйылыу ҙа етә. Ошоларға өҫтәп, малайҙар спорт менән шөғөлләнергә тейеш, сөнки сәләмәт тәндә генә сәләмәт рух була.

**Мәҙинә:** Балаларҙан үҙе уйлағанын әйтеүҙе, башҡаларҙы рәнйетмәй, ҡысҡырмай ғына үҙ фекерен белдереүҙе талап итәм. Беҙҙең балалар тәртипле. Кемгә оҡшап тәртипһеҙ булһындар инде? Иң ҡыҙығы, һәр береһе менән тәрбиәнең билдәле бер этабын үтәбеҙ, үҙебеҙ ҙә тәрбиәләнәбеҙ. Тәүге бала булғас, уны идеаль итеп күрергә, дөрөҫөрәге, идеаль итеп тәрбиәләргә тырышҡанбыҙмы икән - Ильяс бигерәк дөрөҫлөк ярата. Кешене йәлләй, рәнйетергә тырышмай, үҙе башлап бер ҡасан да низағҡа ла инмәй, әммә әйтһә, нығ ҡына әйтә. Илһам, киреһенсә, нығ ҡыйыу, кәпәстәрен сисеп ташлап, үҙен күрһәткеһе килә. Уны бер аҙ тыйып торабыҙ. Малайҙарҙы аталары холҡона, стиленә ҡарап, үҙе кейендерә, гел генә йөрөй торған махсус магазиндары бар. Бергәләп кафеға йөрөйҙәр, кино ҡарайҙар, йәғни, ир-егеттәр үҙҙәре генә "егеттәрсә" ял итеп йөрөп ҡайталар. Бер юлы һөйләшеп, серләшәләрҙер ҙә инде.

**Илнур:** Һәр хәлдә, беҙҙең балалар беҙҙе ихтирам итә һәм беҙгә ышана, тип әйтеп булалыр, моғайын. Үҫмерлек осорона ла инерҙәр, ғөмүмән, ата менән бала темаһы ул мәңгелек, беҙҙе лә был урап үтмәҫ. Ә әлегә беҙ яңылышмаҫҡа һәм уларҙың ышанысын, һөйөүен аҡларға тырышабыҙ.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Ғаилә - бала өсөн тәүге мәктәп, ул унда беренсе һабаҡтарын ала, донъяны, кешеләрҙе, милләтен яратырға өйрәнә. Үҙе күреп үҫкәнде киләсәктә үҙенең ғаиләһендә лә ҡабатлаясаҡ ул. Бәхеттән, шатлыҡтан ғына тыҡылған ғаилә - осраҡлы хәл түгел, ә көндәлек тырышлыҡҡа нигеҙләнгән бөйөк ҡаҙаныш икәненә төшөнгәнһегеҙҙер бөгөнгө геройҙарыбыҙ һөйләгәндәрҙе уҡып. Заман башҡорто тип аталырға лайыҡлы Муллабаевтарҙан йәштәр ҙә өлгө алһын ине. Сөнки ғаилә ҡороу - яуаплы аҙым, ул ваҡытығыҙҙы ла, көсөгөҙҙө лә талап итәсәк. Әммә яҡшы ғаилә башлығы, яҡшы ҡатын, яратҡан атай, әсәй булыуҙан да абруйлыраҡ дәрәжә юҡ.**

**Ләйсән НАФИҠОВА әңгәмәләште.**

✓ **Ферма мөдире Тәскирә булмаһа, Бибизада балаларының аслыҡтан үлеүе бер кемде лә борсомаҫ ине. Иренән, Ҡорбандан, күптән хәбәр юҡ, берҙән-бер улы ла һуғышта.**






Өс бала әсәһе Бибизаданы былтыр көҙ хөкөм иттеләр. Ауылдаштары һигеҙ йылға ултыртырҙар, тип уйлағайны ла, уға бер йыл ғына бирҙеләр. Өс балаһын йәлләгәндәрҙер судьялар.

Ырҙын табағында ашлыҡ сортировкалауҙа эшләгән Бибизада сарыҡтарының ҡуныҫына бойҙай тултырған да, бауҙарын бәйләгән. Өйөндә был бойҙайҙы ҡыҙҙырған, ҡул тирмәнендә тарттырған һәм талҡан бешергән. Колхоз ашлығын урлағанын кемдер күргән бит һәм идараға барып ошаҡлаған.

Ауыл советы рәйесе Лоҡманов менән районда саҡырылған милиционер уны бер кис ырҙын ҡапҡаһы төбөндә туҡтата ла сарығын систерә... Ә "йөрәкле" начальниктар балаларын йәлләне - әсәләрен бер йылға ғына ултыртты. Өлкән ҡыҙы, ун дүрт йәштәге Тәғзимә, баҡыр руднигына эшкә барҙы. Забойҙа ун икешәр сәғәт буйы кәйлә менән баҡыр рудаһын соҡоно һәм арбаларға тейәне. Нормаһын үтәһә, ете йөҙ грамм икмәк алды. Һәр йәкшәмбе аҙна эсендә йыйған икмәк киҫәктәрен алып, турыға - кеше ҡурҡытырлыҡ исемле - "кешеүлгән" тигән тау һырты аша энекәштәренә ашыҡты. Олоһо Вәғизгә етенсе йәш, кесеһенә, Айнурға - биш. Сасҡау һыуыҡтарҙа ла, күҙ асҡыһыҙ бурандарҙа ла ҡайтты, сөнки улар ас, уны көтөп ултыралар. Һыуыҡтан да, бурандан да, хатта бүреләрҙән дә ҡурҡмайым, "кешеүлгән" ҡаяһы янынан үткәндә генә шөрләйем, килеп сығыр ҙа икмәкте тартып алыр һымаҡ, тигән...

Мартта, аҡман-тоҡман ҡоторған мәлдә Тәғзимә ҡайтманы. Ниңә ҡайтмағанын апалары ла, бер кем дә белмәй һәм был хаҡта малайҙарға ла бер кем дә әйтмәне. Бригадир Шәрифулла идарала, малайҙар ас ултыра бит, берәй төрлө ярҙам итергә кәрәк ине, тигәс, ауыл советы рәйесе Лоҡманов, бурҙың балаларын ашатырға колхоздың мөмкинлеге юҡ, тип яуапланы. Ферма мөдире Тәскирә булмаһа, Бибизада балаларының аслыҡтан үлеүе бер кемде лә борсомаҫ ине. Иренән, Ҡорбандан, күптән хәбәр юҡ, берҙән-бер улы ла һуғышта. Әгәр ҙә мин Бибизаданың бәхетһеҙ балаларын ас үлемдән ҡотҡара алһам, Аллаһы Тәғәлә шәфҡәтлелек күрһәтер ҙә, дошман пуляһынан иремде лә, улымды ла һаҡлар, бәлки, тип иҫәпләне. Әммә замандың уяу күҙҙәре ферма мөдиренең изгелеген "аңламаны" һәм ошаҡсы быны түрәләргә еткерҙе. Тәскирәне Лоҡманов саҡыртты. Унда барышлай Тәскирә һаман эшен уйлап, фермала берәй төрлө тәртипһеҙлек күрҙеме икән әллә, тип борсолдо. Быға тиклем ул бер ваҡытта ла Лоҡмановтың тәмәке еҫе һеңгән кабинетында булғаны юҡ ине. Кабинетҡа ингәс, тупһанан уҡ ҡарашы менән стеналағы ҙур портретҡа төртөлдө. Шырмылыҡ ҡушаматлы Заһир ағайға оҡшаған кеше уны ҡалын мыйығы аҫтынан миһырбанлы йылмайып ҡаршы алды, тыуған ағайың да бындай ихлас булмаҫ.

- Һинең ауыл буйлап колхоз һөтөн таратыуың тураһында мәғлүмәттәр бар, - тине Лоҡманов ҡәтғи генә. Тәскирәнең күҙ алдары ҡараңғыланды. - Бөгөн бөтә нәмә фронт өсөн, бөтә нәмә Ҡыҙыл армия өсөн икәнен һин бит аңларға тейешһең.

- Аңлайым, бик тә аңлайым, пусть беҙҙең ҡыҙылармеецтар туҡ булһын һәм фашистарҙы еңһен, - тине Тәскирә. Үҙен бер аҙ ҡулға алғайны инде. Ул һөжүмгә күтәрелер алдынан ҡыҙылармеецтарҙың нисек итеп һөт эсеүен күҙ алдына килтерергә тырышты. - Тик балалар уны аңламай бит, улар ас. Ашарға теләй, аслыҡтан шешенә. Улар менән нишләргә?

- Ул һорау миңә түгел, - тип яуапланы Лоҡманов. - Артабан ундай хәл булмаһын.

"Аллаһы Тәғәлә эшенә ҡыҫылырға ауыл Советы рәйесенең хаҡы юҡ", тип уйланы Тәскирә һәм кистәрен ас балаларға шешә менән дермантин сумкала һөт ташыуын дауам итте.

Ҡар баҫыуҙарҙан, тауҙарҙың һөҙәк биттәренән шылып төшөп бөттө, соҡорҙарҙа, уйпатлыҡтарҙа ғына ҡалды. Бейек күтәрелгән ҡояш үткән йылғы ҡамылды киптергәс, ҡатын-ҡыҙ, бала-саға баҫыуҙарға башаҡ йыйырға сыҡты. Һуғышҡа тиклем, һуғыштың тәүге йылдарында был эшкә мәктәп балалары йөрөй торғайны, үткән йыл игенде йыйып бөтөрә алманылар - ямғырҙар башланды. Сентябрҙә лә көн ултырманы, иртә ҡырау төштө. Һөҙөмтәлә башаҡтар ҡар аҫтында ҡышланы.

- Ер кипте, барабыҙ башаҡ йыйырға, - тине Азатҡа Кәримә апай. - Тик бөтә бригада менән барығыҙ, янғыҙығыҙ күп йыя алмаҫ. Күберәк алып ҡайтығыҙ, йыуып киптерермен дә, ҡул тирмәнендә тарттырып, бригада өйрәһе бешерермен. - Кәңәштәрен дә бирҙе. - Ҡаҙ ҡанаты алығыҙ, ҡара һолоноң йәбешкәктәре була, шуны ҡағып һеперегеҙ. Үҙегеҙ менән Хәйбулланы ла әйәртегеҙ. Ялан еленән әҙерәк күңелләнеп ҡайтыр.

Апрелдәге иген баҫыуы малайҙарға хәсрәтле бушлыҡ булып күренде. Ә башаҡ күп ине. Биҙрәләргә йыйҙылар. Хәйбулла тубыкланып йөрөй һәм тапҡан бер башаҡты ауыҙына тыға. Кинйәк уны усында ыуа ла шулай уҡ ауыҙына оҙата. Уларҙан йыраҡ түгел үргә ауылда йәшәгән бер ҡатын да йыя. Бер мәл тау битендә ике һыбайлы күренде. Ҡатын уларҙы шәйләне лә, биҙрәһен ташлап, яҡындағы ҡайынлыҡ араһына инеп китте. Һыбайлылар малайҙарға иғтибар ҙа итмәй, әллә күрһәләр ҙә күрмәмешкә һалыштылармы, яндарынан үтеп китте. Тегеләр байтаҡ алыҫлашҡас, ҡатын йәшеренгән еренән сығып, биҙрәһенә килде.

- Апай, ниңә улай ҡурҡтың? - тип һораны Кинйәк.

-Нисек ҡурҡмайһың? Былар бит Лоҡманов менән Юныс, - тип яуапланы ҡатын. - Үткән йыл башаҡ йыйырға рөхсәт итмәнеләр, ҡыуҙылар.

Әсәһенең һөйләүенән ауыл тормошонан күп нәмәләр белгән Кинйәктән башҡа малайҙар Лоҡманов тураһында ла, Юныс тураһында ла, уларҙың кем икәнен дә белмәй, былтырғы ураҡ ваҡытында ҡойолоп ҡалған башаҡтарҙы ниңә кешеләргә йыйырға ярамағанын да аңламай ине...

Иртәгәһенә Кәримә ҙур ҡаҙанда ҡул тирмәнендә тарттырылған ҡара һоло, шытҡан картуф, башҡа үлән һәм тамырҙарҙан өйрә бешерҙе. Өйрә ҡуйы һурпалы килеп сыҡҡайны һәм уның тәмле еҫе урамға ла таралды. Бригада ҡаҙанына күрше ҡыҙҙарҙы - Фәүзиә менән Санияны ла саҡырҙылар. Икеһенең дә аталары яраланып госпиталдә ята. Санияның атаһы, ярам төҙәлде инде, яңынан хеҙмәт иткән часҡа ебәрәләр, тип яҙҙы. Байтаҡ ваҡыт үтте, башҡа хаты килгәне юҡ... Фәүзиәнең атаһы Өфөнән, төҙәләм, оҙаҡламай өйгә ҡайтам, тип яҙған...

Күп балалы ғаиләләрҙәге һымаҡ, бер ҙур табаҡтан ашанылар. Тик Хәйбуллаға ғына Кәримә айырым һауытҡа һалып бирҙе.

- Һиңә күп бирмәйем. Ас йөрөгәс, ашҡаҙаның бәләкәйләнгән, күп ашаһаң, күңелең уйнар, ҡоҫорһоң. Малайҙар, һеҙ ҙә күп ашамағыҙ, өйрә күп, иртәгә ашарһығыҙ...

Табаҡтың төбөнә төшкәс тә малайҙар менән ҡыҙҙар ашъяулыҡ тирәләй ултыра бирҙе. Был дөйөм туҡланыу уларға һуғыш алды йылдарының рәхәтлектәрен иҫкә төшөрҙө. Ул саҡта аталары өйҙә ине, тары бутҡаһы ла, дөгө лә, башҡа ризыҡ та майлы һәм етерлек ине...

Туҡ ашҡаҙанға Кинйәктең музыка тыңлағыһы килде.

- Рифат, ҡурайыңды уйна әле, тик аҡһаҡтың ҡапҡа төбөндә йырлаған ас йырҙарҙы уйнама, туҡ саҡтағын уйна! - тине.

Рифат уйнай башланы. Әсәһенең йырҙарынан берҙе, икене. Балалар тын ҡалды ла иғтибарлап тыңланы. Ҡурай тауышы ҡайғы-хәсрәт тураһында ғына түгел, шулай уҡ балаларға, бөтөрөнмәгеҙ, түҙегеҙ, ауырлыҡтар оҙаҡламай бөтә, яҡшы ваҡыттар, бәхетле тормош килә, тип һөйләй ине...

- Рифат, давай, күңеллеһен, - тине Кинйәк.

Рифат бейеү көйөн башланы, Кинйәк яңы таҡмағын әйтте:

Военная форма,
Два колоска норма,
С голоду не помрешь,
И фашистов победишь.

Кәримә апай Рифатты маҡтаны.

- Ҡалай маладисһың. Атайың ҡайтһа, шатланып туймаҫ инде.

Иртәгәһенә иртәнсәк ҡалған өйрәне ашап, бригада йәнә башаҡ йыйырға китте. Был юлы Мышатыр битендә йыйҙылар. Осланған таяҡ менән малайҙар ҡар аҫтында ҡышлаған һарына тамырҙарын ҡаҙып сығарҙы. Кинйәк, Мөбәрәк, Рифат балта тотоп, яҡындағы ҡайын сауҡалығына китте лә ағастарҙың олонона тишек яһап, ҡайын һуты сығарҙы, уны һалам аша эстеләр. Бер тишеккә Кинйәк шешә бәйләне - әсәһенә һыу йыйҙы.

Бер көн иртәнсәк Рифат урынынан торғоһо килмәй генә ятҡанда өйөнә Тәслимә килеп керҙе:

- Һаман йоҡлайһыңмы? Йәй көнө бригадир эшкә әйтергә килгәндә лә шулай йоҡлап ятырһыңмы? - тип һөйләнде һәм өҫтәлгә шешә ултыртты. - Бына, һөт алып килдем. Һөт һинең һыйырыңдыҡы түгел, һинеке ҡыҫыр, ә беҙҙеке. Мартта быҙауланы. Һалам ғына ашатабыҙ, һөт аҙ, быҙауы имә. Ниңә килмәйһең? Әсәйем үпкәләй. Әллә беҙ һиңә яттармы? Әсәйем ҡайтһын, беҙҙә йәшәһен, ти. Өләсәйем дә, ниңә Миңзифа менән Рифат күренмәйҙәр ул, ти.

Рифат апаһын өндәшмәй генә тыңланы һәм үҙенең уларҙа ҡыҫҡа ғына йәшәү осорон, өләсәһенең һүҙҙәрен иҫенә төшөрөп:

- Етемдәрҙе яратмайҙар... - тип яуапланы.

Бибизада балалары ҡышты сыға алды. Апалары менән нимә булған, рудниктан ниңә ҡайтмаған икәнен дә белмәҫтән, көн торошона ҡарамай, малайҙар уны йәкшәмбе һайын барыбер көттө. Уларҙы ас үлемдән колхоз фермаһынан Тәслимә йәшереп сығарған һөт ҡотҡарҙы.

Көндәр бер сама йылыңғас, ер һәм юлдар кипкәс, малайҙарҙың олоһо, Вәзих, Тәғзимә әйтеүенсә, Аршала ағас ҡырҡҡан әсәһе янына барырға ниәтләнде. Апаһы төрмәнең ҡайҙа икәнен аңлатты. "Ауылдың теге яғында, ҡояш сыҡҡан яҡта - рудник. Мин шунда баҡыр рудаһы соҡойом, баракта йәшәйем, ә ҡояш байыған яҡта, ылыҫлы урманда - Арша. Әсәйем шунда ағас йыға, төрмәлә йәшәй". "Ул беҙҙән йыраҡмы?" тигән һорауға Тәғзимә "Йыраҡ түгел", тип, көнбайышҡа һуҙылған тау һыртын күрһәтте. "Тауҙарҙы күрәһеңме, ҡаяларҙы күрәһеңме? Әсәйем менән беҙ шунда көртмәлегә бара торғайныҡ. Тауҙың түбәһенә менеп етәһең дә теге яҡҡа төшәһең. Арша шунда".

Малайҙың аңында ошондай күренеш баҫа: бына улар көртмәле йыйған тауға менә лә теге яҡҡа төшә һәм әсәләрен таба. Бер көндө иртүк Вәзих энеһен төрткөләп уятты:

- Тор, әсәйемә барайыҡ.

- Асыҡтым, ашағым килә.

- Әсәйемә барайыҡ, ул икмәк бирер. Тағы һейеп яттыңмы? Тор!

Көн йылыныуы менән улар икеһе лә яланаяҡ йөрөнө. Аяҡтары себешләп ярылды, ҡанһырап торҙо. Ә ҡышын Вәзих атаһынан ҡалған оло ботинкаларҙа йөрөнө, бәләкәйе ҡарға үтә һирәк сыҡһа ла, әсәһенең сарыҡтарын кейҙе. "Әсәйгә ялан аяҡ барырға кәрәк, сөнки ялан аяҡ шәберәк йүгерәһең", тип уйланы Вәзих, атаһының иҫке пинжәген кейеп алды. Айнурҙың өҫтөндә йоҡа күлдәк тә һейҙек менән аңҡып бөткән ыштан ине.

Ике малайҙың ауыл буйлап үткәнен һәм тау яғына илткән юлға төшөүен бер кем дә күрмәне, йәки иғтибарға алманы. Иртәнсәк ҡояшлы ине, тауҙар теҙмәһе лә эргәлә кеүек кенә: йүгереп кенә бараһың да етәһең. Ашағылары килде. Тәскирә апай алып ингән кисәге бер нисә йотом һөттән башҡа эстәренә бер нәмә лә инмәгәйне. Вәзих юлдан ситкә сығып, үлән, ҡыуаҡлыҡтар араһынан ашарға яраҡлы берәй нәмә эҙләне, әммә үткән йылғы һоро үләндән һәм серегән япраҡтарҙан башҡа ашарлыҡ бер үлән дә үҫмәгәйне әле.

**Әмир ӘМИНЕВ тәржемәһе.**

**(Дауамы. Башы 1-3-сө һандарҙа).**

✓ *Башҡорттарыбыҙ бөгөнгө көндән бик күп йылдар элек, әйтәйек, 30-40 мең йыл әүәл, ошонда, Урал армыттарында халыҡ булып йәшәгән һәм бөгөнгө көндә лә ул ошонда йәшәй. Уның киләсәк быуындары, балалары ла ошонда уҡ йәшәйәсәк.*



ЯҘЫУСЫҒА ӨС ҺОРАУ

# ҺӘР ЕРҘӘ ЛӘ ТАРИХ ЭҘЛӘЙЕМ...

**Өс һорау был юлы яҙыусы, Башҡортостан Республикаһының Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты Ғәлим Афзал улы ХИСАМОВҡа төбәлә.**



**➔ Ғәлим Афзал улы, һеҙҙең тарихи проза әҫәрҙәрегеҙ байтаҡ ҡына. Был жанрҙа һеҙ ниндәй ҡағиҙәләргә таянып эшләйһегеҙ? Ғөмүмән, әҙәбиәттә тарихты сағылдырыуҙың төп ҡанундары бармы?**

- Бик ҙур һәм үтә лә үҙенсәлекле һорауҙарҙың береһе ул әҙәбиәттә тарих мәсьәләһе. Һәр халыҡтың үҙ тарихы бар һәм ул тарих әҙәбиәттә үҙенә генә хас һыҙаттарҙа сағылыш таба. Әҙәбиәттә һүрәтләнгән тарихтың теге йәки был һорауға яуабы ла үҙенсәлекле була. Яңыраҡ Өфөлә, "Евразия" сәйәхәтнамәһе сиктәрендә, беҙҙең туғандаш халҡыбыҙ - сахалар театрының бер нисә пьесаһы сәхнәләштерелде. Шуларҙың береһен, "Һундар повесы"н, саха авторы боронғо һундарҙың тормошо нигеҙендә яҙып сәхнәләштергән. Был әҫәрҙә бик боронғо, йыллап барлаһаң, яңы дәүергә, яңы эраға тиклем 5 мең йыллап элек булыуы ихтимал ваҡиғалар сағылдырылған. Был әҫәргә тотоноп, яҙыусы ла, режиссер ҙа, берҙән, үҙҙәренә бик ҙур яуаплылыҡ алған, икенсенән, халҡының тарихи тамырҙарын сағылдырыуға өлгәшкән. Ошондай тарихи әҫәрҙәр, ғөмүмән, тарихты әҙәбиәттә, сәхнәлә, кинофильмдарҙа сағылдырыу үҙенең халҡындың үткәнен бар ысынбарлығында, бөйөклөгөндә күрһәтергә ынтылыу ниәтенән сығып яҙылырға тейеш. Тарихты былай ғына, "шулай булған, былай булған" тип әйтеп еткереү - ул әле тарих тураһында әҫәр яҙыу тип һаналмай. Тарихтың төп нигеҙендә мәғәнә ята. Тарихи әҫәрҙәр яҙыуҙың һәм яҙырға ынтылыштың ҡиммәте - ана шул мәғәнәне күрһәтә алыуҙа.

Мин үҙемдең яҙыусылыҡ дәүеремдә бер нисә тарихи әҫәр яҙып ҡараным. Килеп сыҡҡанмы, юҡмы - уныһын инде уҡыусы ғына хөкөм итә ала. Тарихи әҫәрҙәрҙе ҡағыҙға төшөрә башлағандан алып үҙем өсөн бер концепция барлыҡҡа килтерҙем. Ул бик ябай ғына. Башҡорттарыбыҙ бөгөнгө көндән бик күп йылдар элек, әйтәйек, 30-40 мең йыл әүәл, ошонда, Урал армыттарында халыҡ булып йәшәгән һәм бөгөнгө көндә лә ул ошонда йәшәй. Уның киләсәк быуындары, балалары ла ошонда уҡ йәшәйәсәк. Бына шул концепция нигеҙендә мин халҡыбыҙҙың бер-ике көнөн, бер нисә йылын, быуатын, дәүерен ҡағыҙҙа күрһәтергә тырышам. Мәҫәлән, "Өн һәм һан" романымда мин бик оҙайлы тарихҡа мөрәжәғәт иттем. Романға 10 меңләп йыл әүәл булыуы ихтимал тарихтан башлап, бөгөнгө көнгә тиклем булыуы ихтимал хәлдәрҙе индерҙем. Бына ул минең өсөн тарих...

"Ағиҙел" журналында яңы романым баҫыла башланы. Ул роман Башҡортостан менән Рус дәүләтенең ҡушылыу осорон сағылдыра. Һүҙ барған дәүер бик оҙайлы түгел - йәмғеһе 20-30 йыллыҡ ваҡыт арауығын ғына үҙ эсенә ала. Әле яҙып йөрөгән яңы әҫәремдең башына "Башҡортостан Республикаһының 100 йыллығына бағышлайым" тип яҙып ҡуйҙым. Унда Башҡортостан Республикаһының барлыҡҡа килеүенән алып, Рәсәй менән килешеү төҙөү дәүеренә тиклем барған ваҡиғалар һүрәтләнәсәк. Ул да оҙайлы дәүерҙе үҙ эсенә алмай - 1917, 1918, 1919 йылдарға ғына бағышлана. Ошо ваҡыт эсендәге ваҡиғалар, геройҙар аша мин уҡыусыға халҡыбыҙҙың кем икәнлеген тоҫмалларға ярҙам итергә теләйем. Әлбиттә, был художестволы әҫәрҙәге ваҡиғаларҙың тарихи фактарға тап килеп бөтмәүе лә ихтимал, ләкин улар документтарға таянып эшләнгән. Документтарға таяныу тормошсанлыҡты көсәйтә, ысынбарлыҡты күрһәтергә ярҙам итә. Тарихты өҫтән-мөҫтән генә белеп, матур һүҙҙәргә төрөп әҫәр яҙыу менән генә тарихи әҫәр тыумайҙыр. Тап ана шул документ нигеҙенә таянып яҙыуҙан ғына тарих тыуа.

Һәр хәлдә, тарихты һәр кем үҙенсә аңлай һәм үҙенсә сағылдыра. Кем нисек булдыра бит, тигәндәй. Ләкин тарихи әҫәр яҙған һәр яҙыусының ниәте изге була, уныһына иманым камил. Ә инде оҫталыҡ, эш ысулдары - икенсе мәсьәлә...

Тарихи фактарҙы, тарихты туктауһыҙ өйрәнеү, уны бөгөнгө менән сағыштырып ҡарау тарих менән шөғөлләнгән, тарихты өйрәнгән кешенең көндәлек эшенә әүерелә икән. Шуның кеүек, мин һәр ерҙә лә тарих эҙләйем. Йәғни, халыҡты, уның вәкилдәрен һәм уның тарихи эҙен күңелемә йыя йөрөйөм. Тулып ята, һәр ваҡыт беҙҙең янда ул хазиналар.

**➔ Мөхәббәт мотивы, уҡыусыны ылыҡтырғыс саралар ҙың береһе булараҡ, һәр әҫәрҙә лә мотлаҡ урын алырға тейешме?**

- Мөхәббәт - ғәрәп һүҙе. Беҙҙең телдә - һөйөү. "Ҡөрьән"дә Аллаһы Тәғәлә исеменән: "Мин Әҙәмде балсыҡтан (тупраҡтан) яралттым. Әҙәм минең янымда оҙаҡ йәшәне. Ул бик тәртипле, тыңлаусан, шул уҡ ваҡытта, моңһоу ғүмер итте. Күп быуаттар шулай ғүмер кисергәндән һуң, мин: "Был бигерәк моңһоу йөрөй, уға берәй иптәш бирәйем", тип, Мәрйәм ананы яһаным", - тигән һүҙҙәр килтерелә. Ер йөҙөндә ир менән ҡатындың барлыҡҡа килеүе ошо рәүешле аңлатыла. Уларҙың яҡынлашып китеүе тураһында "Евангелие"лә: "Мәрйәм ана (мосолмандарҙа ул Һауа тип тә, Мәрйәм ана тип тә атала) Әҙәмгә алма бүләк итеп, Әҙәмдең күңелен йомшарта һәм уларҙың яҡынлығы барлыҡҡа килә", - тиелә. Беҙҙең халыҡта яҡынлыҡты аңлатҡан махсус һүҙ бар. Ул һүҙҙе барыһы ла белгәнгә күрә, бында әйтеп тороуҙың кәрәге юҡтыр.

Боронғо китаптарҙа, диндәрҙә, фәндәрҙә мөхәббәтте ике енес кешеһенең бер-береһенә ҡарата барлыҡҡа килгән тойғоһо, тип аңлатыу бар. Кешеләрҙә була торған бөйөк хистәрҙең береһе - мөхәббәт. Иң тәүҙә ул баланың күңелендә тыуа. Күкрәк һөтөн имә башлау менән әсәһенә ҡарата барлыҡҡа килә был хис. Әсәнең балаға һөйөүе иһә баланы ҡарынында йөрөткән ваҡытта уҡ уяна. Ғалимдар ошо тойғоно мөхәббәт тип атай. Ләкин һуңғы 15-20 йыл эсендә мөхәббәтте ир менән ҡатын араһындағы мөнәсәбәткә генә әйләндереп ҡалдырҙылар. Был дөрөҫлөккә тап килеп етмәй, минеңсә. Мөхәббәт ул - ҙур тойғо. Ғөмүмән, кешенең кешегә мөнәсәбәтен сағылдырған тойғо ул - мөхәббәт.

Хис хәрәкәтте тыуҙыра. Әгәр ҙә хис менән хәрәкәт бер-береһенә тап килә икән, шул ваҡытта тормош та матур була. Әгәр хәрәкәт менән хис тап килмәйенсә, айырым була ҡалһа - тормоштоң бәрәкәте лә, таты ла булмай. Минең аңлауымса, бына шул ул мөхәббәт. Һөйөүҙе һәр кем үҙенсә кисерә, үҙенсә белдерә. Шағирҙар, әйтәйек, был тойғоно шиғыр аша аңлата: мөхәббәт тураһында шул тиклем күп шиғыр яҙып, мөхәббәт ваҡланып бөтмәйме икән ул, тигән уй ҙа килә башҡа. Мин үҙем шиғыр яҙып ҡарамағас, белмәйем. Ләкин мин үҙемдең әҫәрҙәрҙә лә ул темаға бик уҡ ҡағылмаҫҡа тырышам. Сөнки мөхәббәт тураһында әҫәр яҙыр өсөн мөхәббәт өлкәһе белгесе булырға кәрәктер, тип һанайым. Ул кисереште бит ҡағыҙға һала белергә лә кәрәк. Шул саҡта ғына мөхәббәт тураһында яҙып була. Ә был көйөнсә генә, "мөхәббәт" тип әйтеүҙән генә, хис барлыҡҡа килә тигән һүҙ түгел.

**➔ Шағирҙың, яҙыусының Ғәләм, Күк менән сихри бәйләнеше бар, тигән юрауҙар ҙа ишеткән бар. Һорау нисек кенә сәйер яңғырамаһын, кемгәләр ҡыҙыҡ булыуы бар: Һеҙ үҙегеҙҙә ундай бәйләнеште тойғанығыҙ булдымы?**

- Күктәр менән бәйләнеш һәр кемдә бар ул. Уны беҙ бик үк тойоп ҡына бөтөрмәйбеҙ шикелле. Тойоу, ул турала уйлау ғына аҙ. Әлеге бәйләнештең яуапхәрәкәте лә булырға тейеш. Әгәр һин бөйөк Көстән, бөйөк Ҡөҙрәттән ниндәйҙер этәргес алаһың икән, уға лайыҡлы яуап бирергә лә кәрәк. Бына ошо йәһәттән был бәйләнеш кемдәргәләр күберәк, кемдәргәләр аҙыраҡ бирелә торғандыр...

Аллаһы Тәғәлә һәр кешегә ҡарата иғтибарлы. Ни өсөн? Элегерәк, әлеге компьютер техникаһы уйлап сығарылмаған ваҡытта: "Ер йөҙөндә бер нисә миллиард кеше бар. Аллаһы Тәғәлә һәр береһен нисек ҡарап өлгөрә икән?" - тип уйланыла торғайны. Ә хәҙерге электроника, интернет селтәренән миллиард халыҡты, мәғлүмәтте байҡап сығыу бер ни ҙә тормай икәнен күрәбеҙ. Шулай булғас, ысынлап та, Юғары көстөң, Илаһтың һәр кемде ҡайғыртыу мөмкинлеге ышандыра. Ошо йәһәттән ҡарағанда, кешенең Юғары көстәр менән бәйләнеше булыуы ла бик ихтимал. Ләкин ҡайһы берәүҙәрҙең: "Минә шундай хәбәр килде бит әле", - тип әйтеүе, яу һалыуы ышандырып етмәй. Әгәр ҙә ысынлап та шундай хәбәр ала икән, шундай этәргес була икән, уны кеше һаҡлап ҡына тоторға тейеш. Ысынлап та шулай булдымы әле, юҡмы әле, тип шикләнергә лә тейеш. Шикләнмәй икән, ул булмағанды раҫлау тип аңлатыла, йәғни, алдау булып килеп сыға. Мин үҙем ошо йәһәттән ҡайһы бер фекерҙәрҙең үҙемә ҡапыл килгәнен беләм. Мин уны кемдеңдер әйтеүе, этәргесе тип раҫлай алмайым. Ул, бәлки, шулайҙар ҙа, әммә, белмәгәс, нисек раҫлайым? Бер миҫал килтерәм мин һеҙгә. Бер ваҡыт минә "Мосолман донъяһындағы мәсеттәр, мәҙрәсәләр һәм башҡа изге урындар тураһында бөтә донъя энциклопедияһы төҙөргә кәрәк", тигән уй килде. Ошондай фекерҙәр йыш ҡына минә таң алдынан килә. Бәлки уны, ысынлап та, Ҡөҙрәт ебәргәндер, бәлки, Аллаһы Тәғәлә этәргәндер. "Һин шуны эшлә әле, бөтән нәмә менән әүрәп йөрөмә", - тип әйткәндер. Шуға күрә, әгәр ҙә кемдер: "Тарихи әҫәрҙәр яҙған ваҡытта тарихы уға кемдер шыбырлап тора", тип әйтә икән, бәлки, алдамайҙыр ул. Бәлки, дөрөҫтөр. Мин уныһын белмәйем. Ләкин ҡыҙыҡһыныу, тарих менән ҡыҙыҡһыныу, бүтән нәмәләр менән ҡыҙыҡһыныу - уйланып йөрөүҙән килеп сыҡҡан һөҙөмтә тип ҡарарға кәрәк. Ләкин ул фекерҙәр күп ваҡыт башта ҡылт итеп балҡып китә һәм уларҙың тәбиғәте уйландыра...

**Илгиз ИШБУЛАТОВ**
**яҙып алды.**

---

*ҠЫҘЫҠ ТАҺА!*

## АКИНАТОР...
### Урал батырҙы белә!



**Интернет донъяның тағы бер яңылығын астым үҙем өсөн. Ул яңылыҡ та түгелдер инде, бәлки, сөнки донъя кимәлендәге был интернет-уйынды 2007 йылда уҡ француз программистары уйлап сығарған, хәҙер ул донъяның бик күп илдәрендә билдәлелек яулаған.**

Программаның асылы шундай: уйын геройы, йәғни джинн, һеҙ эстән генә уйлаған берәй әҫәр геройының исемен, холоҡ-фиғеле, тышҡы ҡиәфәте, кейеме буйынса төрлө һорауҙарын бирә-бирә, атарға тейеш. Бер яҡтан, был аңлашыла ла, сөнки компьютерҙың һәр һорауынан һуң әҫәр геройҙары һәм персонаждары даирәһе тарая бара һәм, ниһайәт, джинн үҙенең вариантын килтереп сығара. Икенсе яҡтан, донъя әҙәбиәтенең бихисап яҡшы билдәле геройҙары араһында донъя кимәлендә әллә ни танылыу алмаған геройҙар ҙа байтаҡ бит. Ҡыҙым: "Әсәй, әйҙә ошо "маҡтансыҡ" джинды төп башына ултыртабыҙ - үҙебеҙҙең башҡорт әҙәбиәтенән берәй персонаж уйла әле, белер микән?" тигәс, кем хаҡында уйлайым инде - әлбиттә, Урал батырыбыҙҙы, рухиәтебеҙ, йөрәгебеҙ түрендәге иң төп геройыбыҙ исемен уйланым. Уйын башланды һәм акинатор минә үҙенең һорауҙарын бирә башланы. Мин уға "эйе" йә "юҡ" тип кенә торорға тейешмен. Башҡа геройҙарҙы бик тиҙ килтереп сығарһа ла, Урал батырҙы атай алмайынса, байтаҡ ҡына "мыштырланы" был. Инде ҡыҙым уны мыҫҡыллап көлөргә лә йыйынып бөткәйне, шул саҡ экранда "Урал батыр" тигән яуап килеп сыҡмаһынмы! Ҡыҙым менән "ура" ҡысҡырып ебәрҙек хатта - еңелдек, еңелһәк тә ифрат ҡыуаныслы еңелеү ине был. Урал батырыбыҙ исеме виртуаль донъяны ла айҡап йөрөй, тимәк!

Әйткәндәй, был геройҙы һорауҫылар бер беҙ генә булмағанбыҙ икән. Урал батыр хаҡында беҙгә тиклем 264 кеше акинаторҙан әлегеләй "имтихан" алған. Әлбиттә, ниндәй генә белемле булмаһын, джинн беҙгә башҡорт әҙәбиәтенән башҡа геройҙарҙы атай алманы, ләкин быны аңларға була: донъя кимәленә сығырлыҡ әҫәрҙәр ижад итә алмай әле яҙыусыларыбыҙ, ә йәл...

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

✓ *Был классик биҙәүестәребеҙҙе, яһалышына ҡарап, үҙ атамалары менән дөрөҫ итеп яға, һаҡал, селтәр тип атайыҡ. Борон халҡыбыҙ һәр ҡайһыһын үҙ исеме менән атаған бит. Ул саҡта тарих та, зауыҡ та, тел байлығы ла һаҡлана.*



ИНТЕРНЕТТАН



# КИҘЕҮҘӘН...

## алтын биҙәүес

■ Алтын менән борондан дауаланғандар. Алтын һәм уның ҡушылмаларынан яһалған препараттар туберкулез, тирене, периферик нервы системаһын, күҙҙе һәм ҡайһы бер эске ағзаларҙы зарарлаусы проказа сирен, ҡыҙыл сөсө ауырыуын дауалай. Алтын, алтындың көмөш менән аҡ алтын ҡушылмаһынан биҙәүестәр тағыу истерия, депрессия, эпилепсиянан ярҙам итә, тип иҫәпләнә, сөнки кешене тынысландыра, кәйефен яҡшырта. Алтын шешеүгә, микробтарға, бактерияларға ҡаршы ҡулланыла, аллергия булдырмай. Шуға ла киҙеү эпидемияһы ваҡытында алтын биҙәүестәр тағырға кәңәш итәләр. Алтын шулай уҡ ҡан баҫымын түбәнәйтә, матдәләр алышыныуын, ҡан әйләнешен яҡшырта.

■ Ҡышын да туҡланыу рационында һөт ризыҡтары, йәшелсә-емештәр етерлек булырға тейеш, ти белгестәр. Итте аҙнаһына ике тапҡыр ашарға, ҡалған көндәрҙә балыҡ, сыр, ҡуҙаҡлылар, сөтләүектәр, йомортҡа, эремсек ҡулланырға. Ризыҡ ныҡ эҫе булмаһын, был ваҡытта организм уны һыуытыу өсөн артыҡ энергия сарыф итә. Һалҡын миҙгелдә һыу эсеүҙе кәрәкле тип тапмай күптәр. Диетологтар быны хата ҡараш булыуын белдерә, һалҡын һауа шулай уҡ тирене киптерә, бындай күңелһеҙлеккә тарымаҫ өсөн һыу эсергә кәрәк. Ҡышын кеше тирләп бармаһа ла, тышта тын алғанда һыу күпләп быуға әйләнә. Ҡәһүәгә ҡарағанда үлән сәйҙәре, морс, компот яҡшыраҡ. Йоҡлар алдынан сәй эсергә була. Емеш-еләктәргә килгәндә, бананға ҡарағанда әфлисун, мандарин файҙалыраҡ, уларҙа С витамины бар.

■ Британия ғалимдары билдәләүенсә, артыҡ таҙалыҡҡа ынтылыу иммунитет түбәнәйеүенең һәм аллергия барлыҡҡа килеүенең бер сәбәбе булып тора. Был фекер 1989 йылда уҡ Лондондың Изге Георгий госпитале эпидемиологы Стрэхан тарафынан әйтелә. Профессор таҙа һыу ҙа булмаған төбәктәрҙә йәшәгән балаларҙың ауырыуҙарға бирешмәүен, ә йәшәү шарттары яҡшы булғандарҙың аллергиянан яфаланыуын күрә. Күп балалы ғаиләләрҙә лә балалар ауырып бармай. 2014 йылда үткәрелгән тикшереүҙәр күрһәтеүенсә, бәләкәй сағынан уҡ тәбиғәткә сығып, тупраҡ-таш менән уйнаған бала аллергия һәм астма менән һирәгерәк ауырый. Хатта аш бүлмәләрендә тараҡан, сысҡандар, фатирҙарында йорт хайуандары булған балаларҙың сәләмәтлеге стериль торлаҡта көн итеүселәргә ҡарағанда нығыраҡ булып сыҡҡан.

■ Киҙеүҙән, һалҡын тейҙереп ауырыуҙан ҡурҡһағыҙ, иртәрәк йоҡларға ятығыҙ, ти Британия ғалимдары. Улар 22 меңдән ашыу кешене тикшереп, йоҡо туймай йөрөгән саҡта һалҡын тейҙереү мөмкинлеге лә артыуын асыҡлаған. Тәүлегенә 5 сәғәт кенә йоҡлаусылар юғары хәүеф төркөмөндә. Уларҙың иммунитеты инфекцияларға ҡаршы насар көрәшә. Был төркөмдәгеләрҙә тамаҡ-тын юлдары инфекциялары сирҙәре 50 процентҡа күберәк осрай. Етмәһә уларға ҡабаттан ауырыу эләктереү хәүефе лә янай. Бындай күңелһеҙлек булмаһын өсөн ете сәғәт йоҡларға кәрәк. Иммунитетты нығытыуҙа йоҡоноң өлөшө ифрат ҙур.

ЙОЛА ТОТҠАН ЯҘЛЫҠМАҪ

**Һуңғы йылдарҙа республикала башлыса ағинәйҙәр тырышлығы менән халҡыбыҙҙың милли кейемдәрен, нәфис биҙәүестәрен тергеҙеү өҫтөндә байтаҡ эш алып барыла. Беҙҙең башҡорт ҡатын-ҡыҙҙары араһында башҡаларҙы хайран итеп, зауыҡлы биҙәүестәр тағып, милли күлдәктәр кейеп йөрөү ғәҙәткә инә. Үҙе бер илаһи күренеш ул яға, селтәр, түшелдеректәрен тағып, аллы-гөллө күлдәктәрен кейеп, эшлекле ҡорҙарға йыйылған ағинәйҙәр. Әлбиттә, ҡайһы берәүҙәр уйлауынса, уйын-йыр өсөн генә йыйылмай улар. Ниндәйҙер мөһим проблеманы хәл итер, йәштәргә йолаларыбыҙҙы өйрәтер өсөн, йә булмаһа, милли кейем өлгөләре, биҙәүестәр эшләү, ниндәйҙер милли аш-һыу әҙерләү буйынса оҫталыҡ серҙәре менән бүлешергә, экологик өмәләр үткәрергә йыйыла улар һәм ошондай матур саралар менән рухлы киләсәк быуын тәрбиәләүҙе бурыс итеп алған ағинәйҙәребеҙ.**

# ҮҘЕБЕҘСӘ КЕЙЕНӘЙЕК ҺӘМ...

## кейемдәрҙең атамаһын дөрөҫләп әйтәйек



Ошо көндәрҙә Учалы ағинәйҙәре БДУ-ның Учалы вәкиллеге менән берлектә район ҡатын-ҡыҙҙарын ижад йортона яға (башҡа төбәктәрҙә селтәр, һаҡал, түшелдерек, алмиҙеү һ.б. тиҙәр) эшләү буйынса оҫталыҡ дәресенә йыйҙы. Сараның тәүге өлөшөндә БДУ-ның Учалы вәкиллеге уҡытыусыһы Ғарипов Азат Салауат улы үҙебеҙҙең төбәккә хас яғалар өлгөләрен экранда күрһәтеп, бик төплө мәғлүмәт бирҙе. Районның күбәләк, тиләү, табын ырыуҙарына ҡараған Оҙонгүл, Рафиҡ, Яңы Байрамғол, Наурыз, Мәҫкәү, Һәйтәк, Ишмәкәй, Аҡкужа, Юлдаш ауылдарында һаҡланып ҡалған был бай биҙәүестәр өлгөләре берсә һоҡландырҙы, берсә уйландырҙы. Берҙән, башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының был нәфис биҙәнеү әйберҙәре ни тиклем бай, етеш тормоштоң сағылышы булһа, икенсенән, юғары зауыҡ, юғары оҫталыҡ өлгөһө булараҡ та һоҡландырҙы. Беҙҙең төбәккә хас был биҙәүестәрҙең 2 сантиметр тирәһе яҫылығында муйынға тағыла торған өлөшө, яғаһы бар. Ул арттан йә ҡаптырмаға, йә төймәгә эленгән булған. Оҙонлоғо - 40-42 сантиметр, киңлеге өҫкө өлөшө - 23-25 сантиметр, аҫҡы өлөшө - 34 сантиметр булып, урта өлөшөндә 11-13 рәт тәңкәләр теҙелгән. Ғәҙәттә, эре тәңкәләр иң һуңғы рәттә була. Тәңкәләрҙән аҫтағы тәҙрә тип аталған өлөшө мәрйендән яһалған селтәрҙән тора. Был өлөш бик үк ҙур түгел. Көмөш тәңкәләр, мәрйен, аҡыҡ таштар ҡыҙыл төҫтәге туҡыма менән ҡапланған тулаға, йә драпҡа тегелә. Ауырлыҡтары 3-4 килоға еткән яға муйындан ғына түгел, бил тәңгәленән дә бәйләнеп ҡуйылған. Силәбе, Ҡорған өлкәһе башҡорттары ла был биҙәүесте яға тип атай икән. Бына ошондай бай мәғлүмәт алған ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙ Азат Салауат улына рәхмәт әйтеп, артабан мәрйен, тәңкәләрҙе дөрөҫ тегергә, туҡыманы дөрөҫ киҫергә лә өйрәнде. Был эштә уларға ағинәйҙәребеҙ Байморатова Таңһылыу менән Ишбирҙина Зөбәйҙә ярҙам итте. Оҫталыҡ дәрестәре артабан башҡа ауылдарҙа ла үткәреләсәк.

Был сараны ойоштороуҙың үҙ сәбәптәре лә бар. Беренсенән, Учалы телевидениеһы районның ағинәйҙәре, БДУ менән берлектә үҙенең 25 йыллыҡ юбилейы айҡанлы "Яға" конкурсы иғлан итһә, икенсенән, ундай конкурс республикала ла үткәреләсәк. Былтыр көҙөн Башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының "Ағинәй" республика йәмәғәт ойошмаһы һәм Республика халыҡ ижады үҙәге тарафынан үткәрелгән "Селтәр" конкурсында ла беҙ дәррәү ҡатнашҡайныҡ. Конкурстан ыңғай тәьҫораттар алдыҡ, әлбиттә, тик күңелдә бер көҙөк ҡалды: башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының ошо биҙәүестәренең төрлө ырыуҙа төрлөсә аталып йөрөтөлөүе, хатта тамғалары, эшләнеше лә төрлөрәк булыуы конкурсты ойоштороусылар тарафынан бик иҫәпкә алынманы. Мәҫәлән, беҙҙе, учалыларҙы, бигерәк тә был биҙәүестең "яға" тигән төрөн иҫәпкә алмауҙары борсолдорҙо. Фекеремде раҫлар өсөн тағы ла Сергей Руденконың "Башҡорттар" исемле китабын ҡулға алам. Унда ла, мәрйен-көмөш тәңкәләр, аҡыҡ менән биҙәлгән был биҙәүестәрҙең муйындан алып билдән аҫҡа тиклем төшөп торғандары яға, һаҡал, селтәр тип йөрөтөлгән, тип билдәләнгән. Башҡа атамаһы юҡ. Әммә һәр береһенең үҙенә генә хас үҙенсәлеге лә булған. Руденко хеҙмәтендәге яғаның һүрәтләнеше беҙҙең яҡтағыһы менән тап килә. Һаҡал тип аталғанында иһә мәрйендән эшләнгән селтәр өлөшө юҡ. "Киске Өфө" гәзитенең быйылғы беренсе һанындағы һүрәттә лә ҡыҙ баланың түшендәге биҙәүесте Руденко буйынса "һаҡал" тип атарға мөмкин булыр ине. Ә "селтәр" тигәненең күпселек өлөшө мәрйендән эшләнгән селтәрҙән тора. Өҫкө өлөш менән селтәр араһына бер нисә (1-3 булыуы мөмкин) рәт көмөш тәңкәләр теҙелә. Ул муйынға тар таҫма менән бәйләп ҡуйыла, сөнки сағыштырмаса еңелерәк була. Бөгөн ошо атамалар менән бергә түшелдерек, күкрәксә тип йөрөтөлгәндәре мәрйен, көмөш тәңкәләр менән биҙәлмәгән. Улар 30х40 сантиметр ҙурлығында булып, туҡыманан ҡорап эшләнгән, йә төҫлө ептәр менән матурлап сигелгән. Ғәҙәттә, уларын йәш ҡатындар, еткән ҡыҙҙар йөрөткән. Бындай күкрәксәләрҙе еңгәләр бикәстәренә бүләк иткән, тип тә хәтерләй беҙҙең яҡ ағинәйҙәре.

Фекеремде йомғаҡлап, шуны әйткем килә. Беҙҙең бар ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙ ҙа мәрйен-тәңкәләр менән биҙәлгән матур биҙәүестәр тағып йөрөүҙе модаға индереп ебәрһен, әйҙә. Тик был классик биҙәүестәребеҙҙе, яһалышына ҡарап, үҙ атамалары менән дөрөҫ итеп яға, һаҡал, селтәр тип атайыҡ. Борон халҡыбыҙ бер ҙә иренмәгән, һәр ҡайһыһын үҙ исеме менән атаған бит. Ул саҡта тарих та, зауыҡ та, тел байлығы ла һаҡлана.

**Мәрзиә СОЛТАНБАЕВА,**
**Учалы районы**
**"Ағинәй" ойошмаһы**
**етәксеһе.**

✓ *Кешеләр һөйләшергә теләгән теманың иң һуңғыһы - һеҙ. Уларҙың беҙҙең ауырыуҙарыбыҙ, проблемаларыбыҙ, тормошҡа кире ҡарашыбыҙ тураһында һөйләшкеһе килмәй.*



СӘЛӘМӘТЛЕК ӘЛИФБАҺЫ

# БАШ ӨЙӘНӘГЕ



**"Баш өйәнәге! Бына ул - күҙ алдында. Сикәләге тамырҙы тарта. Иртән уянаһың - ауыртыу сикәнән өҫкә, баш түбәһенә шыуыша, яртыбашыңды сүкеп тора һәм көн буйына кофеинлы пирамидон йотоп торорға мәжбүрһең", - тип яҙған яҙыусы һәм табип Михаил Булгаков үҙенең "Морфий" әҫәрендә. Ысынлап та, һау-сәләмәт сағыңда ғына бер нәмәгә иҫең китмәй йөрөйһөң, ә инде саҡ ҡына берәй ерең ауырта башлаһа - донъя түңкәрелгәнме ни! Бигерәк тә баш өйәнәге башланһа, башыңды ҡайҙа алып барып тығырға белмәйһеңдер, моғайын. Бөгөн ошо сир хаҡында Республика медицина профилактикаһы табибы Гөлнур НИҒМАНОВА менән һөйләшәбеҙ.**

➔ **Баш өйәнәге - ул ниндәй сир һәм нилектән барлыҡҡа килә?**

- Мигрень менән бик күп билдәле шәхестәр - Зигмунд Фрейд, Фредерик Шопен, Антон Чехов һ.б. яфаланған. Әммә уны бөйөктәрҙең генә ауырыуы тип уйларға ярамай, ябай халыҡ та унан бик интегә. Матур яңғыраһа ла, ул сыҙап булмаҫлыҡ баш ауыртыуынан ғибәрәт. Өйәнәк өс сәғәттән бер нисә тәүлеккә тиклем дауам итергә мөмкин һәм был күренеш айына бер-ике тапҡыр ҡабатланыуы ихтимал.

Әлегерәк баш өйәнәген баш мейеһе тамырҙарының тарайыуына бәйләнәләр, гөмәлдә, киреһенсә, был осраҡта тар тамырҙар киңәйә һәм мейе ҡабығына тартыла. Уның барлыҡҡа килеү сәбәптәре төрлө: генетиканан да тора - әгәр әсә кеше ауырыһа, ул сирҙе балаларына ла "бүләк" итә. Ғәйеп кешенең үҙендә лә була ала. Мәҫәлән, ҡатын-ҡыҙҙар йылдар буйы диетала ултырырға ярата, был да мигрень сәбәптәренең береһе. Йәки ҡатын-ҡыҙҙарҙың ауыр көндәре алдынан йәки һуңынан, йәғни гормональ статус тотороҡло булмағанда баш өйәнәге башланыуы бар. Ял итмәйенсә туктауһыҙ эшләгәндә, эш күп булып, психоэмоциональ көсөргәнеш кисергәндә ауырыуҙы "эшләп" алырға мөмкин. Ғәҙәттә, 18 йәштән өлкән кешеләр сирләй һәм баш ауыртыуы 55-60 йәштәргә бөтә. Йышыраҡ маҡсатына ынтылышлы, үҙенә талапсан, ял итә, "юҡ" тип әйтә белмәгән кешеләр, шулай уҡ дөрөҫ туҡланмаусылар, һәм әйтеп китеүемсә, гормональ фоны тотороҡло булмаусылар ауырый. Шуға мигрень менән яфаланыусы ҡатын-ҡыҙға гинекологҡа, эндокринологҡа мөрәжәғәт итеп, гормональ статусын тикшертергә кәрәк. Дөрөҫ туҡланмаусылар тинем, сөнки баш өйәнәген ҡайһы бер аҙыҡ-түлек тә провокациялауы мөмкин. Мәҫәлән, сырҙарҙың ҡайһы бер төрҙәре, ҡыҙыл шарап, ҡуҙаҡлылар, помидор.

➔ **Моғайын да, башы ауыртмаған кеше бик һирәктер һәм ябай баш ауыртыуын мигрендән нисек айырырға?**

- Бының өсөн ябай ғына һорауҙарға "эйе" йәки "юҡ" тип яуап бирергә кәрәк. "Һуңғы өс айҙа башығыҙ ауыртҡанда йөрәгегеҙ болғанып, ҡоҫҡоғоҙ килдеме?", "Һуңғы өс айҙа башығыҙ ауыртҡанда яҡтылыҡ һәм тауыш нығыҡ ҡамасауланымы?", "Башығыҙ ауыртыуы бер көнгә эшмәкәрлегегеҙҙе, укыуығыҙҙы, әүҙемлегегеҙҙе туктаттымы?" Әгәр ошо һорауҙарҙың икеһенә генә "эйе" тип яуап бирәһегеҙ икән, баш ауыртыуығыҙ ябай ауыртыу түгел, ә өйәнәк.

➔ **Баш ауыртыуына башҡа нәмәләр ҙә сәбәп була ала бит...**

- Әлбиттә, ел һуҡҡанда ла баш ауыртыу мөмкин, әммә ауыртыу ауыртыуҙан айырыла. Нисек кенә булмаһын, башығыҙ нығыҡ йәки йыш ауыртып яфалаһа, мотлаҡ белгескә - терапевҡа йәки неврологҡа мөрәжәғәт итергә кәрәк. Сөнки баш мейеһе ҡан тамырҙары аневризмаһы, метастатик шеш, менингиома ваҡытында ла баш ауырта, күңел болғана. Табиптар иһә һеҙгә компьютер томографияһы, веналарға махсус шыйыҡса ебәреп, тамырҙарҙың патологияһын асыҡлаусы магнит-резонанс томографияһы тәғәйенләйәсәк.

➔ **Тимәк, әгәр был сир нәҫелдән бирелмәһә, уны булдырмаҫҡа ла мөмкин. Бының өсөн нимә эшләргә кәрәк?**

- Тәү сиратта эштә лә, ялда ла сама белергә. Әгәр заман талап иткәнсә бик күп эшләйһегеҙ икән, шуға ярашлы дөрөҫ ял да итергә кәрәк. Уларға мин йөҙөү, аутотренингтарға йөрөү, массаж, энә терапияһы, ароматерапияны индерер инем. Шулай уҡ дөрөҫ туҡланыу ҙа мөһим - һимерергә ярамай, күберәк һыу эсергә һәм провокатор ризыҡтарҙы ҡулланмаҫҡа. Һәм, әлбиттә, насар ғәҙәттәрҙән арынырға - тәмәке тартмаҫҡа, алкоголь ҡулланмаҫҡа.

**Земфира ХӘБИРОВА**
**әңгәмәләште.**

ТЕРЕКЛЕК МӘКТӘБЕ



# ҠЫРАҒАЙ ТӘБИҒӘТТӘ ТЕРЕ ҠАЛ



**Ҡырағай тәбиғәттә тереклек итеү серҙәрен беләһегеҙме? Ата-бабаларыбыҙҙың был тәжрибәһен онота барабыҙ, шулаймы? Онотмағандар ҙа барҙыр. Улар ололарҙан ишеткән-күргәндәрҙе иҫкә төшөрөп, редакцияға яҙып ебәргәнсе... күп йылдар "Дискавери" каналында "Нисек булһа ла тере ҡалыу" тигән тапшырыуҙарҙы алып барыусы Беар Гриллстың кәңәштәрен тәҡдим итә торамаҡсыбыҙ. Уның яҙмаларынан һыуыкта туңмаҫҡа, эҫелә һыуһыҙ интекмәҫкә, ут табырға өйрәнергә, ҡараңғы урманда аҙашмаҫҡа өйрәнергә мөмкин буласаҡ.**

## Елдән, ямғырҙан...

Һауа шарттарынан ниндәй хәүеф янауын тейешенсә баһаламау һеҙҙе теләнә ҡайһы урында ла ҡазаға килтереүе бар. Бының өсөн Сахараға, йә Антарктидаға юлланыу ҙа кәрәкмәй. Һауа торошон ихтирам итегеҙ, уны аңларға өйрәнегеҙ - шул саҡта тере ҡалырһығыҙ. Ел, ямғыр, һалҡын, эҫе менән ҡояштың һеҙгә нисек тәьҫир итеүен аңлау өсөн кеше тәненең температураға нисек яуап биреүен аңлау зарур. Кеше - "гомотермаль" йән эйәһе. Йәғни, кешенең тән температураһы гел бер кимәлдә һаҡлана. Быны һәр төрлө механизмдар көйләй. Мәҫәлән, беҙгә эҫе булһа, беҙ тирләйбеҙ - тәнебеҙ шулай һыуына; әгәр ҙә инде өшөнәк, ҡалтырана башлайбыҙ - был да рефлектор ҡуҙғыу. Ул беҙҙең мускулдарҙы хәрәкәткә килтерә. Ҡалтыранған саҡта беҙҙе өшөтмәй торған йылылыҡ шулай бүленеп сыға. Температураны бер кимәлдә һаҡлаузы тәьмин иткән механизмдар арҡаһында беҙ сатлама һыуыкта туңмайбыҙ һәм башыбыҙға эҫе ҡапҡанда ла бирешмәйбеҙ. Беҙҙең тәнебеҙ эсендә эҫе үҙәк - ядро бар. Ул ядро эсендә тереклек итеү өсөн мөһим ағзалар: мейе, йөрәк, үпкәләр, бауыр һәм бөйөрҙәр урынлашҡан. Әлеге эҫе үҙәкте сағыштырмаса һалҡын тышлыҡ - мускулдар, май һәм тире ҡатламдары ураткан. Үҙәктең температураһы ғәҙәттә 36,8 градус кимәлендә һаҡлана. Хатта үтә һыуыҡ һауа шарттарында ла кеше тәненең йылылығы әлеге билдәнән ике яҡҡа ла ике дәүмәлдән артыҡ үҙгәрергә тейеш түгел. Үҙәктең йылылығы 42,7 градусҡаса күтәрелһә йәки 28,8 градусҡаса төшһә, кеше эҫе тейеүҙән йә һалҡын алдырыуҙан һәләк буласаҡ.

Шуға ла һеҙ һыуыктан һәм эҫенән һаҡланыу сараларын яҡшы үҙләштерергә тейешһегеҙ. Ә һаҡлау саралары тигәндә мин палаткаларҙы һәм йоҡлау тоҡтарын ғына түгел, ә кейемдә һәм аяҡ кейемен дә күҙҙә тотам. Улар - тәбиғәт көйһөҙләнеүенән һаҡланыуҙың тәүге һыҙығы, сиге.

Инглиздәрҙә "Һалдаты аяҡтары һалдат итә" тигән бороңғо бер әйтем йөрөй. Был дөрөҫ. Шуға ла аяҡтарығыҙ һәм аяҡ кейемегеҙ тураһында хәстәрлек күрегеҙ.

● Әгәр ботинкаларығыҙҙы сискән саҡта уларҙың еүешләнгәнен күрһәгеҙ, эсенә гәзит тултырығыҙ. Йылы, еләҫ булмаһа киптерегеҙ. Асыҡ ут эргәһенә йәки нығыҡ эҫе урынға ҡуя күрмәгеҙ.

● Ботинка бауҙары һыуыкта туңмаһын тиһәгеҙ, уларға балауыҙ, май һылағыҙ.

● Ойоҡтарығыҙ йәки ботинкағыҙ аяғығыҙға тығыҙ булһа, улар ҡан әйләнешенә тоҡҡарлыҡ яһай һәм шунлыҡтан аяҡтар тиҙ өшөй. Был хәл булмаһын өсөн аяғығыҙ менән аяҡ кейемегеҙ араһында бушлыҡ ҡалырға тейеш.

● Һәр ваҡыт үҙегеҙ менән бер нисә пар таҙа ойоҡ алығыҙ. Аяғығыҙ һыулаһа, тиҙ арала ойоҡтарығыҙҙы алыштырыу сараһын күрегеҙ.

**Беар ГРИЛЛС.**
**(Дауамы бар).**

УҢЫШ ҠАҘАН



# ҮҘ-ҮҘЕҢӘ ЫШАНЫУҘЫҢ ТӨП СЕРҘӘРЕ

**Үҙебеҙ менән нығыраҡ ҡыҙыҡһынабыҙ**

Был кеше фиғеленең үҙенсәлеге. Беҙ хис-тойғолар кисерәбеҙ, хафаланабыҙ. Сифатлы һәм ыңғай аралашыуға эйә булыу өсөн башҡалар менән ҡыҙыҡһынырға тейешбеҙ. Аҡыллы, тәрән фекерле комментарийҙар яһау, аҡылыбыҙҙы раҫлау өсөн ылыҡтырғыс, мажаралы хәл-ваҡиғалар һөйләү ҙә кәрәкмәй. Иң мөһиме - ихлас булыу.

Аралашыу - ике яҡлы процесс икәнлеген иҫегеҙҙән сығармағыҙ. Кемдер - һөйләргә, икенсе берәү тыңларға тейеш. Иғтибарҙарын йәлеп итеп алмайынса, башҡаларҙы үҙегеҙҙе тыңларға мәжбүр итә алмаясаҡһығыҙ. Ә уларҙың иғтибарын бары тик уларҙы ҡыҙыҡһындырған сығыш менән генә йәлеп итергә мөмкин. Кешеләрҙе нимә ҡыҙыҡһындыра? Әлбиттә, үҙҙәре! Уларҙың нимә эшләгәне, нимә планлаштырғаны, ҡайҙа барғаны, нимә кисереүе буйынса фекер алышҡыһы килә.

Аралашыуҙың иң таралған һәм һәләкәтле хаталарының береһе - әңгәмәсендә ниндәйҙер бер типҡа индереп, ошо ҡалыптан сығып фекер алышыу. Ҡайһы берәүҙәр ҡатын-ҡыҙ бары тик йорт, рецептар йәки балалар тураһында ғына һөйләшергә мөмкин, тип уйлай. Әммә бик күп ҡатын-ҡыҙ һуңғы сәйәси яңылыҡтар, аң серҙәре, автомобилдәр һәм башҡа темалар буйынса төплө фекер йөрөтә ала. Шулай уҡ ир-атҡа ла айырым ҡыҙыҡһыныуҙар хас, тигән ҡараш йәшәй. Йәнәһе, уларға фонд биржалары, футбол һәм балыҡсылыҡ ҡыҙыҡ. Шуға ҡарамаҫтан, уларҙың күптәре кулинария, сәнғәт, кейем-һалым һәм камиллашыу тураһында һөйләшергә ярата. Шуға күрә иң яҡшыһы - әңгәмәсендең ҡыҙыҡһыныуҙарын асыҡлау. Үҙе тураһында һөйләшкәндән һуң кешеләр үҙ фекерен белдерергә тырыша. Ҡайһы бер ваҡытта хатта үҙҙәре ни икәнен дә белмәгән нәмәләр хаҡында шундай аҡыллы итеп хәбәр һаталар, бик аҙҙар ғына үҙ фекере булмауын таный. Уның урынына улар шунда уҡ ниндәйҙер уйҙырма уйлап сығара. Хатта ул яңылыш фекер булһа ла, кешегә уны әйтеп ҡалыу мөһимерәк.

Ҡыҙыҡһыныу кимәле буйынса икенсе тема булып һеҙҙе урап алыусылар тора. Беҙ уларҙан ысын ҡәнәғәтләнеү кисерәбеҙ. Ҡайһы бер ваҡытта беҙ башҡалар тураһында һөйләгән һүҙҙәрҙең аныҡ дәлилдәре лә булмай, әммә һәр кемдең һүҙ әйтеү хоҡуғы бар. Бында барлыҡ сер шунда йәшеренгән: фекер алышынған кеше тураһында әйтелгәндәргә ҡаршы килмәйенсә, уның ыңғай сифаттарын күрһәтергә кәрәк. Кеше аңын бер нисек тә үҙгәртеп булмай, ә был тактика, һәр хәлдә, һөйләшеүҙе ыңғай яҡҡа бороп ебәрергә ярҙам итер.

Кешеләр бөтөн нәмә буйынса фекер алышырға әҙер. Бында ла һеҙ яҡшы тыңлаусы булып, бик күп файҙалы нәмәләрҙе белә алаһығыҙ. Тегейәки был өлкәне биш бармағыңдай белгән кешеләрҙе тыңлап, насар булмаған белгескә әүереләсәкһегеҙ һәм бик күп темалар буйынса һөйләшеүҙә ҡатнаша аласаҡһығыҙ.

Һәм кешеләр һөйләшергә теләгән теманың иң һуңғыһы - һеҙ. Уларҙың беҙҙең ауырыуҙарыбыҙ, проблемаларыбыҙ, тормошҡа кире ҡарашыбыҙ тураһында һөйләшкеһе килмәй. Эске тауышығыҙға ҡолаҡ һалығыҙ һәм "мин" тигән алмашты йыш ҡулланаһығыҙ икән, уны "һин" тигәнгә алмаштырырға тырышығыҙ!

**Роберт ЭНТОНИ.**
**(Дауамы бар).**

БАШ ЭШЛӘТМӘК

## "САЛАУАТ ЮЛАЕВ" ХОККЕЙ КОМАНДАҺЫ

1

2


1 — Хәҙергә заман сәсәне; (...) ямғыр теләй, юлсы аяҙ теләй; Әлесәй; Һыу үткәрмәй торған беше туҡыма; Батыр; 2

3 — "Салауат Юлаев" хоккей командаһының баш тренеры; Н. Асанбаев пьесаһы; (...) ҡәҙерен әсә белер, ир ҡәҙерен ил белер; Емерек төҙөлмә; Ат алһаң (...) кәрәк, ҡатын алһаң бары ла кәрәк; 4

Гүзәл Ситдиҡованың тыуған ауылы; Ҡояш күтәрелгән тараф; Иң билдәле Европа музейы; Алабута аш булмаҫ, (...) бутаған иш булмаҫ; Сыуаш шағиры; Умарта эсенә ҡатылған таяҡтар

(...) килһәң, әлек кил, үҙ ҡәҙереңде белеп кил; (...) майлаған һайын шымара; "СЮ" командаһының "19"сы уйынсыһы; Оло йәки бейек (иҫк.); Хакимлек; Серек (...) шына тотмаҫ; Башҡортостандағы район; ⌘

Р. Фәхретдинов етәкләгән журнал; (...) балдан татлы; Алдар батыр яулаған диңгеҙ; Бөйөк Ватан һуғышы танкы

3

4


Кешегә шәфҡәт ит, (...)ға хөрмәт ит; Тап-тирәктә (...) бешмәй; Күҙ сәсселгән арыш; Сергей Соиндың һаны; Вайымһыҙҙың эше (...)һыҙ; Көньяҡ Америка дәүләте; (...) сырай - таҡта сәй

**Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.**

**3-сө һандағы сканворд яуаптары. Горизонталь буйынса:** Панбархат. Новороссийск. Тамаша. Тараҡ. Баҙар. Думбыра. Ореол. Мәғрифәт. Ликер. Волгоград. Ацтек. Смоленск. Ҡот. Маяҡ. АҠШ. Салфетка. Катакомба. Рәсми. Ассонанс. Старт. Ҡама. Одесса. Тимберс. Аласыҡ. Фатиха. Алабута. Осло. Ресторан. Брест. Ябалаҡ. Форсат. Яңылыҡ. Усаҡ.

**Вертикаль буйынса:** Ҡыяҡ. Дилетант. Арест. Шәкерт. Бөгөм. Ҡата. Алым. Нота. Балдаҡ. Афиша. Биография. Проза. Спорт. Аврора. Баск. Ятаҡ. Тәре. Масштаб. Ажау. Хәйерселек. Ахыр. Ҡурмас. Ситса. Ныҡлыҡ. Маҙа. Саҙаҡа. Ляпис. Рельеф. Ойошма. Елкән. Ниәт. Аҫырау. Кефаль. Сабата.

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1438 һижри йыл.*

| Ғинуар - Февраль (Йомадиәл әүүәл) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалка | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 30 (2) дүшәмбе | 7:41 | 9:11 | 13:30 | 16:17 | 17:47 | 19:17 |
| 31 (3) шишәмбе | 7:39 | 9:09 | 13:30 | 16:19 | 17:49 | 19:19 |
| 1 (4) шаршамбы | 7:38 | 9:08 | 13:30 | 16:21 | 17:51 | 19:21 |
| 2 (5) кесе йома | 7:36 | 9:06 | 13:30 | 16:23 | 17:53 | 19:23 |
| 3 (6) йома | 7:34 | 9:04 | 13:30 | 16:26 | 17:56 | 19:26 |
| 4 (7) шәмбе | 7:32 | 9:02 | 13:30 | 16:28 | 17:58 | 19:28 |
| 5 (8) йәкшәмбе | 7:30 | 9:00 | 13:30 | 16:30 | 18:00 | 19:30 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

## ЯРҘАМ ҺОРАЙБЫҘ!

Баймаҡ районы Муллаҡай ауылының тарихи ҡомартҡыһы - данлыҡлы дин һәм мәғрифәт әһеле Ғабдулла Сәиди исеме менән бәйле иман йорто янып китте. Хәҙер уны ҡайтанан төҙөү талап ителә. Ошо эштә изге кешеләрҙең ярҙамына өмөт итәбеҙ. Һаҡлыҡ банкында асылған иҫәпкә аҡса күсерергә теләүселәр өсөн реквизиттар:

Банк получателя:
**Доп. Офис №8598/0736 ПАО Сбербанк**
Кор/счет: **30101810300000000601**
Бик банка: **048073601**
Счет получателя: **42307810606436103834**
ФИО получателя:
**Рахимов Хайбулла Гайфуллович.**
Телефон: **7-962-521-3166**

ХОККЕЙ

# ИҪӘПТӘР ҘУР...

## ләкин беҙҙең файҙаға түгел

**Өфө "КХЛ йондоҙҙары матч"ын ҡабул иткән ваҡытта, "Салауат Юлаев" хоккей командаһы ситтә уйындар уҙғарҙы.**

"Барыс" менән осрашыуҙа иҫәпте юлаевсылар асты. Ләкин икенсе осорҙа хужалар 3 минут эсендә Андрей Гаврилов ҡапҡаһына бер-бер артлы өс гол индерҙе. Ләкин был һөжүмдәр юлаевсыларҙы албырғытманы, ә, киреһенсә, сәм өҫтәне һәм улар иҫәпте тигеҙләүгә өлгәште. Өсөнсө осор бер командаға ла мәрәй килтермәне. Барыһын да өҫтәлмә уйын минуттары хәл итте - был матчта еңеүҙе, 4:3 иҫәбе менән, "Барыс" үҙ тартмаһына һалды.

"Аҡ барс" менән "Салауат Юлаев"тың һәр осрашыуын хоккей яратыусылар көтөп ала, сөнки был уйындар ваҡытындағы көсөргәнешлек, ҡомар, еңеүгә ынтылыш тағы ла көсәйә. Был юлы ла "йәшелдәр алышы" ҡыҙыу булды. Сәкәндәрҙән осҡондар сәсрәне, эмоциялар ташып торҙо. Команда уйынсылары бер-бер артлы штрафсылар эскәмйәһендә "ял" итеп алырға йыш туҡтаһа ла, төп уйын ваҡыты 5:5 иҫәбе менән тамамланды. Овертаймда иһә тағы ла хужалар уңышлыраҡ булып сыҡты - юлаевсылар ҡапҡаһына тағы бер гол "сәпәне". Матч һөҙөмтәһе - 6:5.

"Витязь" командаһы менән матч та Өфө хоккейсыларына еңеү шатлығы килтермәне. Буллитҡа тиклем барып еткән осрашыуҙың төп уйын ваҡыты шулай уҡ тигеҙ иҫәп - 3:3 менән тамамланды. Тәүҙә "Салауат Юлаев" көрәштәшен ҡоро иҫәп менән еңеп барһа ла, хужалар үҙҙәрен ҡулға алып, уйынды өҫтәмә ваҡытҡа күсерә алды. Барыһын да буллит хәл итте - еңеү "Витязь" кеҫәһендә. Иҫәп 4:3.

Мәскәүҙәге уйындан һуң юлаевсыларҙың хәле тағы ла мөшкөлләнде. "Динамо" менән матч та, хужалар файҙаһына, 6:2 иҫәбе менән тамамланды. Ағымдағы ситтәге уйындарҙа Өфө командаһы әлегә тиклем бер уңышҡа ла өлгәшмәне. Был ни хәл? Уйынсыларҙың арығанлығымы, үҙ эштәренә ҡарата битарафлығымы, еңеүгә булған ынтылыш юҡлығымы, әллә башҡа төрлө сәбәпме? Һәр хәлдә, Континенталь хоккей лигаһында иң көслө командаларҙың береһе һаналған "Салауат Юлаев"тан көйәрмәндәр бындай кимәлдәге уйындар көтмәй. Оҙаҡламай старт аласаҡ плей-оффҡа Игорь Захаркин тәрбиәләнеүселәре ниндәй һөҙөмтә менән барып инер? Әлеге ваҡытҡа иһә юлаевсылар 81 мәрәй менән көнсығыш конференцияһының 5-се баҫҡысын биләй.

**Гөлназ МАНАПОВА.**

Хеҙмәттәшебеҙ Миләүшә Ҡаһарманованың, әсәһе

**Ҡаһарманова**
**Аэлита Ялал ҡыҙының**

вафаты сәбәпле, ауыр ҡайғыһын уртаҡлашабыҙ.

**Донъя бер мосафирханалыр, инсан да рухтар ғәләменән, әсә ҡарынынан, балалыҡтан, йәшлектән, ҡартлыҡтан, ҡәбер ғәләменән әхирәткә күсеп киткән бер юлсылыр. Ауыр тупрағы еңел булһын мәрхүмәнең.**

**"Киске Өфө"ләр.**

ИҒТИБАР: АКЦИЯ!

# ҺӘР КЕМ УҠЫРҒА ТЕЙЕШЛЕ...

## йөҙ башҡорт китабы




**"Башҡорт китабы топ-100+" акцияһына килгән тәҡдимдәр, ниһайәт, күбәйә башланы. Тиҙ арала һәр быуын башҡорто уҡырға тейешле китап/әҫәрҙәр исемлеген гәзит уҡыусылар ярҙамы менән теүәлләп, билдәләп бөтөргә өмөт итәбеҙ.**

**40. Мәрйәм Бураҡаева "Арғымаҡ".** "Был китап минең ҡулыма уйламағанда килеп эләкте. Һеңлемдең ҡыҙы былтыр "Йәйләү" балалар лагерында ял итте. Шунда яҙыусының автографы ҡуйылған ошо китапты таратҡандар. Һеңлемдең өҫтәлендә ятҡан "Арғымаҡ"ты асып уҡый башлағайным, уҡып бөтмәйенсә китаптан айырыла алманым. Минеңсә, ул һәр башҡорттоң китап кәштәһендә генә түгел, өҫтәлендә ятырға тейеш. Бигерәк тә балалар, йәштәр уҡып сыҡһын ине. Оло һәм урта быуын инсандары ла уҡып, үҙ балаларын рухлы итеп тәрбиәләмәй, милләтебеҙгә ни тиклем зыян килтереүен аңларға, үкенергә һәм ошо хәлде үҙгәртергә тырышыр ине. Яҙыусыбыҙ Мәрйәм Бураҡаеваның аҡылына хайран ҡалып, өс тапҡыр уҡып сыҡтым ул китапты. Автор үҙе әйтмешләй, арғымаҡлы булайыҡ, йәмәғәт", - тип яҙа Өфө ҡалаһынан Рәйсә Ҡарабаева.

**41. Ибраһим Ғиззәтуллин "Үлгәндән һуң утыҙ йыл".** "Башҡорт Корчагины" булып танылған яҙыусының автобиографик повесын һәр кемгә уҡып сығырға тәҡдим итәм. Дәһшәтле һуғыш һынауҙарын үткән Фәһим, уның уң ҡанаты Зөһрәнең тормошо бөтәһенә лә үрнәк. Көслө рухлы, тырыш, бөтә ауырлыҡтарҙы еңеп сыға алған кеше миҫалын күргегеҙ килһә, ошо китапты уҡығыҙ", - тип яҙа Күгәрсен районынан Мәрйәм Һайранова.

**42. Таңсулпан Ғарипова "Бөйрәкәй".** Айырыла алмай уҡыған китаптарымдың береһе - "Бөйрәкәй". Роман-эпопеяла һүрәтләнгән осор, геройҙарҙың яҙмышы шул тиклем ҡыҙыҡлы. "Бөйрәкәй"ҙә Лев Толстойҙың "Һуғыш һәм солох" эпопеяһындағы кеүек заманалар афәте, кешеләр ярмышы сағылдырыла", - тип яҙа Өфөнөң Ноғай ҡасабаһынан Рәйсә Әсәҙуллина.

Хөрмәтле гәзит уҡыусыларыбыҙ! **"Башҡорт китабы топ-100+"** акцияһына ҡушылығыҙ, үҙегеҙ уҡыған башҡорт китаптары/әҫәрҙәре араһынан иң-индәрен һайлап, шулар тураһында редакциябыҙға төбәп хаттар яҙығыҙ. Йәки "Бәйләнештә" социаль селтәрендәге "Киске Өфө" гәзите" төркөмөндә махсус булдырылған **"Башҡорт китабы топ-100+" акцияһы"** тип аталған фекер алышыу битендә "#башкитап" хештегы ҡуйып, үҙ фекерегеҙҙе белдерегеҙ!

**Рубриканы
Сәриә ҒАРИПОВА
алып бара.**

ВИКТОРИНА



# ӘҘӘБИӘТ ҺӘМ ӘҘИПТӘР

**Был юлы Флүр Ғәлимовтың "Яңы башҡорт" романы буйынса һорауҙар тәҡдим итәбеҙ.**

**1. Әҫәр геройы коммерция менән шөғөлләнергә ҡарар итә, сөнки:**
а) аҡсаһыҙлыҡтан интегә;
б) йүнле эш таба алмай;
в) бизнесмендар тураһында роман яҙыуҙы маҡсат итә.

**2. Нисәнсе йылдарҙа һәм кем тарафынан илдә "спекуляция" термины "коммерцияға" әүерелеп китә?**
а) 80-се йылдар аҙағында М.С. Горбачевтың указы менән;
б) 90-сы йылдар башында;
в) 2000 йылда.

**3. Геройҙың фекеренсә, ер йөҙөндәге иң ауыр енәйәт нимә ул?**
а) кеше үлтереү;
б) үҙ-үҙенә ҡул һалыу;
в) урлашыу.

**4. Рәсәй халҡы етәкселәренән ниндәй мөнәсәбәткә күнеккән?**
а) дөрөҫлөк-ғәҙеллек яҡлауына;
б) "ҡамсыға" йә "ҡаласҡа";
в) яҡшы эш хаҡы түләүҙәренә.

**5. Герой баҙарҙа йөрөп, "Кем коммерцияға килә?" тигән һорауға ниндәй һығымта яһай?**
а) аҡсалыраҡ кеше;
б) эшһеҙ кеше;
в) тәүәккәлерәк кеше.

Ҡәҙерле дуҫтар! Кем дә кем беҙгә **246-03-24** номеры буйынса шылтыратып, ошо һорауҙарға дөрөҫ яуап әйтә, шул уҡыусыбыҙға Флүр Ғәлимов үҙенең автографы ҡуйылған, күптән түгел З. Биишева исемендәге "Китап" нәшриәтендә яңынан нәшер ителгән "Яңы башҡорт" романын бүләк итмәксе. Үткән уйын йомғаҡтары буйынса Спартак Ильясовтың автографы ҡуйылған "Бығылый" китабын Өфө ҡалаһының 18-се мәктәбе башҡорт теле уҡытыусыһы Әлфиә Зәбдинова отто! Йәгеҙ, кем алыҡ?

**Викторинаны Иҙел РӘХИМОВ алып бара.**

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ



### М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**28 ғинуар "Мин һинең ҡәйнәң булам"** (С. Белов), комедия 12+
**29 ғинуар "Джут"** (О. Жанайдаров), драма 16+
**31 ғинуар Арыҫлан Йәнбәковтың** хәтер кисәһе 6+
**1 февраль "Хыялға ҡаршы"** (А. Ишбулдина, А. Баймөхәмәтовтың "Ҡалдырма, әсәй!" повесы буйынса) 12+
**2 февраль "Ҡара йөҙҙәр"** (М. Ғафури, А. Абушахманов, Ш. Ғилманова инц.) 16+
**3 февраль "Мин - ҡатын-ҡыҙ"** (Т. Миңнуллин), бишек йыры 12+

### М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**2 февраль "Ғәйфи ағай, өйлән давай!"** (Г. Зәйнәшева), комедия 16+
**3 февраль "Тылсымлы тирмән"** (М. Кәрим), әкиәт. Башлана 10.00, 12.00 0+
**3 февраль "Ҡарт кейәүҙәр, йәки Шомбай ҡоҙа"** (Ф. Бүләков), фольклор комедия 6+
**4-5 февраль "Чиполлино"** (Д. Родари), мажара. Башлана 12.00 0+

### Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**28 ғинуар "Кот в сапогах"** (Н. Шувалов). Башлана 12.00, 14.00 0+
**29 ғинуар "Маша и Медведь"** (Г. Ландау, В. Швембергер). Башлана 12.00, 14.00 0+
**29 ғинуар "Айыу бабай"** (С. Әлибай). Башлана 13.00

### Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**2 февраль "Ҡурай байрамы. Ел тыуҙырған моң..."** Концертта Азат Айытҡолов, Римма Амангилдина, Марсель Ҡотоев, Аяз Нухов, Артур Ғайсаров, шулай уҡ "Арғымаҡ" этно-рок төркөмө һәм Башҡортостандың Халыҡ уйын ҡоралдары милли оркестры ҡатнаша. 6+

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# КӨСӘНГӘН ЕҢМӘЙ,

## көсө күп еңә

Ер баҫтырығы - тау, тау баҫтырығы - таш, ил баҫтырығы - баш.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Эш урыныңды ваҡытында ҡалдырыу кәрәк. Ижадының һүрәнләнә башлауын тамашасы тоймаҫ элек сәхнәне ҡалдырған балет бейеүсеһе һымаҡ.

**(В. Оствальд).**

Ни өсөн беҙ техник вуздарҙа материалдарҙың ҡапма-ҡаршылығын өйрәнәбеҙ, ә педагогик уҡыу йорттарында тәрбиә барышында шәхестәрҙең ҡапма-ҡаршылығын өйрәнмәйбеҙ?

**(А. Макаренко).**

Әгәр ҙә кемдер белем тауының иң юғарғы баҫҡысында торам, тип иҫәпләй икән, тимәк, ул әле белем тауының иң аҫҡы баҫҡысында ғына.

**(Соломон Рысинский).**

Аҡылһыҙҙар менән идара итеүгә ҙур аҡыл, наҙандар менән идара итеүгә ҙур белем кәрәкмәй.

**(Эстебан де Эсмир).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Илдә енәйәтселек, боҙоҡлоҡ күп булыуына зарлана икән бер егет. Халыҡты нисек итеп тәртипкә күндерергә тип баш вата икән. Ошо һорау менән бер аҡһаҡалға барған был. Аҡһаҡал унан һорай икән: "Ә боҙоҡлоҡ ҡылған кешегә иң ҡаты яза ни була, тип уйлайһың һуң?" "Үлемдер, моғайын" , - ти егет. "Юҡ, улым, үлем түгел, - ти аҡһаҡал, - киреһенсә, ҡартайып, бер кемгә кәрәгең булмайынса, үлә алмай йөрөү иң яманы", - ти икән аҡһаҡал. "Һуң, ул енәйәт ҡылған боҙоҡ әҙәмдәр башлыса йәштәр бит, уларға нисек бындай язаны бирәһең?" "Хоҙай Тәғәләнән бер йәш енәйәтсене ғибрәт өсөн ҡартайтып, үлә алмай йөрөгән бер өрәккә әйләндереүен һора, - ти икән аҡһаҡал. - Тик был ғәмәлде бар халыҡ алдында ҡылдырырға кәрәк. Һора шуны Хоҙайҙан". Егет ышаныр-ышанмаҫ ҡына халыҡты йыя, бер иң яман енәйәтсене тотоп килтереп, халыҡ алдына баҫтыра ла, үҙенең хөкөм ҡарарын иғлан итә: "Был бик күп енәйәттәр ҡылған, бик күп кешеләрҙең ҡарғышын алған әҙәм хәҙер һеҙҙең күҙ алдында бер кемгә кәрәкмәгән, үлә алмаған ҡартҡа әйләнһен" - ти. Һәм ни мөғжизә! Йәп-йәш егет халыҡтың күҙ алдында һөйкөмһөҙ бер ҡартҡа әйләнә. Үҙенең был хәлен күргән егет йүгереп барып упҡынға ырғый, ләкин унан тағы ла ҡот оҫҡосораҡ, имгәнгән, яраланған йән эйәһе булып килеп сыға. Шунда ул үҙенең үлә алмай, бер кемгә лә кәрәкмәгән ләғнәтле йән эйәһе булып йөрөйәсәге, шундай хөкөмгә дусар ителеүе тураһында аңлай. Был хәлдә күргән халыҡ тәүбәгә килә. Ошо хәлдән һуң был илдә бер енәйәт тә ҡылынмай, ти".**

1582218911006

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Гөлназ МАНАПОВА,
Илгиз ИШБУЛАТОВ,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
Беҙҙең блог: **blog.kiskeufa.ru**
E-mail: **info@kiskeufa.ru**
**kiskeufa@mail.ru**
«ПечатниК» яуаплылығы сикләнгән йәмғиәте типографияһында баҫылды (450059, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Комсомол урамы, 27/1).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | 253-25-44 |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | 246-03-24 |
| **Бухгалтерия** | 246-03-23 |
| **Хәбәрселәр** | 252-39-99 |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 27 ғинуар 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**

Тиражы - 5007
Заказ - 155/01